*Киң күңеллелек - ул кешенең байлыкка, ярлылыкка, башкаларҙың мактау-көмһетеүҙәренә каршы тормай, донъя үҙгәрештәренә кайғырмай, ғәйрәтенә һәм дәрәжәһенә көмселек килтермәй торған кеүәтелер. Йәғни, киң күңелле кеше бай булһа - маһаймай, фәкир булһа - көмһенмәй, халыктың мактауына кыуанмай, яманлауына кайғырмай, донъяларҙың үҙгәреүенә һис тә иҫе китмәй, үҙ дәрәжәһен һәм абруйын һаклап кына йәшәп ятыусы ул.*

*Акһакалдар акылы.*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23 - 29 АПРЕЛЬ (АЛАҒАРАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хакы ирекле

№17 (435)

## БЫЛ ҺАНДА УКЫҒЫҘ:

**Сәйәси темаға...**

якын да ебәрмәйҙәр



4

**Бөйөк Тукайҙың әсәһе...**

ғәйнә башкорттарынан



6

**Туған телемде белмәү...**

мин башкорт түгел тигәндә аңлатмай әле



8-9

**Марттың игеҙ шатлығы,**

йөрәк типте талпынып...



11

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Салауат Юлаев" хоккейсыларының еңеүе тормошобоҙҙа патриотлыкка урын барлығын раҫланымы?

*Заһир САЛИХОВ, тарих укытыусыһы:* Минең өсөн иң мөһиме - хоккейсыларыбыҙҙың милли батырыбыҙ Салауат Юлаев исеме аҫтында сығыш яһауы, ошо исемде еңеү байрағы итеп күтәрә алыуында. Бына был һәр башкортта патриотлык тойғоларын дөрләтеп ебәрҙе. Был "Салауат Юлаев" командаһының тәүге еңеүе түгел, унын лайыклы һәм көслө команда булыуы ла шик тыуҙырмай. Шуға карамаҫтан, үҙәк мәғлүмәт саралары тарафынан "йөмортканан йөй эҙләү", беҙҙең каҙаныштарҙы кире кағырға, күрмәмешкә маташыуҙар бар. Сәйер, бындай мөнәсәбәттең сәбәптәре әлеге лә баяғы шул төбәк мәнфәғәттәрен баҫымсаклауға, тел һәм милләт-ара мәсьәләләрҙе һанламауға барып тоташа. Ә бит "Көслө төбәктәр - ул көслө Рәсәй," тибеҙ. Кайҙа бында логика? Патриотлык тигән нәмә онотолдо илебеҙҙә. Хәҙер беҙ һәр нәмәлә Американан күрмәксе кыланабыҙ. Рәсәйҙе көслө ил итеү өсөн уны иң тәүҙә яратырға, уны бар иткән халыктар һәм төбәктәр кеүәтен үҫтерергә кәрәк. Башкортостанда төрлө милләт халыктары йәшәй һәм уларҙа патриотлык тойғоһонон көслө булыуы әлеге хоккейсыларыбыҙ еңеүендә бик асык сағылды.

*Салауат ҒӘЛЛӘМОВ, ғалим:* Әлбиттә, раҫланы! Республикабыҙ атамаһын, Салауаттың исемен бөтә донъяға яңғыраттылар бит! Башкортостан бөтөнләй көтөлмәгән яктан асыла донъяға. Ғөмүмән, халкыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадынан күренеүенсә, беҙҙең егеттәр борон-борондан бәйгелә таҫыл, ук атыуҙа мәргән, алыш-көрәштә тауҙар, урмандар күсерерлек көс-кеүәтле, елдән етеҙ йүгерек булған. Кайҙа бөгөн беҙҙең ана шундай батырҙарыбыҙ? Спорт уйындарын һәр бер ауылда таратырға, ойоштороорға кәрәк! Мәҫәлән, ниңә әле элекке спорт уйыны - сәкән һуғыуҙы тергеҙмәҫкә? Атайымдың һөйләүе буйынса беләм, бәләкәй сакта был уларҙың яраткан уйыны булған. Шул ук хоккей менән бер бит ул! Шуныһы отошло: бының өсөн бер ниндәй сығымдар ҙа кәрәкмәй. Америкала, Һиндостанда сәкән һуғыу буйынса донъя беренселегенә ярыштар үтә хатта, ә Иранда уны һыбай уйнайҙар. Англияла үҙем күргәнем булды: Гайд-паркка сығып, катын-кыҙ сәкән һуға. Боронғо милли уйындарыбыҙға нигеҙләнгән спорт төрҙәрен үҫтерергә кәрәк, һәм унда мотлак башкорт егеттәре һәм кыҙҙары катнашһын. "Салауат Юлаев" хоккейсыларының еңеүенә шатмын, шул ук вакытта ул мине бына ошондай уйҙарға һала.

*Артур БАТЫРШИН, программист:* Беренсенән, беҙҙең Өфө хоккей командаһына "Салауат Юлаев" исемен биреү бик тә дөрөҫ карар булған. Хәҙер беҙҙең милли геройыбыҙҙы бөтөн Ер шары белә. Һәр илдә хоккей ятыусыларҙың йөҙҙән береһе үҙенә: "Ни өсөн "Салауат Юлаев", кем ул?" - тигән һорау бирһә, бик якшы. Батырыбыҙҙың даны тағы ла артыр. Салауат рухы, көсө команданың һәр бер уйынсыһына ла, һәр көйәрмәнгә лә күскәндер, тим. Салауат исеме һаман да беҙҙең Башкортостаныбыҙ өсөн, һәр башкортостанлы өсөн патриотлык, илһөйәрлек символы булып кала, шулай дауам итһен. Был йәһәттән йәш "Салауат Юлаев" командаһына өмөт менән карайым, сөнки унда күп кенә башкорт егеттәре уйнай. Төп командала ла тиҙҙән башкорт уйынсылары булыр, тип ышанам.

*Фәриҙә ИШБИРҘИНА, пенсионер:* Тормошта батырлыкка һәр сак урын булған кеүек, патриотлык, йәғни илһөйәрлеккә лә урын бар. Каһарман егетебеҙ - Параолимпия чемпионы Ирек Зариповтың еңеүҙәре үҙе генә ни тора! Уның аша Башкортостан тигән илде донъя кимәлендә таныусылар тағы артты. Хоккей мәктәбе лә якшы үҫешкән беҙҙә, тик был спорт төрөнә калаларҙа ғына түгел, ауылдарҙа ла киң юл асылһын ине. Әле яңырак кына "Киске Өфө"нөң 11-се һанында тап ана шундай бер ауыл хоккей командаһы тураһында укып шатландым. "Хоккей буйынса чемпиондар ауылдарҙан юл башлай", тип яҙа журналист Радик Өмөткужин Әбйәлил районы Әлмөхәмәт ауылында ойошторолған "Акбуҙат" хоккейсылары хакында. Команданың тренеры Шафик Хәмитовтың был хеҙмәте юғары баһаға лайык. Тап уның егеттәре киләсәктә "Салауат Юлаев" командаһының төп көсөнә әйләнер ҙә, бәлки, кем белә? Шулай була күрһен! Юғары спортка юл асык, афарин "Салауат Юлаев" командаһына! Батырыбыҙ исеменә тап төшөрмәнеләр. Уларҙың еңеүе Башкортостанда йәшәгән бөтә халыктарҙың да уртак шатлығы булып урғылды.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**яҙып алды.**

*Аһ-Аһ!*

# БЫЛ КОШТАРҒА НИ БУЛҒАН?



**Республика орнитологтары хәүеф белдерә! Баш калаға әле булһа йылы яктан кара карғалар кайтмаған. Башкортостан Республикаһы Орнитологтар йәмғиәте етәксеһе Виктор Валуев белдереүенсә, 40 йыл алып барылған тикшереүҙәр эсендә бындай хәл беренсе тапкыр күҙәтелә.**

**(Дауамы 15-се биттә).**

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# АТ МЕНӘН ҠЫҘҘЫ...
## ауылдан алма

**Был әйтемдең төрлө варианттары ла бар, шуларҙың бер нисәүһе: "Ете ата-бабаңды, шәжәрәңде ятҡа бел" "Ете атаға еткәс, ҡыҙ бауыры алышыныр", "Ете атаһын белмәгән мөртәт", "Ете ауылда ете ҡәрҙәшең булһын" һ.б. Был әйтемдәр барыһы ла милләттең тулы ҡанлылығын һаҡлауға, уның сәләмәтлеген булдырыуға йүнәлтелгән.**

Совет осоронда ҡайһы бер ауылдар "Ситтән ҡыҙ алмайбыҙ, ситкә ҡыҙ бирмәйбеҙ" тигән принцип менән тик бер ауыл эсендә никахлашып, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар бер-берсһен ҡунаҡҡа саҡырышып, йәшәп тик ятты. "Үгәй ҡыҙыма ғашиҡ булып атайым өйләнде..." тигән һүҙҙәрҙән башланған мәрәкәле һәм ғибрәтле лаҡап та тап шул осорҙа тыуғандыр. Минең яҡын бер танышым хатта үҙенең ике туған һеңлеһенә өйләнде. Дәғүәләремә белдергәйнем: "Ҡалайтайым инде, бер-беребеҙҙе үлеп яраттыҡ, бер-беребеҙһеҙ йәшәй алмағас, өйләнештек инде", - тип яуап бирҙе ул. Ул хатта балаларының да һап-һау, аҡылға камил булып тыуыуы хаҡында шатланып белдерҙе. Уның күңелен төшөргөм килмәгәс, артабан өндәшеп тормаһым инде. Сөнки "Атаға оҡшап ул тыумаҫ, әсәгә оҡшап ҡыҙ тыумаҫ", тигән әйтем дә бар. "Тәбиғәт балаларҙа ял итә, өйәнейәнсәрҙәрҙә йәшәй", тип тә әйтәләр бит. Йәғни яҡын туғандарҙың никахынан тыуған өйән-өйәнсәрҙәрҙә норманан тайпылыуҙар башланырын көт тә тор. Ете атаға еткәс кенә ҡыҙ бауыры алмашыныуы, тап шуның өсөн дә ете атаңды белеү башҡорт кешеһе өсөн мотлаҡ үтәлә торған ҡағиҙә булыуы анлашыла бында. Ете атаһын белмәгәнде мөртәт тип атау ҙа дөрөҫ. Ҡатыраҡ әйтелһә лә, милләттең тулы ҡанлылығын һаҡлау күҙлегенән ҡарағанда, сәптең ҡап уртаһына тейерлек һүҙ.

Шуға күрә кем дә кем бөгөн үҙ туған ауылынан ҡыҙ ала, шул мөртәт тип аталырға хаҡлы. Әгәр ҙә өйләнешеүсе яҡын туған тейешле ҡыҙ менән егет был ҡағиҙәне белмәй икән, был аҡылды, был тәрбиәне бирмәүсе һәм уларҙың өйләнешеүенә юл ҡуйыусы ата-әсәләр ҙә мөртәт булып сыға инде. Ошоғаса "мөртәт" һүҙенең этимологияһын белмәй йөрөй инем. Баҡтиһән, үҙ тоҡомон, милләтен кәгезләндереүгә юл ҡуйыусы кешене мөртәт тип атайҙар икән. Кисә үлгән булһам, белмәҫ инем әле...

Теләһә ниндәй шәжәрәне алып ҡараһаң да, һуңғы 200 йыл буйы бер ауылда йәшәүселәр бер-берсһенә туған булып сыға һәм һуңғы 200 йылда үҙ ауылынан кәләш алыусы йә үҙ ауылы егетенә кейәүгә барыусы ла мөртәт булып һанала, тимәк. Ошо 200 йыл эсендә теге йәки был ауылға ситтән күсеп килеүселәр булған осраҡта ғына халыҡтың никахлашыу ҡағиҙәһен һаҡлаусылар бар. Үҙҙәрен был хәлдә таныусылар минә ғәфү итһен, был мәкәлде халыҡ уйлап сығарған. Мин түгел. Бөгөн хатта үҙ ауылыңдан ғына түгел, үҙ ырыуыңдан да кәләш алырға ярамайҙыр. Ә беҙҙең милләттә ырыу-ара никахтың уникаль потенциалы бар. Сөнки халҡыбыҙ йөҙҙән ашыу ырыуҙы тәшкил итә.

Совет осоронда беҙҙең милләт эсендә ырыу-ара никахлашыу бигерәк тә йәштәрҙең ҡалаларға уҡырға йә эшкә килә башлаған сағында ҡуҙғала. Проценттар менән алғанда был осраҡта ла боронғоса ырыу-ара дөрөҫ никахлашыу өлөшө әллә ни ҙур түгел, сөнки шул уҡ совет осоронда ҡалаға килеүсе башҡорттарҙың 75 проценты башҡа милләт вәкилдәре менән ғаилә ҡорған. Бөгөн ул 53 процент тәшкил итә. Ә ҡатнаш никахтарҙың хәлен үҙегеҙ беләһегеҙ, әйтәйек, "башҡорт менән татар никахынан урыҫ тыуа" тигән һүҙбәйлнеш күптән инде әйтемгә әүерелде. "Ат менән ҡыҙҙы ауылдан алма" әйтеме ана шундай уйланыуҙарға алып килде. Әлбиттә, был әйтемдә өҫтә генә яткан мәғәнә лә бар. Әйтәйек, ауылдан алған атың ҡасып ҡайта, ә ҡыҙҙың ғәйбәте тиҙ генә килеп етә. Ә әйтемдең төптәрәк ятҡан мәғәнәһе, әлбиттә, милләтебеҙҙең тулы ҡанлылығын, һаулығын тәьмин итерлек милли идеяға торош.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БЕРҘЕ АЛҺАҢ, ЙӨҘЛӘТӘ ТҮЛӘРҺЕҢ

**РФ Президенты Дәүләт Думаһына ришүәтселек өсөн штраф рәүешендә яза биреү тураһындағы закон проектын ҡарауға тәҡдим иткәйне. 19 апрелдә ул икенсе уҡыуҙа ҡабул ителде. Тейешле үҙгәрештәр РФ Енәйәт кодексына индереләсәк.** Закон проектында ришүәтселектең 4 төрөнә: аҙ (минималь) күләмдә- 25 мең һумға тиклем, байтаҡ күләмдә - 150 мең, ҙур күләмдә - 1 миллионға тиклем һум һәм айырыуса ҙур күләмдә (1 миллиондан ашыу) ришүәт алыусыға яза ҡарала. Шуныһы айырым билдәләнә: ришүәтселек өсөн штраф суммаһы уны алғанға ҡарағанда бер нисә тапҡырға артыҡ сумманы тәшкил тәсәк. Мәҫәлән, аҙ күләмдә ришүәт биргән йәки алған өсөн 12-нән алып 50 тапҡырға тиклем арттырылған күләмдә штаф һалыу ҡарала, ә айырыуса ҙур күләм ришүәт өсөн штраф күләме 100 миллион һумға тиклем тәшкил итеүе ихтимал. Шул уҡ ваҡытта РФ кодексының бер нисә статьяһы буйынса ришүәт өсөн штраф енәйәт яуаплылығына альтернатив төр булараҡ та ҡулланыласаҡ. Документты икенсе уҡыуҙа ҡарау барышында депутаттар бик ауыр булмаған енәйәт төрҙәре өсөн минималь штраф күләмен әлеге 2,5 мең һумдан 5 мең һумға тиклем арттырыу тураһында тәҡдим ҡабул итте.

# НАРКОТИКТАН МӘЖБҮРИ ДАУАЛАУ

**Яңыраҡ Иркутскиҙа булып үткән Дәүләт Советы президиумы ултырышы илде наркоманлаштырыуға ҡаршы көрәш мәсьәләләрен ҡараны.** "Илдә наркотиктарға бәйле килеп тыуған хәлде бик ҡиҫкен тип баһалайым, - тине Рәсәй президенты Дмитрий Медведев. - Ындай хәлдә ярайһы ғына ҡаты саралар күреү мөмкин һәм кәрәк. Был йәһәттән бөтәһе лә минең ферҙе яҡламаһа ла. Мәҫәлән, Түбәнге Тагилда йәшәүсе егет (наркомандар өсөн реабилитация үҙәге ойошторған Егор Бычковтың кешеләрҙе законһыҙ рәүештә иректән мәхрүм итеүҙә ғәйепләнеп, шартлы рәүештә язаға тарттырылыуы хаҡында һүҙ бара. - **Ред.**) менән булған хәлде юридик яҡтан төрлөсә баһаларға мөмкин. Әгәр кеше наркотик ҡулланмаҫ өсөн үҙен башҡаларҙан айырып тоторға ризалыҡ бирә икән, бының өсөн кемделер әҙәрлеклөү ярамаҫ ине. Медицинаның наркотиктарға бәйле кешеләрҙе реабилитациялауға йүнәлтелгән өлөшөн үҫтерергә, ошо эш менән шөғөлләнгән кешеләргә дәүләт яғынан да, йәмәғәт берекмәләре яғынан да ярҙам итергә кәрәк. Был наркотик ҡулланыусыларға ҡарата золом саралары күреүгә ҡарағанда һөҙөмтәлерәк буласаҡ, әлбиттә. Полиция хеҙмәткәрҙәренә, "хәүефле" предприятиеларҙа эшләүселәргә һәм, бәлки, мәктәп уҡыусыларына наркотик ҡулланыуға мотлаҡ тестар үткәреү кәрәк".

Рәсәй Федерацияһында бөтәһе 2-2,5 миллион наркоман иҫәпләнә. Иркутскиҙа булып үткән ултырыш йомғаҡтары буйынса президент мәктәп уҡыусыларына (13 йәштән башлап) тест үткәреүҙе булдырырға, юғары уҡыу йорттарының уставтарына "Наркотиктар ҡулланыу уҡыу менән һыйышмай" тигән ҡағиҙәне индерергә ҡушты. Составында ауыр наркотик ҡулланылыусы кодеин булған препараттар һатыу тәртибе үҙгәртеләсәк, наркопритондарға әүерелгән күңел асыу урындары хужалары өсөн яуаплылыҡ саралары көсәйтеләсәк. Наркомандарҙы мотлаҡ реабилитациялау һәм унан баш тартҡан өсөн санкциялар тураһындағы фекер хупланды.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

КЕМ АЛЫҠ!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2011 йылдың икенсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу дауам итә. Вәғәҙә итеүебеҙсә, апрелдә лә гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә "Бүләгебеҙҙе кем алыҡ!" тип әйтмәксебеҙ. Сираттағы бағыусыбыҙ был юлы кесә телефоны тәҡдим итә.**

**Әйткәндәй,** кемде был бүләк ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы **тыуған көнө** менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтәнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атаәсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Шулай итеп,** 2011 йылдың икенсе ярты йыллығына яҙылыу өсөн яңы хаҡтарҙы хәбәр итәбеҙ: 50665 индекслыһына **340 һум 92 тингә**, 50673 индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **370 һум 92 тингә** яҙыла алаһығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

- Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға **270 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшнигә юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.



- Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (көмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ унайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **210 һум.**
- Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **240 һум.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев рәйеслегендә үткән РФ Дәүләт Советы Президиумы ултырышында ҡатнашты. Унда йәштәр араһында наркотиктар ҡулланыуға ҡаршы эш итеүҙе көсәйтеү буйынса саралар тураһында фекер алышынды. Рөстәм Хәмитов уҡыусыларға тест үткәреү буйынса Башҡортостан Республикаһы тәжрибәһе тураһында һөйләне. Былтыр республикала юғары кластарҙа уҡыған 20 мең балаға тест үткәрелгән. Улар араһында наркотиктар ҡулланған 20 бала асыҡланған.

✓Быйыл республикала экономкласлы торлаҡ һатып алыусыларға Башҡортостан Хөкүмәте кредиттар буйынса проценттарҙың бер өлөшөн субсидиялаясаҡ. Башҡортостан Президенты БР Хөкүмәтенең ошо туралағы ҡарарына ҡул ҡуйҙы. Ҡарарҙа субсидия күләме кредит буйынса процент ставкаһының 3 проценты пункты кимәлендә билдәләнә. Бер ҡатнашыусыға дөйөм күләме 300 мең һум тәшкил иткән субсидия биш йылға тиклем ваҡытҡа бирелә. Эконом-класлы торлаҡҡа аҙ ҡатлы йорттар һәм блоклап һалынған торлаҡ йорттарҙың өлөштәре индерелә.

✓Быйыл Башҡортостандың транспорт комплексы объекттарын төҙөүгә һәм реконструкциялауға федераль бюджеттан 2,583 млрд һум аҡса бүлеү ҡаралған. "Автомобиль юлдары" ярҙамсы программаһын тормошҡа ашырыуға 2,010 млрд һумдан ашыу аҡса бүленәсәк. Ул М-5 "Урал" һәм М-7 "Волга" федераль автомобиль юлдарының Башҡортостан аша үткән участкаларын төҙөүгә һәм реконструкциялауға, шулай уҡ республиканың Саҡмағош, Стәрлетамаҡ, Әбйәлил, Мишкә, Бүздәк һәм Тәтешле райондары ауылдарына юлдар һалыуға тотоналасаҡ. Бынан тыш "Рәсәйҙең яңы юлдары" партия проекты программаһы буйынса Өфө ҡалаһындағы урамдарҙы киңәйтеүгә федераль бюджеттан 265 млн һум аҡса бүленде.

✓Урта махсус белем биреү учреждениелары һәм юғары уҡыу йорттары студенттары, йәштәр берләктәре активистары "Минең республикам" Республика ижтимағи-экологик акцияға ҡушылып, Өфөнөң парк һәм аллеяларын сүп-сарҙан таҙартырға сыҡты. Был акцияны БР Йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм министрлығы, Республика йәштәрҙе эш менән тәьмин итеү үҙәге ойошторҙо.

## ПРЕЗИДЕНТ БЛОГЫНАН




**"Барығыҙҙы ла "Салауат Юлаев" ХК еңеүе менән ҡотлайым` Салауат - чемпион! Йыһан юбилейы, Гагарин йылында Гагарин кубогы беҙҙеке! Хоккейсыларға, уларҙың түҙемле ғаиләләренә рәхмәт. Тренерҙарға һәм клуб хакимиәтенә рәхмәт! Клубҡа ярҙам итеүселәрҙең барыһына ла рәхмәт! Барлыҡ көйәрмәндәргә рәхмәт! Барыбыҙға ла рәхмәт! Еңеү менән! Өфө, ҡалалар һәм ауылдар еңеүҙе билдәләй. Мин Өфө урамдары буйлап үттем. Һәр ерҙә байрам һәм ҡыуаныс. Барыбыҙҙы берләштереүсе ваҡиға. Был еңеү көйәрмәндәргә генә түгел, тотош республикаға кәрәк. 60-сы йылдарҙа беҙ, малайҙар, Спорт һарайына хоккей ҡарарға йөрөй инек. Хоккейҙең ул ваҡытта башланған ғына сағы һәм беҙ, Зорге урамы малайҙары, СЮ йыйылма командаһының еңеүҙәре тураһында хыялландыҡ. Шул тиклем "Салауат"тың еңеүен теләнек. Хыялдар тормошҡа аша. Бары тик ышанырға һәм тир түгергә генә кәрәк. Ул саҡта барыһы ла килеп сығыр. Хоккей байкаһы. Был ысын булған хәл. Шаһиттар бар. Хәҙер инде был ваҡиға тураһында һөйләргә лә була. "Салауат" "Север"ҙе беренсе раундта еңгәс, тренерҙар Быков һәм Захаркин менән осраштым. Мәктәптәрҙә беҙҙең өсөн яңы булған спорт төрө - флорболды үҫтереү хаҡында фекер алыштыҡ.  Был хоккей кеүек, әммә спорт залында уйнала торған уйын. Осрашыу аҙағында, сығыр алдынан Быковҡа: "Минең фаразым: Гагарин кубогы беҙҙеке буласаҡ! "Аҡ барс" ты биш уйында еңәсәкбеҙ. Конференцияның финалы иң ауыры буласаҡ, алты йәки ете уйын. Гагарин кубогының финалы еңелерәк буласаҡ һәм беҙ биш матчта еңәсәкбеҙ". Быков минә ҡараны ла: "Шәп. Ә мин был хаҡта егеттәргә әйтһәм, буламы?" - тине. Командаға фаразды тормошҡа ашырған өсөн рәхмәт! Әгәр нык теләһәң, хыялдар ғына түгел, фараздар  ҙа тормошҡа аша.  Беҙ барыбыҙ ҙа был еңеүҙе нык теләнек! Һәм беҙ бергәләп еңдек. Мәҙрәс, юлаевсылар! Тағы бер тапҡыр -  еңеү менән!" - тип яҙҙы үҙенең блогында Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов. Хәйер, команда финалға сығыу айҡанлы ла ул үҙ фекерен белдергәйне инде. Шуға күрә, блоггерҙарҙың ошо темаларға яҙған ҡыҙыҡлы фекерҙәрен гәзит уҡыусыға еткермәксебеҙ.**

# "САЛАУАТ ЮЛАЕВ"- ЧЕМПИОН!

**asraul.** СЮ символикаһын һата башларға ла була... Бында, форумда, кемдер, патриотизм шул иҫәптән шарф төҫөнән һәм яраткан клубыңдың символикаһынан да башлана, тигән фекер әйткәйне. Ә барлыҡ изгелекте, яҡтылыҡты туплаусы фекер матдилаша. Бына уны матдилаштырырға лә ваҡыт етте. Юҡһа, беҙгә, Башҡортостандан килеп, Мәскәүҙә йәшәүселәргә, тағы ла башҡорт сувенирҙары һәм символикаһы булмауын "башҡорттар сауҙәгәр түгел, башҡорттар яугир", тип аҡларға тура киләсәк...

**rustem_str.** Хоккей - Рәсәйҙә беренсе һан аҫтындағы спорт төрө, тибеҙ. СЮ еңһә, ғорурланабыҙ, ә командала, нигеҙҙә, башҡорт хоккейы уйынсыларынан берәү ҙә юҡ. Атай булараҡ ошо мәсьәлә мине нык борсой. Стәрлетамаҡта йәшәйем, улымды көн һайын Салауат ҡалаһына хоккейға йөрөтәм. Бик ҡатмарлы эш был һәм һәр кем быны эшләй ҙә алмай. Күптәр тиҙҙән Стәрлетамаҡта Боҙ һарайы төҙөләр тип өмөтләнгәйне. Урындағы хакимиәт башлығының вәғәҙәһе лә ышандырғайны. Әммә вәғәҙә иткәнде өс йыл көтәләр, тиҙәр бит. "Стәрлетамаҡ эшсеһе" гәзитендә урындағы хакимиәттең волейбол майҙансығы төҙөү осһоҙораҡҡа төшә, тип ҡарар итеүе, йәнәһе, халыҡтың шулай теләүе тураһында мәҡәлә һәм биш йыллыҡ план донъя күрҙе. Унда Боҙ һарайын төҙөү ҙә ҡаралған, әммә ҡайҙа һәм нисек - билдәһеҙ.

**siar_0707.** Бик шатмын. Хатта ҡыҫҡыра-ҡыҫҡыра ҡарлыҡып бөттөм. Әммә... Ҡайҙа һуң командала, исмаһам, бер башҡорт уйынсыһы? Шул уҡ Металлург-Магнитогорск командаһында үҙҙәренең биш тәрбиәләнеүсеһе бар, хатта Барыҫта (Астана) үҙ ҡаҙаҡтары (Жайлауов) уйнай...

**infap.** Беҙҙе нык туплаусы һәм берләштереүсе берҙән-бер нәмә - хоккей. Тотош республика менән ихлас "ауырыйбыҙ", ватансылығыбыҙ ҙа шунда сағыла. Һәр ваҡыт, һәр нәмәлә берҙәм һәм тупланған булырға, халыҡтың, коллективтың рухын күтәрергә, халыҡ менән эшләргә кәрәк. Хеҙмәт коллективтарында рух тигән нәмә бөттө.

**leonidnekrasov.** Мин хоккей көйәрмәне түгел һәм бер ваҡытта ла булманым да. Әммә беҙҙең команда еңһә, минә барыбер рәхәт. Беҙҙең хоккей ниндәйҙер кимәлдә спорт характерынан тыш, республикалағы барлыҡ үҙгәрештәрҙе символлаштыра. Беҙ хоккейҙан һөҙөмтә көтәбеҙ. Шулай уҡ беҙ иҡтисадтан да һөҙөмтә көтәбеҙ. Беҙ һөжүм иткән хоккей яҡлы, шулай уҡ беҙгә һөҙөмтәле иҡтисад та кәрәк. Беҙ хоккей яланында уйынсылар командаһы эшләргә тейешлеген аңлайбыҙ. Шулай уҡ беҙ республиканың иҡтисадын күтәреү өсөн идара итеүселәр, инвесторҙар, сәнәғәтселәр, дәүләт чиновниктары һәм башҡа кешеләрҙең командаһы эшләргә тейеш, тибеҙ. Спорт көйәрмәндәре уйынсыларҙы хупларған, дәртләндергән кеүек, республика граждандары ла Башҡортостанда башланған үҙгәрештәрҙе хупларға тейеш. Юҡһа, уңышҡа ирешмәйәсәкбеҙ.

**edward_murzin.** Комментатор Азамат Моратов уйын яланындағы алтынсы уйынсы тип иҫәпләнеүгә лайыҡ. Уның профессионаллеге бөйөк комментаторҙар Николай Озеров, Владимир Маслаченко менән бер рәткә ҡуйыуға лайыҡ. Шундай бөйөк талантты билдәләп китеү дөрөҫ һәм гәҙел булыр ине. Азамат Моратов, алға!

**sharifullin_r.** "Салауат Юлаев" ХК КХЛдағы клуб ҡына түгел, ул йәштәрҙе спортҡа ылыҡтырыу мөмкинлеген биреүсе мәктәптәр һәм клубтарҙың тотош системаһы, ә уйынсылар күптән инде маҡсатҡа ынтылыш булғанда һәм уҙенде шуға арнағанда тормошта билдәле һөҙөмтәләргә өлгәшергә мөмкин булыуҙың миҫалы. Ҙур үтенес: һуңғы йылдарҙа тупланғанды юғалтыуға юл ҡуймайыҡ. Әлбиттә, клубты финанслау икенсе мөһим ихтыяжға йүнәлтергә мөмкин булған ҙур сығымдар талап итә. Әммә Риганың миҫалын ҡарарға була. Эйе, унда бюджет аҙ, ләкин клуб үҙ-үҙен тәьмин итеү кимәленә сыҡты! Ни өсөн беҙгә республикала хоккейҙан ысын байрам яһамаҫҡа? Аренанан тапшырыуҙарҙың сифатын күтәрергә, ресторандарҙы матч ваҡыттарында ғына түгел, башҡа ваҡытта ла файҙаланырға мөмкин, атрибутиканың сифатлы интернет-магазиндарын асырға, билет һатыуҙа тәртип булдырырға була.

**kririk.** Мин Өфөлә шундай кимәлдәге хоккей булғанына ҡыуанам. Әммә ни өсөн тотош Рәсәй беҙгә ҡаршы сыҡты һуң? Киң мәғлүмәт сараларын тренер штабын аҫтыртын ғына ағыулау башланды. Заманыбыҙҙың иң яҡшы уйынсыһы Радуловты ялҡау ғына "типкеләмәй". Ул икенсе берәй клубҡа күсеү менән уға барыһын да ғәфү итерҙәрен ышанам.

**nlstr.** Ҡайһы бер көйәрмәндәр саҡ ҡына ла көс һалмайынса, тамаҡ йыртып һәм уға йылытыусы эсемлектәр һалып үҙҙәрен еңеүсе тип хис итте... Барыһы ла, донъя кеүек үҡ, иҫкесә: ашарға һәм күңел асырға булһын! "Беҙ иң яҡшылар!" тигән тәкәбберлектең тантанаһы, кеше булмышы "бай" булған барлыҡ алйотлоҡтоң тышҡа сығыуы булды был... Байрам итеүселәр башҡалар, йоҡларға тейешле балалар, ауырыуҙар, төнөн тыныс ҡына ял итергә хоҡуҡлы көйәрмән булмаған кешеләр тураһында  уйларға һәләтһеҙ.Шау-шыулы, һүгенеүле, иҫерек баш-баштаҡлыҡ яҡты ваҡытта уҡ башланғайны. Әйҙә, хис-тойғоларын башҡаса  сығара алмайҙар икән, бер-ике тапҡыр ҡала буйлап үтһендәр ҙә туҡтаһындар ине. Әммә шау-шыу төн уртаһынаса тигәндәй дауам итте! Ә дәүләт тыныслыҡ, тәртип һаҡлаған тыныс граждандар яҡлы түгел, ә аҡылын юйған иҫерек өйөр менән  булыуын күрһәтте.

**marat_mmm.** Кем ысынлап та көйәрмән - ысын күңелдән ҡотлайым, компания өсөн тамаҡ ярған һәм спиртлы эсемлектәр эсеү менән шөғөлләнеүсе ҡалған 80 процентҡа - тыныс йоҡо.

**nail_rafikov.** Бигерәк тә һуңғы уйын минә 70-се йылдарҙағы СССР һәм Канада йыйылма командаларының матчын хәтерләтте, һәм... Рәхмәт командаға. Улар Башҡортостанды Гагарин орбитаһына сығарҙы. Әйҙә, был яңы орбита республика өсөн Еңеү орбитаһына әүерелһен.

**bakhtiev.** 80-се йылдарҙа мин СЮ йыйылма командаһының һәр береһен белә һәм ҡасан СССР чемпиондары булырҙар икән, тип хыяллана инем. Ә ЦСКА һәр ваҡыт беҙҙең йондоҙ-уйынсыларыбыҙҙы үҙенә алып торҙо. Хәҙер ул йылдарҙағы ЦСКА уйынсылары, Быков һәм тренерҙар командаһы беҙҙең республика өсөн мөғжизә тыуҙырҙы!

**ufa_bash.** Плей-офф - һуғышҡа оҡшаған көрәш. Боҙҙа һуғышҡа уҡ барып етмәһә лә, киң мәғлүмәт сараларында бындай һуғыш йәйелдерелде. Беҙ шундай ваҡытта йәшәйбеҙ, фактик еңеү генә аҙ, мәғлүмәт еңеүе лә кәрәк. Шуға күрә, бер кемдә лә Салауаттың чемпион булыуында шик ҡалмаһын өсөн,  көйәрмәндәрҙе клубыбыҙ һәм еңеүебеҙ тураһында Интернетта әүҙемерәк яҙышырға саҡырам.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Еңеүҙәргә өйрәнгән халҡыбыҙҙың еңеү ҡыуанысына һыуһағанлығы асыҡ күренә. Юҡһа, коллектив хужалыҡтар, удар биш йыллыҡтар ваҡытында еңеүҙәрҙән еңеүҙәргә маҡсат ҡуйып йәшәгән ил бөгөн ҡайҙа барырға, нимәнән ҡыуаныс табырға белмәй аптырап ҡалды. "Салауат Юлаев" хоккей клубының еңеүе бары тик бер йүнәлештә барғанда, бер команда булып бер маҡсатҡа хеҙмәт иткәндә генә ҙур ҡаҙанышҡа ирешергә, еңеү уларға мөмкин икәнен тағы бер тапҡыр раҫланы. Ә көндәлек тормошта, нигеҙҙә, һаман Крылов мәҫәлендәгеҫә, Аҡҡош, Суртан, Ҡыҫала кеүек, йөктө ян-яҡҡа тартып маташабыҙ. Бәлки, һәр өлкәлә лә "Салауат Юлаев" хоккей командаһы кеүек бер командаға берләшергә кәрәктер, ә?**

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанға "Сочи-2014" ойоштороу комитеты делегацияһы килде. Рәсәй һәр гражданға "Сочи-2014" волонтеры булыу мөмкинлеген бирә, шуға күрә майҙа ил буйынса 26 үҙәк асыла. Бында доброволецтар әҙерләнәсәк. 126 заявка араһынан Рәсәйҙең 14 төбәгендә урынлашҡан 26 уҡыу йорто һайлап алынған. Шуларҙың береһе беҙҙең Башҡорт дәүләт медицина университеты. Ул "Медицина" йүнәлеше буйынса Рәсәйҙә волонтерҙар әҙерләйәсәк.

✓Өфөлә Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе илдәре Хөкүмәт башлыҡтары советы ҡарамағындағы Яугир-интернационалистар эштәре буйынса комитеттың координация советы ултырышы булды. Унда ошо комитеттың рәйесе Советтар Союзы Геройы Руслан Аушев та ҡатнашты. Сарала ҡатнашыусылар Еңеү паркында, Дан музейында, "Ҡайғылы әсә" мемориалында, һуғыш ветерандары госпиталендә булды. Конгресс-холда үткән совет ултырышында БР Президенты Рөстәм Хәмитов та ҡатнашты һәм сығыш яһаны.

✓Республиканың ете районында - Баҡалы, Благовар, Дыуан, Ғафури, Ҡыйғы, Стәрлетамаҡ, Әлшәйҙә дым ҡаплауға төштөләр. Архангел, Ҡыйғы, Көйөргәҙе, Бүздәк, Шаран, Стәрлетамаҡ райондарында ужым культуралары һәм күп йыллыҡ үләндәр өҫтәмә туҡландырыла башланы. Әле ауыл хужалығы предприятиелары һәм фермер хужалыҡтарының яғыулыҡ-майлау материалдарына ихтыяжы 50 процентҡа ҡәнәғәтләндерелгән. Яғыулыҡ-майлау материалдары өсөн 120 млн, минераль ашламалар өсөн 200 млн һум субсидия бүленгән.

✓БР буйынса Эске эштәр министрлығы быйыл өс ай эсендә генә ҡомарлы уйындар менән шөғөлләнеүсе 104 залды япты, 2450 берәмек уйын автоматтарын тартып алды. Өфөлә үткәрелгән "Контрафакт" операцияһы мәлендә хоҡуҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәре 32 бинаны тикшерҙе, бында 500 уйын автоматы, 3 рулет һәм 12 покер өҫтәле тартып алынды.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә Бөйөк Еңеү көнөн байрам итеү саралары тураһында мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнеүенсә, баш ҡалала тантаналы митингтар, һәйкәлдәргә сәскәләр һалыу, төрлө мәҙәни тамашалар, спорт уйындары буласаҡ

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ПАРАОЛИМПИЯ ҮҘӘГЕ ТӨҘӨЛӘСӘК

**Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Өфөлә параолимпия уйынсыларын әҙерләү үҙәге төҙөү мәсьәләләре буйынса кәңәшмә уҙғарҙы. Кәңәшмәлә параолимпиясы спортсылар ҙа ҡатнашты һәм сығыш яһаны.**

Әле Үҙәктең проекты раҫланған, объекттың ҡайһы ерҙә урынлашасағы ла билдәләнгән. Әммә, Президент әйтеүенсә, Үҙәкте Затон биҫтәһендә төҙөргә йыйыныу яҡшы идея түгел. Ҡала үҙәгенән алыҫ урынлашыуы арҡаһында транспорт проблемалары булыуы һәм башҡа уңайһыҙлыҡтар килеп тыуыуы мөмкин.

- Шуға ла башҡа урынға тәҡдимдәр көтәм, - тине Президент.- Ғөмүмән, был мәсьәләлә иң төп хата шул: Үҙәкте проектлаған саҡта спортсы-инвалидтарҙың фекере иҫәпкә алынмаған. Был бит әхләкһеҙлек тә. Республикала билдәле, титуллы спортсылар бихисап булып, уларҙан ҡайһылай эшләгәндә яҡшыраҡ буласағын һорап та тормайҙар. Әммә әлегә хәл улай уҡ төҙәтмәҫтәй түгел - барыһын да үҙгәртергә була әле.

Шулай итеп, 30 апрелгә тиклем Президент ике һорауҙы хәл итеү бурысын йөкмәтте: 3-5 спортсыны йәлеп итеп, проектты яңынан ҡарап сығырға, уларҙың тәҡдимдәрен иҫәпкә алырға; кисекмәҫтән Параолимпия үҙәге өсөн уңайлы урын һайлау мәсьәләһен хәл итергә.

# ЕНӘЙӘТКӘ КЕМ ЭТӘРӘ?

**Өфө ҡала округы хакимиәтенең Эске эштәр идаралығы начальнигы урынбаҫары, йәмәғәт хәүефһеҙлеге милицияһы начальнигы Артур Сәйфуллин журналистар менән осрашыуҙа ҡарауһыҙ ҡалған бәлиғ булмаған балалар араһында тәртип боҙоуҙары иҫкәртеү саралары тураһында һөйләне.**

Артур Фәрит улы билдәләүенсә, эске эштәр органдары тарафынан бәлиғ булмаған балаларҙы тәрбиәләү буйынса маҡсатлы эштәр алып барыла. Йәмғиәттә ыңғай күренеш булараҡ урын алған тәртиплелек, тәрбиәлелек йоғонтоһо ла уларға был маҡсатты тормошҡа ашырыуға ярҙам итә. Ләкин шундай парадокс: балаларҙы тәрбиәләүҙә беренсе роль уйнарға тейешле ҡайһы бер ата-әсә үҙе сәбәпсе булып тора балаларҙың юлдан яҙыуына. "Былтыр баш ҡалала ата-әсәлек бурысын үтәмәгән 191 ата-әсә иҫәпкә алынған. Дөйөм алғанда, бөтәһе 1703 шундай ғаилә менән профилактика эштәре алып барыла", - тине Артур Фәрит улы.

АФАРИН!

# СӘЙӘСИ ТЕМАҒА...

## яҡын да ебәрмәйҙәр



**Конгресс-холлда уҙған сираттағы "Шаянуйын -2011" Республика шаяндар һәм отҡорҙар фестивале был юлы ун туғыҙ команданы сәхнә түренә сығарҙы. Шуларҙың ун дүрте - башҡорт йәштәре, бишәүһе татар йәштәре командалары булды. Бәйге һөҙөмтәләре буйынса иң шаян һәм отҡор команда тип З.Биишева исемендәге Стәрлетамаҡ педагогия академияһының "Страйк" башҡорт йәштәре командаһы табылды. "Страйк"тар сәхнәлә 2008 йылдан алып сығыш яһай. "Көлөү өсөн йәшәмәйбеҙ, көлдөрөү өсөн йәшәйбеҙ", ти Стәрлетамаҡ шаяндары. Команда ағзалары менән бәйге тураһында әңгәмәләшеп алдыҡ.**

-Башҡортса яңғыраған юморҙың башҡорт ерлегенән алыныуы кәрәк, - ти "Страйк" командаһы капитаны Радик Ғиззәтов. - Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең отҡорҙарыбыҙ әле рус халыҡ шаяртыуҙарын өҫтөн күрә. Сәйәсәт, иктисад өлкәһе, йәшәйешебеҙ тураһындағы һүҙебеҙҙе башҡорт юмory аша сағылдырырға өйрәнергә кәрәк беҙгә. Әлбиттә, сәйәсәткә ҡағылышлы шаяртыуҙарҙы сәхнәгә бик сығарып булмай, мөхәррирҙәр үткәрмәй. Был бик үк дөрөҫ түгел. Сөнки йәштәрҙең сәйәсәткә лә үҙ ҡарашы бар бит. "Шаянуйын" шаяндар һәм отҡорҙар бәйгеһенең бер етешһеҙлеген дә билдәләп үтер инем. Ул да булһа, был ярыштарҙың айырым бер системаға һалынмауы. Мәҫәлән, әлеге фестивалдә лә 5-6 йыл ярышып, тәжрибә туплап өлгөргән командалар менән бер рәттән үҙҙәрен тәүге тапҡыр һынаусы командалар ҙа сәхнәгә сыҡты. Уларҙың кимәле, әлбиттә, түбән, бәйгенең бәҫен ебәрә. Киләсәктә "Шаянуйын"дың финалына тиклем район һәм ҡалаларҙа һайлап алыу турҙары үткәрелһә, төрлө лигалар булдырылһа, бик яҡшы булыр ине.

- Башҡорт КВН-ы башҡорт рухы менән һуғарылып, үҙ ерлегебеҙҙән үҫеп сығырға, башҡорт телен яҡшы белергә, башҡорт һөйләү телмәрен юғары баҫҡысҡа күтәреүҙе маҡсат итеп ҡуйырға тейеш, - тине ошо уҡ команда етәксеһе Гөлназ Вәлиева. - Әлбиттә, һуңғы йылдарҙа командалар саф башҡортса һөйләшергә тырыша, әммә тел ҡытыршылығы барыбер ҡолаҡҡа салынып ҡала. Шулай уҡ йәштәребеҙгә "билдән түбән" шаярыуҙарҙы сәхнәгә сығармаҫҡа тырышырға кәрәк, тип иҫәпләйем. Был юлы ундай шаярыуҙарҙың аҙыраҡ булыуы ыңғай күренеш. Беҙ үҙебеҙ ундай мәғәнәһеҙ юморҙан ҡасырға тырышабыҙ һәм бөгөнгө еңеүебеҙ ҙә тап ошо сифатыбыҙҙы иҫәптә тотоп яуланғандыр әле.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ысынлап та, "Шаянуйын"да тәүге йылдарҙа йыш күҙәтелгән мәғәнәһеҙ юмор - егеттәрҙең ҡатын-ҡыҙ булып кейенеп сығыш яһауы, "билдән түбән" шаярыуҙар, ҡыланһыҡланыуҙарҙың был юлы аҙ булыуы шатландырҙы. Сараның мәртәбәһен көндәлек тормошобоҙҙа урын алған кире күренештәргә ҡарата юмор аша бирелгән баһа ла күтәрҙе. Тимәк, мәктәп уҡыусылары һәм студенттар тормошобоҙҙағы һәр төрлө кире күренештәргә битараф түгел.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

...ФӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ТАМЫРҘАРҘЫ БАРЛАП,

## шәжәрәһен төҙөй балалар

**Ошо аҙнала Өфө ҡалаһының Ленин районында Шәжәрә байрамы уҙғарылды. Байрамда ҡатнашыусыларҙы тәбрикләп, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов: "Мин бөгөнгө сараның нәҡ Ленин районында уҙғарылыуына бик ҡыуандым һәм ҙур теләк менән килдем. Был байрамдың баш ҡалабыҙҙа ла киң ҡолас алыуы ҡыуандыра. Бөгөнгө сара йөкмәткеһе яғынан да айырылып тора. Тағы ла мине баш ҡала мәктәптәре уҡыусыларының туған телен яҡшы белеүе, үҙ тарихын, шәжәрәһен теләп өйрәнеүе һоҡландырҙы. Тимәк, был йәһәттән уҡытыусыларҙың хеҙмәтен баһалап үтергә кәрәк", - тине.**

Шуныһы ҡыуандырҙы: үҫеп килгән йәш быуын шәжәрәне ата-әсәһе йә уҡытыусыһы ҡушыуы буйынса түгел, ә үҙенең ҡыҙыҡһыныуы буйынса өйрәнә. "Беҙҙең Толомбаевтарҙың шәжәрәһе тулы түгел ине. Баш ҡалабыҙҙың 35-се мәктәбендә VII класта уҡыусы Дим улым "В контакте" социаль селтәрендә яҙышып, бөтә туғандары менән танышты, Толомбаевтар нәҫелен бергә йыйып алды, айырым төркөм төҙөнө. Әлегә тиклем төҙәлгән шәжәрәлә кемдәр юҡлығын асыҡланы, уларҙы шәжәрә ағасына өҫтәп ҡуйҙы. Мәҫәлән, Уралия тигән ҡыҙ туғаныбыҙ барлығын беҙ хатта белмәй ҙә инек. Улыма шәжәрә төҙөгәндә архивтарҙа ла оҙаҡ ҡына ултырырға тура килде. Шулай итеп, улым үҙ тырышлығы, үҙ ҡыҙыҡһыныуҙары менән шәжәрәбеҙҙе тулыландырҙы. Шәжәрәбеҙҙең шундай бай икәнен белмәй ҙә инек әле. Толомбаевтар нәҫеле республикабыҙҙа ғына түгел, сит өлкәләрҙә лә йәшәй. Быға тиклем туғандар бер-беребеҙҙе ныҡлап белмәнәк, хәҙер аралашып та торабыҙ, ҡунаҡҡа ла саҡырышабыҙ. Был Димдең үҙе өсөн дә оло ғорурлыҡ", - тип ҡыуанып һөйләй үҙенең улы тураһында 35-се мәктәптең башҡорт теле уҡытыусыһы Эльза Толомбаева.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Кисә Ҡала мәҙәниәт һарайында башҡорт телендә әкиәт һөйләүселәрҙең "Һаумы, һаумы, әкиәт!" тип аталған конкурсына йомғаҡ яһалды. Конкурста еңеүсе балалар төрлө номинацияларҙа бүләкләнде.

✓Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте Баймаҡ, Хәйбулла, Бөрйән, Әбйәлил, Белорет районда-рында сираттағы китап күргәҙмәләре үткәрҙе. Нәшриәт етәкселеге фекеренсә, был районлар халҡына үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған китаптарҙы һатып алыу мөмкинлеге тыуҙыра.

✓12-13 майҙа Салауат ҡалаһында "Нәфис һүҙ" Республика эстрада-һөйләш жанры конкурсының финалы үтәсәк. Һайлап алыу турҙары республика райондарында һәм ҡалаларында булып үтте лә инде. Унда үҙешмәкәрҙәр ҙә, профессиональ артистар ҙа ҡатнаша ала. Белешмәләр өсөн телефон: 8(347)289-62-00, 8-927-32-06-442.

✓19-20 майҙа Яңауылда Фәтих Ихсанов призына Республика гармун байрамы үтәсәк. Ғаризалар 15 майға тиклем Республика халыҡ ижады үҙәгендә ҡабул ителә. Телефон: 8(347) 289-62-00.

✓7-11 июндә Әбйәлил, Белорет, Учалы райондарында һәм Сибай ҡалаһында "Берҙәмлек" Х Халыҡ-ара милли мәҙәниәттәр фестивале үтәсәк. Унда Рәсәй төбәктәренән генә түгел, яҡын һәм алыҫ сит ил вәкилдәренең дә ҡатнашыуы көтөлә.

✓19 апрелдән Өфөлә "Ҡағыҙға - икенсе ғүмер" тигән экологик акция старт алды. Макулатура йыйыу акцияһы республикала бара ине инде. Мәҫәлән, Туймазы мәктәптәре уҡыусылары ошо арала ғына 44 тонна макулатура тапшырҙы. Билдәле булыуынса, 1 тонна макулатура 4 куб.м ағасты һаҡлай, был 5 эре ағас тигәнде аңлата. Туймазы уҡыусылары, тимәк, 220 ағастың ғүмерен ҡотҡарған булып сыға.

✓22-30 апрелдә Өфөлә ирҙәр араһында бокс буйынса Рәсәй чемпионаты үтә. Ярыштар донъя чемпионаты, аҙаҡ Лондонда үтәсәк Олимпиада-2012 өсөн Рәсәй милли йыйылма командаһы туплауҙың һуңғы этабы булып торасаҡ. Ярыштар Спорт һарайында үтә.

*ХОККЕЙ*

**Финал уйындары тамамланыуға бер аҙна ваҡыт үтте, ә Өфө урамдарында әле булһа "Салауат - чемпион!" тигән ҡыуанеслы ауаздар ишетелеп ҡала. Өс йыл уйнатылған Гагарин кубогын ике йыл рәттән Ҡаҙандың "Аҡ барыҫ" хоккей клубы үҙ ҡулынан ысҡындырмаһа, быйыл, ниһәйәт, "Салауат Юлаев" был сылбырҙы өҙҙө һәм Гагарин кубогын Өфөлә ҡалдырыуға өлгәште. Юлаевсылар уйын дилбегәһен сезон башында уҡ үҙ ҡулына алды һәм аҙаҡҡаса ысҡындырманы, финал уйындарына иң көслө командалар рәтендә килеп инде. Финалда Мәскәү өлкәһенең "Атлант"ы менән уйындар Рәсәй хоккейында иң көслө команда нәҡ Башҡортостанда икәнлеген иҫбатланы.**

# БЫНА БЫЛ, ИСМАҺАМ, ЕҢЕҮ!



"1990 йылдарҙа команданы һаҡлап, 2000 йылдарҙа уның данын арттырыуға ҙур көс һалыусыларға рәхмәт!" - тип белдерҙе Рөстәм Хәмитов ҡотлау тантанаһында. Ысынлап та, команданың ошондай юғары кимәлгә етеүе оҙаҡ йылдар дауамында дөрөҫ алып барылған эш һөҙөмтәһе ул. Шулай уҡ ҙур спорт - ҙур аҡса талап итә икәне лә мәғлүм. "Салауат Юлаев" хоккей командаһы уңышларында уға матди ярҙам итеүселәрҙең роле баһалап бөткөһөҙ. Бындай ярҙам, үҙ сиратында, Вячеслав Быковҡа көслө уйынсыларҙан торған дүрт (!) звено туплау мөмкинлеге бирҙе. Ә башҡа командаларҙа бындай звенолар уҙа барһа икәүҙән артманы.

Ҡапҡасыһыҙ ҙур һөҙөмтәләргә ирешеп булмай. Был йәһәттән юлаевсылар ҡапҡаһы һәр саҡ ышаныслы һаҡ аҫтында булды. Был сезонда команда етәкселәге океан аръяғынан Эрик Эрсбергты "кулға төшерҙе" һәм ул, ысынлап та, үҙен "швед стенаһы" итеп танытты.

Уңыштың кире яҡтарын эҙләүселәр һәр ваҡыт була. Был еңеү ҙә ҡағиҙәнән ситләшмәне. Финал уйындары барышында уҡ "Атлант" тренеры Милош Ржига әфәнде төрлө кинәйәләре менән "Салауат Юлаев" командаһы тренерҙарына һәм уйынсыларына психологик һөжүм эшләп маташты, ләкин был алым командаға тәьҫир итмәне. Ҡайһы бер мәғлүмәт сараларының, йәнәһе лә, судьяларҙың "Атлант" уйынсыларын "гәйепһеҙгә" штраф минуттары бирел, "Салауат Юлаев"ты яҡлай тип раҫлап маташыуы ла көлкө генә тыуҙыра. Бөтә сезон буйына үҙен иң көслө команда итеп күрһәткән "Салауат Юлаев" финал уйындарында ҡапыл ғына "көсһөҙгә" әйләнеп китергә тейеш буламы инде? Үҙ ғүмерендә тәүге тапҡыр плей-оффтың финалына сығыу мөмкинлеген алған "Атлант"ты, ысынлап та "Салауат Юлаев"ҡа ҡаршы торор көс тип ҡабул иттеләрме? Аңлашылмай. Юлаевсылар уйнаған уйындарҙың һәр минут-секундын тәфсирләп ҡарап, әллә ниндәй гәйептәр тағып бөтөүселәр булды. Башҡа командаларға "гәфү ителгән" яңылышлыҡтар бары тик юлаевсыларға ғына ҡырын сыҡты. Тик парадокс: "Салауат Юлаев"ҡа бысраҡ әйләндәр уҙҙәре уҡ Гагарин кубогын нәҡ Өфө командаһы алырға тейешлеген инҡар итмәй ине. Тотош командаға ғына түгел, ә айырым уйынсыларға ла ҡаршы алып барылды мәғлүмәти "һуғыш". Команданың ғына түгел, ә тотош КХЛ-дың иң яҡшы уйынсыларының береһе Александр Радуловтың һәр хәрәкәтенән сөй эҙләнеләр. Барлыҡ "дуҫтарға" ла яуапты Александр үҙе бирҙе: "Был еңеү - ул мине, гөмүмән, бөтә команданы яманлағандарға яуап! Беҙ уйыныбыҙ менән үҙебеҙҙең кемлекте күрһәттек! Минең өсөн, тәү сиратта, команданың еңеүе мөһим! Башҡа бер нәмә лә мине ҡыҙыҡһындырмай! Мин был команданы яратам! Көйәрмәндәребеҙҙе яратам, гөмүмән, Өфөнө яратам! Беҙгә ышанғаныһыҙ өсөн ҙур рәхмәт!" - тип белдерҙе Александр Радулов уйын һуңында.

Александр ғына түгел, ә команданың һәр уйынсыһы айырым маҡтауға һәм хөрмәткә лайыҡ. Кубокты алыуға барлыҡ оҫталығын, етеҙлеген һәм көсөн һалыусы хоккейсылар булмаһа, был еңеү ҙә булмаҫ ине. Киләһе сезондарҙа ла команданың көслө уйынсылар һәм тәжрибәле тренерҙар составы "Салауат Юлаев"ты яңы бейек үрҙәргә алып килеүенә шик юҡ.

**Быйыл үҙенең ярты быуатлыҡ юбилейын билдәләгән хоккей клубы, Гагарин кубогын яулап, үҙенә иң ҙур бүләк эшләне. Миллионлаған көйәрмәндәр хәтерендә 2011 йылдың 16 апреле Башҡортостан спорт тормошонда иң яҡты көндәрҙең береһе булып уйылып ҡалды.**

Нәркәс САФИУЛЛИНА.

*Рәшит ШӘКҮР*

## АЛҒА, САЛАУАТ, АЛҒА!

Төнө буйы, көнө буйы
Шау-гөр килде өфөләр,
Урам тулы, майҙан тулы -
Өфөләге кешеләр.

Шатлыҡтары эскә һыймай
Көйәрмәндәрҙең быйыл -
Оло еңеү алып килде
КХЛ тигән уйын.

Һай, "Салауат", илдең ҡото,
"Салауат" ул - еңеүсе,
Алыштарҙа, ярыштарҙа,
Еңеп, алдан килеүсе.

Дүрт күҙ менән көтөп алдыҡ
Финишҡа сыҡҡан юлды,
Еңеү юлы еңел түгел -
Бер яндыҡ та бер тундыҡ.

Әммә беҙҙә сикһеҙ ине
"Салауат"ҡа ышаныс,
Рухыбыҙҙың бөйөклөгө -
Ул бит беҙҙең инаныс.

"Салауат"тың саялығын,
"Салауат"тың даланын
Атланттар ҙа күрҙе хәҙер,
Атланттар ҙа таныны.

Боҙ яланы - яу яланы,
Әйҙә алға, "Салауат"!
Илде-көндө ҡыуандырып,
Еңеү яула, "Салауат"!

*ҺЕҘҘЕ АЛДАЙҘАР?*

# БИЛБАУ ҒЫНА...

## ябыҡтырһа икән дә

**2010 йылда республика Ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау хеҙмәте халыҡтан 12 мең ғариза ҡабул иткән. Был ғаризаларға ярашлы, өфөлөләрҙе көнкүреш техникаһына (26,3 процент), кесә телефонына (17,1), йорт йыһаздарына (11,3), аяҡ кейеменә (9,7), кейемгә (7,4), медицина тауарҙарына (6), автотранспорт (5,8) һәм төҙөлөш материалдарына (5,2) бәйле һорауҙар борсой.**

Телевизор экрандарынан, гәзит-журнал биттәренән төрлө алдауҙар хаҡында йыш хәбәр ителеп торһа ла, төрлө мутлашыусылар ҡулына эләгеүселәр һаны кәмемәй. Беҙ һаулыҡты нығытыусы, йәшлекте ҡайтарыусы биоөҫтәмәләр ҡулланып отолдоҡ, финанс пирамидалары алдаған үттек, ләкин быға тиклем барлыҡ ауырыуҙарҙы дауалаусы бер киҫәк туҡыма хаҡында хәбәрҙәр түгел инек әле. Һатыусылар вәғәҙә итеүенсә, был туҡыма аҙыҡ-түлекте иҫкертмәйенсә оҙаҡ һаҡлау, хатта кешенең энергетик каналын асыу көсөнә лә эйә, имеш. Һатып алыусылар, әлбиттә, был ябай туҡымала һанап үтелгән сифаттарҙың береһен дә тапмай. Алданған кешеләргә Ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау хеҙмәтенә мөрәжәғәт итеү ҙә ярҙам итмәйәсәк, сөнки улар барыһы ла үҙ теләге менән һатып алған был тауарҙы. Белгестәр әйтеүенсә, улар аҡсаларын кире ҡайтара алмаясаҡ. Ябыҡыу вәғәҙә иткән билбауҙы һатып алыусыларҙы ла ошо уҡ хәл көтә. Хаҡы 22 меңгә барып еткән был билбауҙың, әлбиттә, ябыҡтырыу һөҙөмтәһе юҡ. Рәсәй Федерацияһының "Ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау" законына ярашлы, медицина аппараттарын, дарыуҙарҙы кире ҡайтарыу мөмкин түгел, ә был билбау нәҡ шулар исемлегенә инә, ти экспертлар.

Ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау йәмғиәтенә килтерелгән ғаризалар исемлегендә хаҡы 120 меңдән алып 140 меңгә тиклемге саңһурҙырғыс та бар. Был ҡыйбатлы тауарҙы хатта бер пенсия аҡсаһына йәшәгәндәргә лә һатыуға өлгәшкән мутлашыусылар. Аҡсалары булмағандарға банктан кредит алырға ярҙам иткәндәр. Һәм был юлы ла мутлашыуҙы иҫбат итеп булмай, ти белгестәр, сөнки барыһы ла законға ярашлы эшләнгән, йәғни пенсионерҙар үҙ теләге менән килешеү төҙөгән.

**Нисек итеп алданыусылар рәтен тултырмаҫҡа?**

● Тәү сиратта, әйберен һатып алырға йыйынған компанияның адресын, телефонын, башҡа тулы мәғлүмәттәрен белегеҙ.

● Ниндәй ҙә булһа килешеүгә ҡул ҡуйыр алдынан иғтибар менән уҡығыҙ һәм барлыҡ пункты ла аңлашылһа һәм һеҙҙе ҡәнәғәтләндерһә генә ҡултамғағыҙҙы ҡуйығыҙ.

● Әгәр ҙә һеҙҙе ниндәйҙер тауарҙы һатып алырға телефон аша өгөтләһәләр, һәр саҡ тулы мәғлүмәтте яҙма рәүештә лә ебәреүҙәрен талап итегеҙ, сөнки аҙаҡ телдән вәғәҙә ителгәнде һеҙ бер нисек тә иҫбат итә алмаясаҡһығыҙ.

● Медицина аппараттарын тик аптека һәм медицина учреждениеларында ғына һатып алыу кәрәк.

Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы

### Йөҡлай алмаһағыҙ



1 ҡалаҡ бесәй үләне (валериана) тамырын 1 стакан ҡайнар һыуға һалып 15 минут һүрән утта ҡайнатырға һәм 10 минут һыуытып, һөҙөргә. Көнөнә 3 мәртәбә 1-әр ҡалаҡ эсергә.

### Быуындар һыҙлаһа

Быуындар яҙғы һарыһыу мәлендә айырыуса ныҡ һыҙлай. Шуға ла был миҙгелдә һарымһаҡты ваҡ ҡырғыстан ҡырып һыуын һығырға һәм унар тамсылап йылы һөт менән бергә көнөнә өс мәртәбә эсергә. Төнгөләккә һарымһаҡ һутына манылған сепрәкте һыҙлаған быуынға бәйләп ятырға.

### Авитаминоз

Яҙ көнө организмды витаминдар менән байытыу өсөн слива ашарға кәрәк. Унда С, В, РР витаминдары күп, йөрәк ауырыуынан, бауырҙы таҙартыу өсөн дә яҡшы сара.

### Паразиттарҙан ҡотолоу

❖ Уртаса ҙурлыҡтағы һуғанды таҙартып, 1 стакан ҡайнаған һыуға һалып, 12 сәғәт төнәтергә (кистән әҙерләп ятаһың). Көнөнә яртышар стакан эсергә. ❖ 2 стакан ҡайнаған һыуға 1 балғалаҡ әсе әрем үләне һалып төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 20 минут алда 1-2 ҡалаҡ эсергә.

### Файҙалы ҡатнашма

❖ Уртаса ҙурлыҡтағы 2-3 бешкән сөгөлдөр һәм әсе торманы (редька) эре ҡырғыстан ҡырығыҙ. Булһа, 5 ҡалаҡ мүк еләге (клюква), лимон йәки алма һуты ҡушығыҙ, тәменсә шәкәр йәки бал ҡушып болғатығыҙ; ❖ 2 бешкән сөгөлдөрҙө ҡырғыстан үткәрегеҙ, 1 стакан һөйөгө алынған һәм иҙелгән слива ҡушығыҙ, шәкәр, йогурт менән болғатығыҙ.

### Хроник гастрит

❖ Ашҡаҙанда әселек (кислотность) түбән булһа, яңы ғына һығып алынған кәбеҫтә һутын көнөнә 2-3 тапҡыр ашарҙан бер сәғәт алда яртышар стаканлап эсергә; ❖ Әгәр әселек, киреһенсә, юғары булһа, кишер һуты эсегеҙ.

### Грек сәтләүеге

Оҙаҡ төҙәлмәгән йәрәхәткә ас ҡарынлай грек сәтләүеге сәйнәп ябыу файҙалы. Йәрәхәт тиҙ уналыр.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

ЯҢЫ РУБРИКА: ЯҘМЫШ-ЯҢЫЛЫШ

# ИКӘҮ БУЛДЫ СӘҒИТТӘР

Яҙ айҙары етһә, нишләптер, Сәғиттәр менән булған хәл иҫкә төшә лә тора. Интернат-мәктәптә уҡып йөрөгән ваҡыт. Беҙ, өлкән кластар, күптәребеҙ тәүгә ғашиҡ булып, йөрәктәр иләҫ-миләҫ килгән мәлдәр. Ҡыҙҙар менән малайҙар араһында дуҫлашып йөрөүсе матур ғына парҙар ҙа бар, тик бераү ҙә уларҙан көлмәй, киреһенсә, һоҡланып ҡарайбыҙ уларға. Әхирәтем менән беҙ икебеҙ ҙә килешкәнбеҙ: ҡыйыуһыҙ, оялсан инек. Төпкөл ауылдан килгәнбеҙ, ҡайҙа инде ул ғишыҡ-мишыҡ уйлау, кешегә күтәрелеп ҡарарға ҡыймайбыҙ. Шулай бер саҡ ҡатын-ҡыҙҙар көнө - 8 март байрамы алдынан ҡайһы бер ҡыҙҙарға бүләктәр, ҡотлауҙар яуҙыра башланылар. Егеттәр бүләктәрҙе үҙҙәре түгел, ә бөләкәй класта уҡыған берәй бала аша биреп ебәрәләр. Һис көтмәгәндә, уйламағанда минең ҡулға ла матур ғына бер открытка тотторол киттеләр. Таныш булмаған почерк менән ҡотлау һүҙҙәре яҙылған, иң аҙаҡ ҡотлаусының исеме Сәғит тип ҡуйылған. Мин аптырашҡа ҡалдым. Берәүҙең дә үҙ хистәрен белгертеп, хатта һиҙелер-һиҙелмәҫ тә ишара яһағаны юҡ бит. Киреһенсә, малайҙар минән нисектер ситләшә, ҡырыҫ булғаным өсөн яратмайҙар кеүек тойола. Етмәһә, йәмһеҙмен дә. Ә-ә, был бит үҙебеҙҙең ауыл егете! Сәғит. Минән бер класҡа юғары уҡый. Ул миңә оҡшай тип әйтә алмайым. Уның тарафынан да бер ниндәй иғтибар билдәһе булғаны юҡ. Ике яҡтан да битарафлыҡ. Үәт әй, ҡалай һиҙҙермәй йөрөй бит әле ул. Мин хәҙер ул юлыма осраған һайын уңайһыҙлана, ояла башланым. Ә ул бер ни ҙә булмағандай, хатта күрмәй ҙә үтеп китә. Ауылдан интернат-мәктәптә тиҫтәләп бала уҡыйбыҙ, каникулға бергә ҡайтып китәбеҙ. Миңә ҡыйын, ауылдашым Сәғиттән үлеп оялам, үҙемде нисек тоторға ла белмәйем. Оялыштан был хаҡта хатта әхирәтемә лә бер ни ҙә әйтмәнем. Ахырҙа, Сәғит мәктәпте тамамлап сығып китте, мин еңел һулап ҡуйҙым. Шуныһы ғына аптырата: миңә ҡотлау бүләге ебәргәнгә тиклем нисек туң булһа, аҙаҡтан да шул уҡ битарафлыҡ һаҡланды. Аҙаҡ каникулға ҡайтһам да ауылда эшләп йөрөгән Сәғит тарафынан үҙемә ҡарата бер ниндәй иғтибар билдәһе күрмәнем, миндә лә уның менән ҡыҙыҡһыныу юҡ ине. Ә ахмаҡлығымды мин бик һуң аңланым.

Мәктәпте генә түгел, Өфөлә вуз тамамлап, эшләп йөрөгән сағымда осраттым мин ул ысын Сәғитте. Филармонияла. Концерт бөткәс, кейемдәрен алырға сиратҡа баҫҡан шығырым тулы халыҡты көскә йырып, минең ҡаршыға килеп баҫты теге ваҡыт интернатта параллель класта уҡыған шөп, бейеүсе егет Сәғит! Күрешеп, бер-ике һүҙ алышҡас та, мин үҙ юлым менән ашыҡтым. Ни өсөнмө? Сөнки миңә, туң башҡа, һаман барып етмәй ине әле. Фәҡәт байтаҡ ваҡыт үткәс (ул да, мин дә ғаиләле инек инде), уның тағы бер класташыбыҙ менән эш кабинетыма килеп инеүенән һуң ғына мин "үҙемдең ысын Сәғитемде" танының. "Келт" итеп иҫкә төштө: теге ваҡыт мин ауылдаш Сәғиттән оялып йөрөгәндә, 10 Б-ла уҡыған "ысын" Сәғит, күрәһең, минең тупаҫлыҡтан ояландыр инде. Интернаттың оҙон коридорында юлдар киҫешә ҡалһа, ул шөп итеп, эҙ баҫып үтеп китер ине эргәнән, ә йөҙә, ниңәлер, ҡып-ҡыҙыл була ине... Ә мин, ахмаҡ, туң күҙҙәрем менән бер ни күрмәй, "зомби" һымаҡ уның янынан битараф уҙыр инем. Әле яҙған ике осрашыуҙа ла беҙ был хаҡта бер ни ҙә һөйләшмәнек. Әгәр ул "Киске Өфө" гәзитен уҡыһа, үҙен таныр, бәлки. Быны ул һунлап булһа ла минең ғәфү үтенеүем тип ҡабул итһен...

**Фәйрүзә ИШБАЕВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

**Редакциянан: Һәр кемдең тормошонда булалыр бындай яҙмыш-яңылыштар. Улар аҙаҡ йә йылмайтып, йә үкендереп, йә илатып иҫкә төшөп торалыр. Уны кемдәргәләр һөйләп, эс бушатып алғы ла киләлер. Әйҙәгеҙ, беҙ һеҙгә шундай мөмкинлек бирәбеҙ. Һөйләгеҙ. Ул башҡаларға яҙмыштарҙы яңылыштырмаҫлыҡ фәһем, һабаҡ бирерлек булһын.**

---

БЫЛ - ХӘҠИҠӘТ

**Былтыр бөтә төрки донъяһы ТЮРКСОЙ Халыҡ-ара төрки мәҙәниәте ойошмаһы тарафынан иғлан ителгән Әхмәтзәки Вәлиди йылын билдәләне. Быйылғы йыл иһә мәшһүр шағир Ғабдулла Туҡайға бағышланасаҡ. Ғабдулла Туҡай тигәс, бынан тиҫтә йылдан ашыу элек "Ватандаш" журналында уҡыған бер мәҡәлә иҫкә төшөп, хәтер һандығымды аҡтарырға мәжбүр итте. 2000 йылдың март һанында Басир Мәһәҙиевтең "Ғабдулла Туҡайға туғандаш" исемле материалы донъя күргәйне. Уны яңынан табып уҡып сыҡтым.**

# БӨЙӨК ТУҠАЙҘЫҢ ӘСӘҺЕ...

## ғәйнә башҡорттарынан



Басир Мәһәҙиев 1947 йылда "Октябрь" (хәҙерге "Ағиҙел") журналында атаҡлы педагог һәм ғалим Закир Шакировтың Ғабдулла Туҡайҙың әсәһе Мәмдүдәнең (Мәмдүҙә) атаһы Зиннәтулланың ғәйнә башҡорто булыуын хәтерләүе тураһында яҙа. Шулай уҡ Өфө ҡалаһында йәшәүсе Гөлзифа Ҡәнәфина инәйҙән яҙып алған ҡыҙыҡлы мәғлүмәтте килтерә. Гөлзифа инәй уға былай тип һөйләй: "Беҙҙең фамилия Ҡәнәфиә ҡарттан килә. Хәҙерге Иглин районындағы Түбәнге Ләмәҙ ауылы кешеһе була. Туғандарыбыҙ һаман да шунда йәшәй. Ғабдулла Туҡайҙың әсәһе Мәмдүдә ана шул Ҡәнәфиә ҡарттар нәҫеленән. Беҙҙең Ҡәнәфиндар Туҡайҙың туғаны булып сыға. Ана, улым Наил Ҡәнәфин... Ғабдулла Туҡайға бик оҡшаш төҫө менән. Хөкүмәтебеҙҙәге Миҙхәт Шакиров миңә атаһы яғынан да, әсәһе яғынан да туған. Атаһы ла, әсәһе лә беҙҙең яҡтың төп башҡорттары...".

Басир Мәһәҙиевтың мәғлүмәте буйынса "Октябрь" журналындағы мәҡәләне эҙләй башланым һәм уны 1946 йылда Туҡайҙың юбилейы уңайы менән сығарылған берләштерелгән 3-4-се һандарҙа табып алдым. Авторы - Афзал Ҡудаш. Был махсус һанда Туҡайҙың тормошон, ижадын, башҡорт теле һәм фольклоры менән бәйләнешен асҡан тикшеренеүҙәр һәм уға бағышланған башҡорт шиғырҙары, Закир Шакировтың Туҡай менән Ҡаҙанда осрашыуы хаҡындағы иҫтәлеге лә бирелгән. 1929 йылдың йәйендә Закир Шакиров һәм Башҡортостанды өйрәнеү йәмғиәте тарафынан Арғаяш кантонында тел һәм фольклор экспедицияһы отчетына һылтанма эшләнгән. Был отчет 1930 йылда "Белем" журналының икенсе һанында донъя күргән. Бында тәү тапҡыр Ғабдулла Туҡайҙың башҡорт тамырҙары телгә алына.

А. Ҡудаштың мәҡәләһенә мөрәжәғәт итәйек: "Уҡыусыларға билдәле булыуынса, Ғ. Туҡай үҙенең поэтик автобиографияһы - "Иҫемдә ҡалғандар"ҙың башында атаһы һәм олатаһы тураһында ҡайһы бер мәғлүмәттәр яҙа һәм шуның буйынса беҙ шағирҙың атаһы яғынан өс быуынға һуҙылған шәжәрәһен беләбеҙ. "Минең атайым Мөхәмәтғариф, - тип яҙа Туҡай, - Ҡушлауыс ҡәрйәһендә Мөхәмәтғәлим исемле мулланың улы булып, 14-15 йәштәрендә Ҡышҡар мәҙрәсәһенә китеп, унда, хәтме көтөп (уҡып бөтөрөп) ҡылырға ғәҙәттә нисә сәнә (йыл) кәрәк булһа, шул тиклем тороп, ҡарт атаһы тере ваҡытта уҡ ауылыбыҙ Ҡышлауыҫҡа ҡайтып, мулла булмыштыр. Мулла булғас та өйләндеке бер йөмәғәте илә бер нисә генә йыл торғас, йөмәғәте вафат булып, бер ир һәм бер ҡыҙ балаһы ҡалмыштыр. Бынан һуң атам, икенсе тапҡыр өйләнеүе улараҡ, Өсиле ҡәрйәһе Зиннәтулла хәҙрәттең Мәмдүдә исемле ҡыҙын (минең әсәмде) алмыштыр. Әсәйем илә бер йыл ярым тиклем торғас, беренсе бала булараҡ мин донъяға килгәнмен".

"Иҫемдә ҡалғандар"ҙа Ғабдулла Туҡай үҙенең әсәһенең Мәмдүдә, бабаһының Зиннәтулла исемле булыуы һәм уның Өсиле ауылында күп балалы бер мулла икәнлеге тураһында ла әйтә. Ысынлап та, Туҡайҙың был бабаһында йәшәгән йылдары - шағирҙың балалыҡ осоронда иң ауыр, иң ҡыҙғаныс торға әйтелгән "Иҫемдә ҡалғандар" тигән поэтик автобиографияһына таяна. Ләкин һуңғы йылдарҙағы ҡайһы бер эҙләнеүҙәр, тикшеренеүҙәр Ғ. Туҡай биографияһын байытыуға ярҙам итә торған айырым мәлдәрҙе килтереп сығарҙы.

Ғабдулла Туҡайҙың әсәһенең тулы исеме Бибимәмдүдә һәм уның атаһы (шағирҙың олатаһы) Зиннәтулла Ҡаҙан губернаһы кешеһе түгел һәм ул Өсилелә тыумаған. Уның тыуған урыны элекке Пермь губернаһы Оса өйәҙе, Ғәйнә иле, Ҡожамаҡты ауылы. Милләте буйынса Зиннәтулла - башҡорт. Ул йәш сағында Ҡауам ауылында (илендә) уҡыған һәм шунан һуң хәҙерге Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районы Әшир (Аширово) ауылында балалар уҡытҡан. Йәш сағында Зиннәтулла шиғырҙар яҙыу менән шөғөлләнгән һәм балалар уҡытҡан йылдарында күршеләге Тәхәллим







мошта үткәргән йылдары. Зиннәтулла ғаиләһендәге ярлылыҡты хәтерләп, Туҡай һуңынан: "Был ғаилә эсендәге ярлылыҡ шул дәрәжәгә еткән булырға кәрәк ки, мин хәҙер ҙә булһа, бабайҙың күрше байҙарҙан ауылдарҙан икмәк һыныҡтары теләнеп алып ҡайтҡанын иҫемдә тотам", - тип яҙҙы.

Туҡайҙың ата-әсәһе, бабалары тураһында юғарыла килтерелгән мәғлүмәттәрҙән башҡа материалдар юҡ тип әйтерлек. Шағирҙың тормошон һәм ижадын өйрәнеүсе - тикшереүсе әҙәбиәт тарихсылары, тәнҡитселәр ҙә, шулай уҡ уның тураһында иҫтәлек яҙыусылар ҙа, Туҡайҙың балалыҡ йылдарын яҡтыртҡанда, күп ваҡытта, шағирҙың үҙе яҙып ҡалдырған шул юғарыла исемле башҡорт ауылындағы Хәким хәлфә менән шиғырҙар яҙышып торған. "Ғ. Туҡайҙың әсәһе Мәмдүдәнең атаһы Зиннәтулла менән бер ваҡыт шиғырҙар, хаттар яҙышып торған берәү булған. Зиннәтулла шағир булған. Ул йәш сағында уҡ Ғәшир ауылында балалар уҡытыусы булып, төп Ғәйнә иле Ҡожамаҡты башҡорто" ("Белем" журналы, 1930 йыл, № 2, 52 бит. Доцент Закир Шакиров мәҡәләһенән).

Зиннәтулланың тыуған иле, шиғырҙар яҙыуы һәм милләте буйынса башҡорт булыуы тураһында әлегә тиклем бер ерҙә лә баҫылмаған икенсе материал тағы ла асығыраҡ һөйләй. Закир Шакировҡа 1940 йылда Ғ. Туҡайҙың апаһы Сажидә

Зиннәтуллина менән хат аша элемтә тотоу мөмкинлеге тыуа. "Исемдә ҡалғандар" яҙмаларында Туҡайҙың Сажиҙәне саф күңелдән, ҙур һөйөү менән "ап-аҡ саф бер фәрештә" тип атауы уҡыусыларға билдәле. Шағирҙың күңелендә фәрештә рәүешендә ҡалған Сажидә апай Зиннәтуллина үҙенең 1940 йылдың 5 июнендә яҙған хатында түбәндәгеләрҙе бәйән итә: "Минең атайым башҡорт. Ҡожамаҡты тигән илдән сығып, Ҡауам илендә уҡыған. Ике егет булғандар. Береһе үлгән. Уныһы Щадрин өйәҙенеке. Шунан һуң атайым уҡып сығып, Ҡышлауысҡа күскән. Атайым тағы Ҡышлауыстан Өсилегә күскән. Унан Өсилегә ҡайтҡан ваҡытта Мәмдүдә апай ике йәштә бала булған. Үҫеп етеп, Ҡышлауысҡа кейәүгә сыҡҡан. Шунда Ғабдулла тыуып, еҙнәй вафат булып, Мәмдүдә апай Өсилегә ҡайтҡан. Шунан һуң бер аҙҙан Сасна тигән ауылға кейәүгә барған. Унда күп тора алмаған, вафат булған, атайым күрмәй ҡалған; ара алыҫ булған, тиҙ генә хәбәр килеп етә алмаған, ауырыуы ла тиҙ булған. Атайым барһа, Мәмдүдә апай вафат булған. Өс көн ҡайғы йорто булған. Атайым һушһыҙланып торған. Был арала Ғабдулланы алып ҡайтып керҙе. Беҙҙең йортта тағы мәтам. Атайым Мәмдүдә апайҙы һағынып, илай-илай ошо шиғырҙарҙы әйтә ине.

*Мәүлүдедер (тыуған ере) Ҡышлауыста, мәүте (үлгән ере) Саснала.*
*Дәүре мәшхәрҙә ғинәйәт әйләһен хаҡ зәлжәләл (Үлгәс Алла ярҙам итһен).*
*Исеме Бибимәмдүдәлер ғаҡлы ирде ғаян (асыҡ аҡыллы ине).*
*Тыңлар ине ғишҡи илә вәғәз, мәсаил вә мәған (яуап һәм әһәмиәт менән).*
*Һүҙләгәндә күҙҙән йәштәремеҙ ула хун (була ҡан).*
*Уйлағанда хәсрәтенән аҡылыма килә женун (аҡылдан яҙам, мәжнүнләнәм).*
*Ни сәбәптер, эй, Хоҙай, ризығы аҙ, ғүмере тамам.*
*Аҡты йәшем, ни ҡылайым, әмере хәй илә янам (Алла әмре менән йоҡоһоҙланам).*

Инде атайымдың ата-әсәһенән, туғандарынан бер үҙе айырылып тороуына моңланып, үҙ-үҙенә әйткән шиғырҙарын яҙам:

*Фәҡирем Зиннәтулла булды намым (исемем).*
*Уса иле ине яә-мәкамым (торған урыным).*
*Тыуған илем Ҡожамаҡты ҡәрйәһелер*
*Пермь табығы (губернаһы), Уса мозафалыр (өйәҙе).*
*Зәнелбәшәр ине нам атамыҙ,*
*Әмирхан ибне Әмирҙер бабамыҙ.*
*Мөкасат дары ғәрбәттә моһажир (яҙмыш буйынса үҙ иленән айырылған)*
*Мөжәнәт бәйтельәжзәндә мосафир (тереклегем яза йортондағы юлсы кеүек).*
*Йәшем һәфте ду сал (етмеш ике) бәлки зияда (күберәк).*
*Сөләхаззымдан (өлешем яман) һәм бәхетем сейах (өара).*

Тимәк, Зиннәтулланың үҙе тураһындағы был шиғырынан беҙ Ғ.Туҡайҙың әсәһе яғынан биш быуынға һуҙылған шәжәрәһен билдәләй алабыҙ. Зиннәтулланың атаһы Зәйнелбәшәр, уның атаһы Әмирхан, уның атаһы Әмир.

Хатта тағы ла өҫтәмә әһәмиәтле мәлдәр бар. Туҡайҙың әсәһе Мәмдүдә, үҙенең атаһы кеүек үк, йырҙар сығарырға, шиғырҙар әйтергә оҫта булған. Сажидә апайҙың яҙыуына ҡарағанда, ире үлгәс, Мәмдүдә Туҡайҙы Ҡушлауыста ҡалдырып, башта Өсилегә, атаһы йортона ҡайтҡан һәм сит ауылда тороп ҡалған балаһы - кескәй генә Туҡай тураһында һағынып йырҙар йырлаған, шиғырҙар әйткән. Был турала Сажидә апайҙың хатында беҙ түбәндәгеләрҙе уҡыйбыҙ:

*"Мәмдүдә апайҙың, еҙнәй вафат булғас, Ғабдулланы Ҡушлауыста ҡалдырып ҡайтҡас, йырлаған йырҙарын хәтерләйем.*
*Өй турында баҡсала бер һандуғас һайрай.*
*Ниңә һайрай был һандуғас ҡағынып?*
*Шуны һайрай:*
*Минең илағанымды белеп - баламды һағынып.*
*Ниңә һайрай был һандуғас, һайрай үҫеп еткәндә,*
*Шуны һайрай:*
*Мине күреп, баламдан айырылып киткәндә.*
*Ниңә һайрай был һандуғас кис менән?*
*Шуны һайрай:*
*Күрҙе бәнем ике күҙҙе йәш менән,*
*Ниңә һайрай был һандуғас һыҙланып,*
*Шуны һайрай:*
*Минең илағанды күреп, баламды ҡыҙғанып".*

Сажидә апайҙың хатында, юғарыла күсерелгән юлдарҙың аҙағында, Мәмдүдәнең үлеү датаһы тураһында ла әйтелгән: "Мәмдүдә апайҙың тыуған йылын тәғәйен белә алмайым. Вафат булғанын уйлап тура килә - 1890 йылда, ғинуарҙың 18 көнөндә".

Һис шикһеҙ, Сажидә апайҙың хатында килтерелгән факттар (Зиннәтулланың шағир булыуы һәм уның Ҡожамаҡты башҡорто икәнлеге), улар күп йылдар үтеү менән һуңында хәтерҙән яҙылһалар ҙа, халыҡ шағиры Ғ. Туҡайҙың биографияһын тулыландырыу һәм байытыуға ярҙам итәсәк. Киләсәктә Туҡайҙың тормош юлын һәм ижадын өйрәнеүселәр был мәлдәргә, әлбиттә, әһәмиәт бирерҙәр".

А. Ҡудаштың был мәҡәләһе Ғабдулла Туҡайҙың ижадына башҡа күҙлектән дә ҡарарға кәрәклекте күрһәтә. Билдәле булыуынса, башланғыс синыфтарҙан уҡ беҙ уның шиғырҙарын, автобиографияһын өйрәнәбеҙ. Тик унда юғарыла килтерелгән мәғлүмәттәр ҡулланылмай. Әҙәбиәт тарихында ла был мәлдәр сағылырға тейештер. Мәҫәлән, Өфөгә килеүе, Башҡортостандың тәүге халыҡ шағиры Мәжит Ғафури менән осрашыуы, башҡорт фольклоры, халыҡ йырҙары менән ҡыҙыҡһыныуы, уларҙы яҙып алыуы билдәле. Ғ.Туҡайҙың ижады буйынса 1917 йылға тиклем үк танылған башҡорт ғалимы Әхмәтзәки Вәлиди "Туҡайҙың "Шүрәле"-һенә ҡарата тикшеренеү" исемле мәҡәлә яҙа. Ә Японияла Силәбе башҡорттарынан сыҡҡан мәшһүр йәмәғәт эшмәкәре Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиев етәкселегендәге тәүге мосолман нәшриәте "Матбағаи Исламиә"лә Туҡайҙың шиғырҙары баҫылыуы ла мөһим ваҡиға.

Юғарыла килтерелгән мәғлүмәттәр бик мөһим. Сөнки ҡайһы бер ваҡыттарҙа етди архив йә ташҡа баҫылған мәғлүмәт булмағанда ла бәғзе бер яҙыусы йә шағирҙың ике милләткә лә уртаҡ ителеүен беләбеҙ. Закир Шакиров һәм Афзал Ҡудаштың мәҡәләләрен, улар килтергән мәғлүмәттәрҙе уҡығандан һуң, шул уҡ критерийҙарҙан сығып, Туҡайҙың да бындай шағирҙар рәтенә инергә хаҡы бар, тип әйтеп була. Был йүнәлештәге тикшеренеүҙәрҙең яңы асыштар, яңы тарихи сығанаҡтар асырына шик юҡ.

**Әхәт СӘЛИХОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**
**Төркиә Республикаһы.**

*БАТЫРҘАРҘЫҢ ИСЕМЕН БЕЛ!*



# УРАЛТАУ ОСОРҒАН БӨРКӨТТӘР

## Хәлфетдин Фәттәхетдинов



**Хәлфетдин Фәттәхетдинов - Муса Мортазин, Шәмсетдин Ғафаровтар кеүек ике тапҡыр Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән яугир. Ул 1892 йылда Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙенең Салауат ауылында (хәҙерге Әбйәлил районы) тыуған.**

1916 йылда Беренсе донъя һуғышына алына. Армияла уҡыу командаһын (Учебная команда) тамамлай. Ул батша армияһында фельдфебель (хәҙергесә өлкән сержант дәрәжәһенә тап килә) званиеһын ала, һуғышта взвод командиры була. Һуғыштан ҡайтыуға, Башҡортостанда автономия өсөн көрәштең ҡолас йәйгән мәле була. Дары еҫен еҫкәп ҡайтҡан фельдфебелдә 1918 йылда йәш автономияның яңы ойошторолоп ятҡан хәрби көстәренә - башҡорт армияһына хеҙмәткә алалар. Ул Әмир Ҡарамышевтың 1-се Башҡорт кавалерия полкында хеҙмәт итә башлай (1919 йылдың ғинуарынан был полкка Муса Мортазин командалыҡ итә).

Хәлфетдин Фәттәхетдинов 1920 йылдың июнендә 27-се кавалерия полкының 1-се эскадрон командиры ярҙамсыһы итеп тәғәйенләнә. Башҡорт атлылары фронтҡа килеү менән 12-се армия составында поляктарға ҡаршы ташлана. Июнь башында ҡыҙыл командование поляктарҙы Киев ҡалаһынан ҡыуып сығарыу буйынса операция башлай. Башҡорт бригадаһы Киевтың төньяғынан Днепрҙы кисеп сығып, Киев-Коростень тимер юлын кисеү маҡсатында алға ынтыла. Х. Фәттәхетдинов Пиняево ауылы янында һуғышта батырлыҡ күрһәтеп, тәүге Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була. РСФСР Реввоенсоветының 1921 йылдың 17 февралендәге 57-се һанлы фарманында былай тиелгән: "Утверждается присуждение... Реввоенсоветом 12-й армии ордена Красного знамени: Башкирских кавполков... 27-го помощнику командира 1-го эскадрона тов. Фаттахетдинову - за захват во главе трех красноармейцев у дер. Пиняево 6 июня 1920 г. 25 поляков, 2 автоматических винтовок и запасных частей...". 1920 йылдың октябрендә Совет Рәсәйе менән Польша араһында солох төҙәлә һәм ошоноң менән поляктарға ҡаршы һуғыш тамамлана. Башҡорт атлылары поляктар менән бергә Ҡыҙыл армияға ҡаршы һуғышҡан Семен Петлюраның армияһына ҡаршы ташлана. 1920 йылдың ноябрендә Башҡорт бригадаһы Котовскийҙың бригадаһы менән Петлюраның ғәскәрен тар-мар итә. Бында ла эскадрон командиры Фәттәхетдинов ҡаһарманлыҡ күрһәтеп, тағы бер Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була. Орден менән бүләкләү тураһында Реввоенсоветтың 34-се һанлы фарманы 1922 йылдың февралендә донъя күрә. Унда былай тиелгән: "...Утверждается присуждение...Реввоенсоветом Киевского военного округа ордена Красного знамени: 2-го Башкирского кавалерийского полка... командиру взвода тов. Фаттахетдинову Хальфетдину - за отличие, оказанное в бою 21 ноября 1920 г. у дер. Клининцы..."

Хәлфетдин Фәттәхетдиновтың икенсе батырлығы полк командирының орденға тәҡдим итеп яҙған представлениеһында (1920 йылдың декабре) ентекле бәйән ителгән: "...в бою 21 ноября 1920 г. ворвавшись в дер. Клининцы, бросился на противника, продолжавшего обстреливать картечью из одного орудия, и, кроме того, из двух пулеметов, подскакав к офицеру, не прекращавшему стрельбу из пулемета, зарубил его, оставшаяся орудийная и пулеметная прислуга сдалась Фаттахетдинову и подоспевшим красноармейцам. Результатом поступка Фаттахетдинова, увлекшего остальных красноармейцев, было взятие одного орудия, двух пулеметов и нескольких пленных противника..."

Поляктар һәм Петлюраның ғәскәренә ҡаршы ҡанлы һуғыштарҙа сафтары һирәгәйгән Башҡорт кавалерия бригадаһының өс полкынан (1-се, 27-се, 28-се полктар) ике полк ойоштороло. Улар 1-се һәм 2-се Башҡорт полктары тип атала. Х.Фәттәхетдинов 2-се Башҡорт кавалерия полкы 1-се эскадронының взвод командиры итеп тәғәйенләнә. 1921 йылдың февраль-мартында ошо полктың хужалыҡ командаһы начальнигы вазифаһын үтәй. Ошо йылда ул демобилизацияланып, тыуған яғына ҡайта.

Шулай итеп, Польша фронтында һәм Петлюра ғәскәрен ҡыйратыуҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн Хәлфетдин Фәттәхетдинов ике тапҡыр (1921, 1922 йылдарҙа) Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була. Беренсе орден менән бүләкләү тураһында фарман 1921 йылдың февралендә үк донъя күреүгә ҡарамаҫтан, орден тик 1922 йылдың июнендә Башвоенкоматҡа килә. 1922 йылдың 28 июнендә БАССР хәрби комиссары Әхмәтйән Тереғолов "Известия Всебашкирского центроисполкома" гәзитендә Башҡорт бригадаһында хеҙмәт иткән 10 кешегә, шул иҫәптән Х.Фәттәхетдиновҡа, Ҡыҙыл Байраҡ ордены килгәнлеге тураһында хәбәр итә.

1921 йылда Башҡортостанда ҡот осҡос аслыҡ була. Хеҙмәттән ҡайтҡас та Хәлфетдин Фәттәхетдинов Тамъян-Ҡатай кантонында "Башпомгол"дың урындағы ойошмаһында эшләй. Артабан Салауат ауыл Советы рәйесе урынбаҫары вазифаһын башҡара. 1930 йылдан Таштимер элемтә бүлексәһен етәкләй. 1938 йылда ауырып вафат була.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

**✓ Еңәсәгемә һис шикләнмәйем. Проекттың төп маҡсаты - артыҡ ауырлыҡты ташлау. Ләкин уның төп асылы икенселә: кешенең үҙ ялҡаулығы һәм һүлпәнлеге менән көрәшеүен күрһәтеү.**



**Бөтөн республика хоккей менән "ауырыны". Яратҡан командабыҙҙың Гагарин кубогын аласағында тамсы ла шик булманы һәм "Салауат Юлаев" барлыҡ көйәрмәндәренең ышанысын аҡланы. Һуңғы уйын тамамланғас, бер танышым: "Йыл буйы хоккей башланғанын көтөп, уйын менән йәшәнем. Ә хәҙер көндәлдә ниндәйҙер бушлыҡ барлыҡҡа килде хатта", - тине. Был һүҙҙәр, минеңсә, хоккейҙың йәшәйешебеҙгә шул тиклем ныҡ үтеп инеүен раҫлай. Тик шуныһы: хоккей барышын яҡтыртыусы яҡшы комментатор булмаһа, уйын тулы булыр инеме икән? Хоккей көйәрмәндәренә, шулай уҡ Башҡортостан юлдаш телевидениеһы тамашасыларына Азамат Моратов күптән инде үҙ ғаилә ағзаһы кеүек булып китте. Ә кем һуң ул бар хоккей яратыусыларға ла "үҙ кеше" һәм шул уҡ ваҡытта "таныш булмаған" егет? Шулай итеп, Азамат МОРАТОВ үҙе һүҙ ала.**

# ТУҒАН ТЕЛЕМДЕ

## мин башҡорт түгел

### Ҡыҙыҡһыныуҙарҙың башы

Атайым бәләкәй саҡта Өфөләге "Төҙөүсе" ("Строитель") стадионына алып килде һәм мин музыка мәктәбендә скрипка класында шөғөлләнеү менән бер рәттән спорт мәктәбенә, хоккейға ла йөрөй башланым. Сәнғәт мәктәбенән ҡайтам да, конькиҙарымды тотоп, стадионға йүгерәм. Бергә уйнаусы иптәштәрем "Паганини, шәберәк бул!" тип ҡаршы ала ине. Бөйөк хоккейсы булып китмәһәм дә, хоккей менән ҡыҙыҡһыныуым ғүмерлеккә ҡалды, уйындар барышын ҙур ҡыҙыҡһыныу менән күҙәттем. Шуға күрә Максим Балобанов (БСТ каналының спорт программалары баш редакторы - **Ред.**) Башҡортостан юлдаш каналында хоккей комментаторы итеп саҡырғас, ҡуш ҡуллап риза булдым. Эшләгән эшемдең әллә ни ауырлығын күрмәйем, халыҡ әйтмешләй, "ни күрәм - шуны йырлайым". Тәүҙә был эште Андрей Юртаев менән икәүләп алып барҙыҡ, ул Мәскәүгә күскәс, бер үҙем генә тырышам, сөнки был эште алып барырҙай кешеләр бик аҙ. Бының сәбәбен мин спорт комментаторлығына бер ҡайҙа ла уҡытылмауында күрәм. Спорт комментаторҙарына ауырырға ярамай, сөнки был осраҡта телевизион каналды ла, команданы ла ҡыйын хәлгә ҡуяһың. Комментатор булараҡ, быйыл мин өсөнсө сезонды үткәрҙем һәм был аҙаҡҡыһы түгелдер, тип ышаныу килә. Ләкин алмаштырғыһыҙ кеше булмай, китеүемдә һораүҙары ла ихтимал, мин быны яҡшы аңлайым һәм төрлө ситуацияға әҙермен. Холҡом менән тыныс кешемен, шуға күрә төрлө хәлдәрҙе тыныс үткәрә беләм.

### Ура, беҙ еңдек!

Еңеүебеҙгә шик юҡ ине, әлбиттә. Беҙҙең "Салауат Юлаев" командаһы, ысынлап та, бик көслө. Уның тренерҙар һәм хоккейсылар составы ла ныҡлы һәм ышанысы. Беҙҙең алда бер генә юл ине - Гагарин кубогын алыу, һәм беҙ быға өлгәштек! Шулай булмаһа, ни өсөн беҙ барыбыҙ ҙа тик еңеү хаҡына эшләйбеҙ һуң?! Хоккей менән генә "йәшәгән" кешеләр бар. Командабыҙҙың тик еңеүҙәр генә яуларына ныҡ ышанған бәләкәй малайҙар күп. Уларҙың өмөтө, һис шикһеҙ, аҡланырға тейеш ине. Гагарин кубогын алыу уларға тағы ла дәрт, ышаныс өҫтәне һәм был үҙ сиратында спорт менән мауығыусыларҙы тағы ла ишәйтер тип ышанам. Ә был бик һәйбәт күренеш, сөнки спорт йәшәйешебеҙҙә төп урынды алырға тейеш. Республикала хоккей коробкалары, спорт майҙансыҡтары ни тиклем күберәк булһа, беҙҙә шул тиклем һау, үҙ-үҙенә ышанған, талапсан, етди йәштәр үҫәсәк. Ә ҙур ҡалала йәшәмәгәндәр иһә төрлө йылға-күлдәрҙә хоккей уйнай ала. Волейбол, футбол майҙансыҡтары төҙөү күп ваҡыт һәм сығымдар талап итмәй. Теләгән кеше һәр ваҡыт ауырлыҡтан сығыу юлын таба ул.

### "Салауат Юлаев" командаһы гимны

"Минең мәңгегә йәшел йөрәгем" йыры команданың икенсе гимны тип әйтһәк тә була. Беренсеһе "Мөмкин булмаған нәмә юҡ" ("Невозможного нет") тип атала ине. "Салауат Юлаев" Рәсәй чемпионы исемен яулаған йылда был йыр барыһының да тиерлек кеҫә телефонына яҙып алынһайны. Ләкин чемпион исеменә генә бәйле түгел, ә команданың, ысын мәғәнәһендә, үҙ гимны булырға тейешлеге хаҡында күп уйландым һәм Ҡаҙан ҡалаһында булғанда гимнға исем биргән беренсе юл тыуҙы. Ни өсөн нәҡ "Минең мәңгегә йәшел йөрәгем"ме? Сөнки, беренсенән, йәшел - команданың рәсми төҫө, икенсенән, беҙҙең фанаттар клубын башҡа командa фанаттары ла, беҙ үҙебеҙ ҙа үҙ-ара "йәшел кешеләр" тип йөрөтәбеҙ. Яңы йыр, ҡағиҙә булараҡ, ижади ғәзаптар аша тыуҙы. Йыр әҙер булғас, уға аранжировка эшләтеү, йырҙы яҙҙырыу кеүек проблемалар килеп сыҡты. Ләкин күҙ ҡурҡа - ҡул эшләй. Барыһын да йырып сығып, матур клип төшөрҙөк, хәҙер йыр үҙ тормошо менән йәшәй.

### Минең өсөн кем ул Салауат Юлаев?

Мин бит башҡорт. Һәр башҡорт өсөн Салауат Юлаев нисек ҡәҙерле һәм яҡын булһа, миңә лә шулай. Бала саҡта олатайым "Салауат Юлаев - беҙҙең герой", тигән һүҙҙәрҙе ғүмерлеккә аңыма һеңдерҙе. "Бына Салауат Юлаевҡа һәйкәл -халыҡ үҙ батырҙарын онотмаҫҡа тейеш; бына уның тураһында китаптар, фильмдар - һин уларҙы уҡырға һәм ҡарарға тейешһең!" Олатайымдың был һүҙҙәре мотлаҡ үтәлергә тейешле күрһәтмә итеп ҡабул ителде. Салауат Юлаев - ул беҙҙең өсөн өлгө. Ул халҡының ирке өсөн көрәшкән. Башҡаларҙың ерен баҫып алырға ынтылмаған, ә үҙ ерҙәрен һаҡлап яуға күтәрелгән. Ул бер ваҡытта ла һайлаған юлынан тайпылмаған. Уны ғүмерлеккә һөргөнгә ебәргәндәр, ҡот осҡос яҙаларға дусар иткәндәр, ләкин рухын һындыра алмағандар! Салауат һынмаған! Ул үҙен ошо тамуҡҡа ебәргән батшабикәнән дә оҙағыраҡ йәшәгән! Һине зинданға бикләгән кешенән оҙағыраҡ йәшәп, рухыңдың һине яҙалаусыларҙың, хөкөм итеүселәрҙең бөтәһенекенә ҡарағанда ла көслөрәк икәнлеген иҫбат итеү - бына бит ул ысын ҡаһарманлыҡ! Ҡалған барлыҡ нәмә ошондай рух көсө алдында тоноҡлана.



**_Мин бит башҡорт. Һәр башҡорт өсөн Салауат Юлаев нисек ҡәҙерле һәм яҡын булһа, миңә лә шулай. Бала саҡта олатайым "Салауат Юлаев - беҙҙең герой", тигән һүҙҙәрҙе ғүмерлеккә аңыма һеңдерҙе. "Бына Салауат Юлаевҡа һәйкәл - халыҡ үҙ батырҙарын онотмаҫҡа тейеш; бына уның тураһында китаптар, фильмдар - һин уларҙы уҡырға һәм ҡарарға тейешһең!" Олатайымдың был һүҙҙәрен мотлаҡ үтәлергә тейешле күрһәтмә итеп ҡабул ителде. Салауат Юлаев - ул беҙҙең өсөн өлгө. Ул халҡының ирке өсөн көрәшкән. Башҡаларҙың ерен баҫып алырға ынтылмаған, ә үҙ ерҙәрен һаҡлап яуға күтәрелгән. Ул бер ваҡытта ла һайлаған юлынан тайпылмаған. Уны ғүмерлеккә һөргөнгә ебәргәндәр, ҡот осҡос яҙаларға дусар иткәндәр, ләкин рухын һындыра алмағандар! Салауат һынмаған!_**

### Телепроекттар тураһында һүҙ

Эйе, ҡайһы саҡта төрлө тапшырыуҙар алып барам. Ләкин мин Башҡортостан юлдаш телевидениеһында ла, башҡа телеканалда ла эшләмәйем, йәғни штатта тормайым, һәм ошоға ярашлы, эш хаҡы ла алмайым. Ә "Үлсәү" реалити-шоуы - ул минең үҙ проектым. Эфирға сығарыу ауыр булды, сөнки проекттың тормошҡа ашасағына бер кем дә ышанманы. "Телевизор ҡараусыларҙа ҡыҙыҡһыныу тапмаясаҡ", тинеләр. Беҙҙә бит ниндәйҙер проект тәҡдим итһәң, беренсе реакция ниндәй? "Быңдай әйберҙең бер ҡасан да булғаны юҡ, тимәк, булмаясаҡ та, сөнки быны тормошҡа ашырыу мөмкин түгел", - тиҙәр. Ләкин мин үҙ фекеремдә ныҡ торҙом, бының ҡыҙыҡлы проект буласағына ышандырҙым. Проекттың мәғәнәһе шунда: мин тура эфирҙа ябығам һәм өс ай эсендә ташланған 18 килограмм ауырлыҡ өсөн "Өфө музыка донъяһы" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт менән төҙөлгән бәхәскә ярашлы, еңеү минең яҡта булғанда, 100 мең һум күләмендә аҡса отам. Ә еңәсәгемә һис шикләнмәйем. Проекттың төп маҡсаты - артыҡ ауырлыҡты ташлау. Ләкин уның төп асылы икенселә: кешенең үҙ ялҡаулығы һәм һүлпәнлеге менән көрәшеүен күрһәтеү. "Үлсәү" - кешенең үҙ йомшаҡлығын, насар һәм зарарлы ғәҙәттәрен еңеү проекты ул. Бөгөнгө көндә минең ярҙамсы төркөмдә 6 кеше, улар минең менән бергә тура эфирҙа ябыға. Беҙгә йөҙгә яҡын телевизор ҡараусы ла ҡушылды. Беренсе һөҙөмтәләргә килгәндә, 31 көн эсендә мин үҙем 8 килограмм ауырлығымды ташланым. Аҡыл менән ябыҡҡанда һаулыҡҡа зарар булмай ул. Ҡыҫҡаһы, мин ауырлығымды ташлаясаҡмын һәм бының өсөн миңә тағы аҡса ла түләйәсәктәр. Шәпме? Шәп! Минең менән бергә быға тиклем ябығыу хаҡында уйҙарында булып та, ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында быны тормошҡа ашыра алмаған дуҫтарым һәм телевизор ҡараусылар ябығасаҡ. Шәпме? Шәп! Канал үҙ рейтингын күтәрәсәк! Реклама биреүселәр ҙә ҡәнәғәт. Ғөмүмән, барыһы ла шат! Бөгөнгө көндә проект минһеҙ ҙә үҙ тормошо менән әүҙем "йәшәй".

### Башҡортмон, әммә туған телде белмәйем

Ата-әсәйем сығышы менән Белорет районынан, ә мин үҙем Өфөлә тыуҙым һәм үҫтем. Өйҙә атайым башҡортса һөйләшһә лә, мин, ҡыҙғаныска күрә, туған телемдә һөйләшә белмәйем һәм ныҡлап аңлап та етмәйем. Ләкин мин туған телемде белмәүҙән генә башҡорт булыуҙан туҡтамайым бит. Әгәр ҙә мин башҡортса аралашыусылар араһына барып инһәм, унда йә урыҫ теленә күсәләр, йә ни тураһында һөйләшкәндәрен миңә тәржемә итеп бирәләр. Туған телемдә һөйләшә белмәһәм дә, ҡурайҙа һыҙғырта алам. Был ҡала мөхитендә үҫкән башҡорт өсөн әҙ түгел, тип уйлайым.

Мин хоккей барышын яҡтыртҡан саҡта ла интернетта кешеләр үҙ-ара бәхәсләшә, тәҡдимдәр индерә, тимәк, мин был проектты башлап, дөрөҫ эшләгәнмен, тигән һүҙ.

### Музыка өлкәһендә лә уңыштар бар

Мин йырсы, актер Венер Каmaловтың продюсеры һәм күп йырҙарының авторы ла булдым. Беҙ башлаған йылдарҙа был өлкәлә конкуренция юҡ тиерлек ине, өс йыл рәхәтләнеп ижад иттек. Мин йырҙарҙың көйө, ә Венер һүҙе өсөн яуап бирәсәгебеҙ тураһында килештек. Әйтеп үткәнемсә, туған телемде белеп етмәйем, шуға күрә йырҙарҙың һүҙҙәре ниндәй дәрәжәлә һәйбәт булыуын билдәләй алмайым, ләкин Венерҙың йырҙары төрлө хит-парадтарҙың өҫкө баҫҡыстарында оҙаҡ һәм ышанысы урын алыуына ҡарағанда, барыһы ла бик шәп булғандыр тип уйлайым. Һәр бер йыр өҫтөндә ныҡлы эшләгәндән һуң ғына тамашасы хөкөмөнә сығара инек. Мәҫә-

***✓ Үҙеңә ысынлап та ҡыҙыҡлы булған шөғөл тап һәм шуны йәшәү рәүешенә әйләндер. Кеше бит ҡайҙа эшләүенә ҡарап баһаланмай, ә нисек эшләүенә ҡарап баһалана.***



ләң, "Бейеш" йырын туғыҙ ай эшләнек, сөнки ашыҡ-бошоҡ эшләнгән эштең һөҙөмтәһе лә шулай була. Был клиптың бөгөн дә телевизор экрандарынан төшмәүе эшебеҙҙе лайыҡлы башҡарғанбыҙҙыр тигән ышаныс тыуҙыра. Продюсерлыҡ эше минең өсөн тәжрибә булды. Бөгөн был эш менән шөғөлләнмәйем, ләкин ул өлкәгә ҡайтырға теләк бар. Шоу-бизнес үҙенә күп матди сығым һәм күп ваҡыт бүлеүҙе талап итә. Шуға күрә был өлкәлә йөҙөп йөрөп эшләр өсөн матди мохтажлыҡ кисермәҫкә һәм бер ҡайҙа ла эшләмәҫкә кәрәк. Ошоларҙың барыһын да тормошҡа ашырһам, был өлкәгә кире әйләнеп ҡайтырмын тип уйлайым. Ләкин мин хыялдар менән генә йәшәмәйем, йырҙар ижад итеүҙе дау-

блема бар, тип ҡайғырып ултырырға ярамай, бынан бит барыбер бер нәмә лә үҙгәрмәй. Бөтә нәмәнең дә күҙҙән йәшерелгәнен күреп өйрәнергә кәрәк. Килеп тыуған хәлгә икенсе яҡтан сығып ҡараһаң, быға тиклем хәл итмәҫлек булып күренгән проблема мөмкинлек булып күренәсәк.

"Эшләй алмайым", "белмәйем" кеүек һүҙҙәрҙе йыш ишетәм. Нисек инде ул "белмәйем"? Әгәр ҙә һин ни эшләргә кәрәклеген белмәйһең икән, "нисек" тип һора, "мин беләсәкмен" тип яуап бир. "Мин эшләй белмәйем" тигәнде "Мин уҡырға, өйрәнергә, белергә тырышам" һүҙе менән алыштыр. Әгәр ҙә кеше "мин белмәнем" тип аҡлана икән, тимәк, ул насар эшләгән, кәрәкле мәғлүмәтте белмәгән

шырыуҙар, продюсерлыҡ - барыһы ла проект. Шулай уҡ минең "Небеса.ТВ" тип аталған интернет проектым да бар. Был проектты ла үҫтерәм, киңәйтәм, камиллаштырам, кешеләрҙә ҡыҙыҡһындырыу тыуҙырасаҡ идеялар уйлайым. Тимәк, минең барлыҡ проекттарым - улар минең мауығыуҙарым. Мин иртәнге 9.00-ҙан киске 18.00 сәғәткә тиклем эшкә йөрөр өсөн тыумағанмын. Мауығыуҙарым - минең эшем, минең тормошом. Бөгөн балаларҙы нисек өйрәтәләр? Мәктәпте тамамла, институтҡа уҡырға ин, шунан һәйбәт эш тап, тиҙәр. Ә нисек өйрәтергә кәрәк һуң? Мәктәптә уҡығанда уҡ тормошта кем булғың, нимә менән шөғөлләнгең килгәнлеген ныҡлап уйлап, үҙең өсөн һығымта яһа

# БЕЛМӘҮ...

## тигәнде аңлатмай әле

ам итәм. Бөгөнгө көндә "Спутник-FM" радиоһында минең яңы йырым донъя күрҙе. 19 йыл элек ижад ителгән йырҙы яңыраҡ яҙҙырып, урын еренә еткереп, эфир киңлектәренә сығарҙым. Һәр нәмәнең үҙ ваҡыты, тимәк, был йырға 19 йылдан һуң ғына тыңлаусыға барып етергә яҙған. Радио тыңлаусыларҙың күпләп нәҡ ошо йырҙы ҡуйыуҙы һорауы миңә тағы ла дәртләнеп һәм илһамланып эшләргә көс-ҡеүәт бирә.

### Һәр ерҙә беренсе булырға тырышам

Миңә барыһы ла ҡыҙыҡ. Музыкала ла, спортта ла ниндәйҙер ҡабатланмаҫ үҙенсәлек бар. Заманында радиола ла эшләнем. Ғөмүмән, мин республикала радиошоу эшләгән беренсе кешемен. Бөгөн ваҡыт булмау сәбәпле генә радионан ситләшеп торҙом. Бына шулай, бар өлкәлә лә үҙ көсөңдө һынап ҡарау кәрәк.

Бөтәһе лә булған ерҙән үтеүе ҡыҙыҡ түгел. Барыһы ла эшләгәнде башҡарыуҙан ни фәтеүә? Мин бында бер мәғәнә лә күрмәйем. Иң мөһиме, мин үҙем тотонған эште һәр ваҡыт яҡшы башҡарып сығам. Кәйеф булмауы ла, хәл юҡлығы ла, күңел бушлығы ла һәм башҡа бер сәбәп тә үҙ эшеңде башҡарырға ҡамасауламаҫҡа тейеш. Әгәр ҙә насар эшләгәнмен икән, тимәк, миңә ниндәйҙер сәбәпкә ҡамасауларға юл ҡуйғанмын. Ә улай булырға тейеш түгел. Әлбиттә, мин эшемдә 200 процентҡа үтәйем, тип әйтмәйем, ләкин уңышһыҙлыҡтарым әҙ була.

### Ә нимә һуң ул уңыш?

Уңыш һәр ваҡыт була тип уйлайым. Һәйбәт, уңайлы шарттар булмаҫҡа мөмкин, ләкин һайлау мөмкинлеге һәр саҡ була. Барлыҡҡа килгән һәр проблема үҙ артында күп мөмкинлектәр йәшерә. Шуға күрә, про-

һәм хатта белергә лә тырышмаған, фекерләү ҡеүәһен эшкә екмәгән, тимәк, был эш уға бөтөнләй кәрәкмәгән тигән һүҙ. Эшләргә тырышырға кәрәк, ә беҙҙә шунда уҡ "мин булдыра алмайым" тиҙәр. Был дөрөҫ түгел. Бар, белгән кешенән һора, ташҡа бәрел, ләкин үҙ өҫтөңә алған бурысты атҡар. Үҙеңә кәрәкле мәғлүмәтте һәр саҡ белеп була. Бының өсөн мөмкинлектәр күп: китаптар, Интернет бар.

### Ниндәй китаптар уҡыйыммы?

Шәхесте үҫтереүсе, психология буйынса китаптар ҡыҙыҡһындыра мине. Был белемде тормошта ҡулланаммы-юҡмы - унығы икенсе һорау, ләкин был өлкәлә булған белемем ныҡ ярҙам итә. Шулай уҡ миңә уңышты нисек яуларға, нисек лидер булырға өйрәтеүсе китаптар уҡыу ҙа оҡшай. Һәр нәмәгә өлгәшеүсе, уңышлы кеше булыр өсөн айына кәмендә бер китап уҡырға, аҡыллы фекерҙәр менән бер диск тыңларға һәм ниндәй ҙә булһа бер семинарҙа ҡатнашырға тейешһең, тигән фекер уҡығайным. Бик дөрөҫ фекер тип уйлайым.

### Мауығыуҙарым

Киберхоккей уйнарға яратам һәм был уйын төрө буйынса Рәсәйҙең иң яҡшы 100 киберхоккейсылары исемлегенә инәм. Беҙ дуҫтар менән ике тапҡыр Өфөлә ошо уйын буйынса Рәсәй чемпионаты үткәрҙек, әлегә ваҡыт юҡлығынан был эште кисектереп торһаҡ та, киләсәктә тағы ла чемпионаттар үткәрербеҙ, тип ышанам. Мин проекттар менән йәшәйем. Киберхоккей буйынса чемпионат үткәреү - ул проект. Беҙ быны эшләнек. Һәйбәт, уңышлы спорт комментаторы булыу ҙа проект. Быны ла мин уңышлы үтеп сыҡтым тип уйлайым. Реалити-шоу - проект. Радиотап-

һәм шунан һуң ғына юғары уҡыу йортона барып, хыялдарыңды тормошҡа ашырырға, уйҙарыңды ысынбарлыҡ итергә бар көсөңдө һал. Үҙеңә ысынлап та ҡыҙыҡлы булған шөғөл тап һәм шуны йәшәү рәүешенә әйләндер. Кеше бит ҡайҙа эшләүенә ҡарап баһаланмай, ә нисек эшләүенә ҡарап баһалана.

### Хөрмәт ҡаҙаныу еңелме?

Нимәлер эшләргә тырышыу үҙе үк хөрмәткә лайыҡ. Әгәр ҙә кеше ниндәй өлкәлә булһа ла, бәләкәй уңышмы ул, ҙурмы, унығы мөһим түгел, нимәгәлер өлгәшә икән, тимәк, ул хөрмәткә лайыҡ. Сөнки ниндәйҙер уңышҡа өлгәшер өсөн күп көс түгергә кәрәклеген үҙемдән сығып беләм. Беҙ ҡайһы саҡта кешегә ҡулланыусы күҙлегенән сығып ҡарайбыҙ. Йәнәһе лә, шуны ла эшләй алманы. Бар, һин үҙең ул эшләй алмағанды эшләп ҡара. Башҡарған эшең һәйбәт килеп сыҡҡан саҡта ғына кемдеңдер эше тураһында фекер йөрөтөргә, уны шелтәләргә хоҡуҡлыһың. Ныҡыш хеҙмәт аша уңыш яулау хөрмәткә алып килә лә инде.

**Шулай итеп, "Салауат Юлаев" командаһы ҡатнашҡан һәр уйынды оҫта тәкрарлаусы, бар хоккей һөйөүселәр яратып өлгөргән "Салауат Юлаев" командаһы гимнын яҙыусы, төрлө телевизион проекттар авторы һәм алып барыусыһы, радиола яңғыраған популяр йырҙар авторы һәм башҡарыусыһы, ҡыҫҡаһы, бар яҡтан да килгән башҡорт егете менән таныштырыуҙы гәзит уҡыусыларыбыҙ күптән һорай ине. Сөнки уны барыһы ла белә, шул уҡ ваҡытта уның хаҡында бер ни ҙә белмәй. Бына, ҡыҙыҡ ҡына әңгәмә килеп сыҡты. Тимәк, Азамат менән ҡыҙыҡһыныу юҡҡа булмаған. Мәғлүмәтле, киң эрудициялы Азамат Моратовтың тағы ла бейегерәк үрҙәр яулауын теләйек.**

**Гөлназ САФУАНОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

### ТУҠТА, МӘЛ!

















***✓ Шулай ҙа алманканың Ҡоръятмаҫ халҡын иҫәңгерәтеп, телдән ҡалдыра яҙғаны - аяғы ергә тейер-теймәҫтән урам яңғыратып: - Һаумыһығыҙ! - тип саф башҡортса иҫәнләшеүе булды.***




**3**

Хаким килеп киткәндән һуң бығаса һәүетемсә йәшәп ятҡан ауыл күҙгә күренеп үҙгәрә башланы. Үҙенән-үҙе түгел инде - уны ғүмер буйы Ҡоръятмаҫта донъя көтөп, ҡайһы бер нәмәләргә ҡулдары етмәгән өй хужалары башҡарҙы. Ҡул етмәүҙән дә бигерәк, был теләк булмау, тормош көтөүгә дәрт һүрелеү ғәләмәтелер, моғайын. Бына, мәҫәлән, һәр өй алдындағы баҡсаны кәртәләп ҡуйған рәшәткәне алайыҡ. Уны буяп ҡуйыу өсөн әллә ни күп көс тә, сығым да кәрәкмәй, бары теләк кенә булһын. Шалһыҙ саҡта ҡояшта уңып, ямғыр тейеүҙән ашалып, билдәләүе ауыр булған төҫкә инеп бойоғоп торған рәшәткәләрҙе буяп ебәрһәң, өй алды тештәрен ыржайтып йылмайған кешенең ауыҙына оҡшап китә. Уның балҡыуынан үҙенден дә күңелең күтәрелә, булмышыңды ҡыуаныс тойғолары солғай. Ҡапҡа, тәҙрә ҡапҡастары, кәрниздәр менән дә шул уҡ хәл. Эйе, ағас күрке - япраҡ, әҙәм күрке - сепрәк булһа, өй күрке - тәрбиә шул.

Йәки үҙебеҙ ҡырылмаһа ҡырҡ тапҡыр үтеп йөрөгән урамды алайыҡ. Ул һепрелмәгән саҡта бер күҙ һалығыҙ әле. Әлбиттә, мин күңел күҙен әйтәм. Унда нимә генә юҡ: сыбыҡ-сабыҡ, мал тиҙәге, ҡош-ҡорт мамығы. Ҡыҫҡаһы, урам был ваҡытта кере ҡаҡашып ҡатҡан, өҫ-башы бысранған, тәрбиә күрмәгән сиған балаһын хәтерләтә. Ә һепереп, сүп-сарынан таҙартып ебәрһәң?. Был ваҡытта инде ул кейенеп-яһанып ҡунаҡ көтөп тороусы унған хужабикәгә оҡшай.

Йә булмаһа, үҙебеҙҙең өҫ кейемебеҙгә иғтибар итәйек. Унда ла кер күтәреүсе ҡара, һоро төҫтәр өҫтөнлөк итә. Зауыҡ тураһында әйтеү түгел, ауыҙ асаһы ла юҡ. Хужалыҡтағы ҡара эшкә ярамағанмы, тиерһегеҙ. Килешәм. Әммә өй араһындағы эштәр тәүлектең кескәй генә бер өлөшөн тәшкил итә. Хужалыҡ хәстәрҙәренән арынғас өҫтө алмаштырып, ҡәҙергә тип һаҡлап ҡуйылған затлыраҡ кейемдәребеҙҙе кейеп, көҙгөгә ҡарайыҡ әле. Кем тора унда? Бәй, кем булһын, үҙебеҙ бит! Беҙ ҙә шулай матур, һөйкөмлөмө ни? Ана, йәшәгән йортобоҙ ҙа, ауыл да, үҙебеҙҙе уратып алған яҡты донъя ла күркәмләнеп, сағыу төҫтәре менән балҡып китте. Бик йыш: "Был донъяла беҙ бары ҡунаҡ ҡына", - тигәнде ишетергә тура килә. Ә ҡунаҡта кем күрмәлекһеҙ, бысраҡ кейемдә йөрөй?..

Эй, шул башҡорттоң күндәмлеге! Уның тик яйын табып, күңелен кәрәкле ҡалыпҡа көйләй генә бел - намыҫ эше тигәндә тау аҡтарырға, күл уртларға әҙер. Ана бит, беҙ фәлсәфә һатҡан арала ауылдың йөҙөн танымаҫлыҡ итеп үҙгәртеп ташлағандар. Күрше ауылдан берәйһе Ҡоръятмаҫҡа килеп юлыҡһа: "Әллә аҙаштым инде, хәйерһеҙ", - тип торорлоҡ. Ни арала рәшәткәләрен, тәҙрә ҡапҡастарын, ҡапҡаларын буяп, электән буяулыларын яңыртып өлгөргәндәр! Ә урам һуң? Уны бысратмаҫ өсөн, аяҡ кейемдәрен сисеп, ойоҡсан ғына йөрөрлөк.

Шулай ҙа иң һоҡландырғаны ауыл халҡының өҫ кейемендәге үҙгәреш булғандыр, моғайын. Әбейҙәре һыйға ғына ҡәҙерләп һаҡлаған таҫмалы күлдәк, уның тышынан төрлө төҫтәге бәрхәттән уҡалы камзул кейгән. Бер нисәүһе хатта бала-сағаларына, ейәнсәрҙәренә тип ҡомартҡыға һаҡлаған тәңкәле камзул кейеп, боронғо яғаларын тағып ебәргән. Аяҡтарында ситек, уның тышынан ялтырап торған өр-яңы калуш. Баштарына ябынғандары үҙҙәре бер тамаша: төрлө биҙәкле кешимир яулыҡ, ҡушъяулыҡ. Береһе әлеге лә баяғы ейәнсәрҙәренә тип һандыҡ төбөнә һаҡларға һалған ерҙән алып, француз яулыҡ ябынып ебәргән. Затлы кейемдәренән күҙ ҡамашҡанғамы, ҡупшыланыу ҡыуанысы йөҙҙәренә нур булып яғылғанғамы, үҙҙәре кәм тигәндә бер тиҫтә йылға йәшәреп киткәндәй. Тфү, тфү, күҙ тейә күрмәһен, собханалла, машалла!

Бөтә ауылға өс-дүрт бөртөк ҡалған ҡарттарына килгәндә, улар боронғо уҡ булмаһа ла, элеккерәк кейем-һалым менән маҡтана алмай, әлбиттә. Тормош рәүеше башҡасараҡ булғанғамы, нишләптер уларҙың әүәлге кейемдәре һаҡланмаған тиерлек. Улар хан заманынан алып төрлө хәрби походтарҙа, сауҙа һәм хужалыҡ эштәрендә, яңы замандың ижтимағи тормошонда күберәк ҡатнашҡанға күрәлер инде, ир-аттың милли кейемен урыҫ дәүләте аша килгән көнбайыш сепрәк-сапрағы ҡыҫырыҡлап сығарған. Шулай ҙа улар "бары менән байрам" тип, әбейҙәре нимә һатып алған, шуны кейгән. Өҫтәрендә һыйға кейә торған костюм. Өр-яңы уҡ түгел, ләкин эш яңылыҡта түгел, ә таҙалыҡта. Эстән кейелгән арзанлы сатраш күлдәктәре уларға үҙенсәлекле йәм, байрам төҫө бирә. Ә баштарындағы түбәтәй иһә ҡарттарға нәғеҙ милли һыҙат өҫтәй. Быларға аяҡтарындағы ялтыр сөңкә калуштарҙы өҫтәһәң, ҡарттарҙың гардеробтарын тулы килеш күҙ алдына килтерергә була. Ни хәл итәһең, заман башҡа - заң башҡа. Европа менән Азия киҫешкән ерҙә йәшәгән кешеләргә шул да бара инде. Зарар юҡ, бер билдәле әйтемде үҙгәртеңкерәп ҡулланғанда "кейем ирҙе түгел, ә ир кеше кейемде биҙәй".

Был арала Мансур менән Заһитта ғына кейем ҡайғыһы түгел ине: улар ҡайҙандыр ҡыуып килтерелгән һарыҡ һәм йылҡыға ялан кәртә әтмәләү менән мәшғүл булды. Ҡайҙандыр тигәс тә, малдарҙың хужалары билдәле. Силсәүиттең әйтеүенсә, ике йөҙләгән ҡуй көтөүенең хужаһы - күрше ауыл фермеры Нәғимйән. Кешенең башы эшләһә, эшләй бит: ул, диндең йылдан-йыл көсәйә барыуынан файҙаланып, әлеге һарыҡтарҙы ҡорбанлыҡ өсөн махсус үрсетә. Һөйләүҙәренсә, фермерҙың был кәсебе бик уңышлы бара, уның күбеһе аҡ төҫтәге һарыҡтарын хатта ер аяғы, ер башы яҡтарҙан килеп алалар, имеш. Ҡайһы саҡта етмәй ҙә ҡала, ти.

Йылҡыға килгәндә, ул элекке колхоз рәйесе, хәҙер эре ер биләүсе Ғәлиулланың аттары. Ысын булһа, райондың был алпауыты приватизация тигән ғәләмәтте (яман телдәр уны "прихватизация" тип атаған була) уйлап сығарған Чубайс әфәндегә аяҡ баҫҡан һайын рәхмәттәр уҡый икән. Өйөнөң һәр бүлмәһенә шул ерән шайтандың һүрәтен элеп бөткән, тигән булалар. Тел һөйәкһеҙ бит ул, һөйләй инде. Бына, тағы бер кеше һүҙе: анау ваҡытта юлда китеп барған Чубайсҡа һөжүм ойошторолғас, Ғәлиулла ауырып аяҡтан йығылған, имеш. Үҙең күрмәгәс, быларҙы ысын тип тә, юҡ һүҙ тип тә әйтеп булмай. Ләкин шул уҡ халыҡ "утһыҙ төтөн сыҡмай" тигәнде лә йыш ҡабатлай. Әгәр был хәбәрҙәрҙе иҫбат итеп булмай торған имеш-мимешкә ҡалдырһаҡ, Ғәлиулланың торған ерендә ерҙе сапсып, ажғырып торған өйөр айғырының ҡушаматы "Чубайс" булыуын ҡайҙа итергә? Бынаһы төн артынан тыуған көн кеүек раҫ.

**4**

Ниместәр Ҡоръятмаҫта район хакимиәте башлығы килеп киткәндең дүртенсе көнөндә пәйҙә булды. Ваҡиға тураһында алдан хәбәр ителгәнгә күрә, Ҡаф тау аръяғынан килгән ҡунаҡтарҙы ҡаршыларға йыйылған ғауам эргәһенә өр-яңы автофургон килеп туҡтаны. Халыҡ телевизорҙа яҙа-йоҙа күҙгә эленеп ҡалған был мәҙәниәт мөғжизәһен үҙ урамдарында күреп, ғәжәпләнергә лә өлгөрмәне, баяғының шыуҙырмалы ишеге шым ғына асылып, унан етендәй һары сәстәре яурынына һибелеп торған ҡыҙ ырғып төштө. Ҡарамаҡҡа утыҙ йәштәр самаһы. Өҫтөнә кейгән килешле блузкаһы менән бриджи салбары уның уртасанан әҙ генә ҡалҡыу кәүҙәһен тағы ла һомғолораҡ итеп күрһәтә. Ә иң ғәжәбе - ҡыҙҙың иҫ киткес мөләйем йөҙөнән, ямғырҙан һуң таҙарған күк төҫөндәге күҙҙәренән эркелгән ихласлыҡ һәм ниндәйҙер эске ҡыуаныс нурҙары ине. Әйтерһең, ул күп замандар элек айырылышып, бер күрешергә хыялланып йөрөгән кешеләр менән осрашырға килгән.

Шулай ҙа алманканың Ҡоръятмаҫ халҡын иҫәңгерәтеп, телдән ҡалдыра яҙғаны - аяғы ергә тейер-теймәҫтән урам яңғыратып:

- Һаумыһығыҙ! - тип саф башҡортса иҫәнләшеүе булды. Ысынлап та шаңҡырлыҡ хәл шул: бында үҙ башҡортоң теленән, асылынан ваз кисеп барғанда, әллә ҡайҙан килгән берәү һинең телеңдә һүҙ ҡатһын әле! Әллә былар бөтөнләй икенсе кешеләр булып сыҡтымы?

Ул арала алманка ихлас йылмайып:

- Мин Эльза булам, - тип исемен әйтте лә, аптырауҙан асылған ауыҙҙарын һаман яба алмай торған кешеләр менән ҡуш ҡуллап күрешә башланы. Кинокамераһын тотоп уның артынса фургондан сыҡҡан оператор, уңға-һулға сығып, күрешеү тамашаһын төшөрөргә керешә. Үҙен ҡаршылаусылар менән күрешеп бөткән Эльза, киң йылмайып:

- Нисек йәшәп ятағыҙ? - тип һораны.

Инде тамам һушын йыйып, ваҡиғаның төш түгел, ә ысынбарлыҡ икәне аңдарына барып еткән халыҡ араһынан:

- Һәйбәт әле былай.

- Имен.

- Әлегә иҫән-һаубыҙ, Аллаға шөкөр, - тигәнерәк яуаптар ишетелде.

Ошо ерҙә бығаса һүҙҙе ауыҙынан арҡан менән дә тартып сығарып булмаған Мөҙәрис ҡарт телгә килмәк булды:

- Һөкөмәт пенсияны биреп тора-а. - Ул район хакимының "мах бирмәгеҙ" тигәнен үҙенсә аңлап әйттеме быны, әллә кино төшөрөүселәрҙең иғтибарын үҙенә йәлеп итергә теләнеме - билдәһеҙ. Торғас, тик кенә торһа ни була инде! Ана бит, Ҡоръятмаҫ халҡы был хаҡта нимә ти: "Һөйләй белмәгән ауыҙҙан эшен яҡшы белгән арт яҡшы". Уның был хәбәре оператор йыйылыусыларҙың нәҡ аяҡ кейемдәрен төшөрөп торған мәлдә әйтелде. Тап килһә килә бит, хәйерһеҙ. Объктив ыңғайына Эльза ла Мөҙәрис ҡарттың аяғындағы уңа төшкән калуштарға күҙ ташлап алды. Бабайҙың пенсия тураһындағы һүҙҙәре менән өс тинлек калушты йәнәш ҡуйыуҙанмы, әллә икенсе сәбәптәнме, ҡыҙҙың ирен ситтәренә еңелсә көлөмһөрәү ғәләмәте ҡағылып үтте. Әммә ул мыҫҡыл түгел, ә йәлләү ҡатыш ине. Анау хәтле ерҙән интернет аша Ҡоръятмаҫ ауылын эҙләп тапҡан, автонавигатор ярҙамында юл яҙлыҡтырмай килеп еткән кеше беҙҙең илдәге пенсия күләмен белмәй буламы һуң?

Уңайһыҙ тынлыҡты Эльзаның күкрәк төбөнәнерәк сыҡҡан тауышы боҙҙо:

- Ярар... Беҙ ҙә Германияла һәйбәт кенә йәшәп ятабыҙ. Мин өләсәйем тураһында кино төшөрөп йөрөйөм. Һуғыштан һуң ул ҡулға алынған, һуңғы көндәре Верхнеурал төрмәһендә үткән. Шуға күрә, өләсәйемдең эҙҙәре буйлап ошонда килеп сыҡтыҡ. Бында бер нисә көн йәшәп китергә уйлайбыҙ. Һеҙҙән артыҡ бер нәмә лә кәрәкмәй, беҙ бөтәһен үҙебеҙ менән алып йөрөйбөҙ: фургонда йоҡо бүлмәләре лә, кухня ла, холодильниктар туп-тулы ризыҡ та, ванна ла бар. Һыуыбыҙ ғына юҡ...

Шул саҡта бығаса тартыныңҡырап торған төркөм йәнләнә төштө. Быға ҡыҙҙың уларҙы үҙ итеп һөйләшеүе, ябайлығы менән ихласлығы сәбәпсе булды шикелле. Ә тасылдатып, нәғеҙ уларса башҡортса һөйләшеп тороуы һуң? Уға тик таш йөрәк кенә иремәҫ. Шуға ла, төркөмдәгеләр кемуҙарҙан телгә килде:

- Һыу ни, ана, беҙҙең шишмә башында инде!

- Унда бер нисә ҡоҙоҡ бар.

- Эйе, йәнең күпме теләй.

Был һүҙҙәрҙән Эльзаның йөҙө етдиләнә төштө:

- Рөхсәт итһәгеҙ, беҙ шунда туҡрар инек, - тине ул. - Һеҙ ҡурҡмағыҙ, хаҡын түләрбеҙ...

Алманканың был хәбәренән һуң бер аҙға сәйер тынлыҡ урынлашты. Сәйер, сөнки ул донъяға ҡапма-ҡаршы ике ҡараштың бәрелешеүенән тыуҙы. Гүйә, Ер шары күсәрен, ә асмандағы ҡояш үҙенең йүнәлешен үҙгәртергә самаланы. Йыйылыусыларҙың тынып ҡалыуы ошо мәңгелек ҡанундың үҙгәреү ихтималлығын баштарына һыйҙыра алмау ғәләмәте ине. Ә инде хатта был турала уйлау ҙа яҙыҡ икәнлеге зиһендәренә барып еткәс, Эльзаға төрлө яҡтан:

- Әстәғәфирулла!

- Ер ҙә, һыу менән һауа ла Хоҙайҙыҡы!

- Һыу һатып кем байыҡҡан?

- Улай юҡты һөйләмә, ҡыҙым, - тигәнерәк шелтәләү һүҙҙәре яуҙы.

Германияла тәбиғиҙең-тәбиғие булған тәкдим Ҡоръятмаҫ халҡына шулай тәьҫир итерен көтмәгән Эльза аҡланырға була:

- Мин һеҙҙе рәнйетергә уйламаным, - тиергә ашыҡты. - Беҙҙә шулай ҡабул ителгәнгә әйттем. Үпкәләмәгеҙ, зинһар. Ҙур рәхмәт. Осрашырбыҙ әле...

Шулай тине лә ҡыҙ, фургондың асыҡ ишегенән күренеп торған ҡупшы баҫҡыстар буйлап эскә инеп китте. Ишеге асылғандағы кеүек үк тауыш-тынһыҙ ябылған оло автофургон ауылдың көнбайышындағы ике тау араһындағы шишмә башына юл алды. Йыйылған халыҡ бөгөнгә ғәҙәти булмаған ваҡиға тураһындағы тәьҫораттары менән уртаҡлашып, төркөм-төркөм булып өйҙәренә таралышты.

**(Дауамы бар).**

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

**Баш ҡалабыҙ Өфөлә март айында уҙған был ике олуғ ваҡиғаны фәҡәт шулай "игеҙ шатлыҡ" тип кенә нарыҡлау кәрәктер. Милләтебеҙ тормошонда бер ай эсендә меңәрләгән кешеләрҙе шатлыҡ атына атландырған ошо оло игеҙәк ваҡиғаның йәнәш килеүе бик-бик һирәк күренештер ул. Һүҙ ҙә юҡ: милләтебеҙ һанын ишәйтеп, минут һайын, сәғәт һайын, көн һайын сабыйҙарҙың донъяға килеп тороуы ла шулай уҡ оло ҡыуаныс. Донъяның башҡа ҡыуаныстары ла етерлек. Әйтәйек, ике йәш йөрәктә һөйөү, мөхәббәт яралыуы. Был да бит милләт шатлығы булырлыҡ илаһи күренеш. Милләт шатлығы, сөнки оло саф һөйөүҙе Аллаһу Тәғәлә үҙенең бәндәләренә бүләк итеп, таҡтан йоп ҡылып, уларҙың ҡәүемен ишле һәм көслө итә.**
**Ә инде март айында баш ҡалабыҙҙа уҙған ваҡиғаларға килгәндә, уларҙың икеһе лә Нефтселәр мәҙәниәт һарайында үтте. Уларҙың тәүгеһе 24 мартта виртуоз ҡурайсы Роберт Юлдашев етәкләгән "Ҡурайсы" ижади союзының концерты һәм 30 мартта Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт драма театрының күренекле яҙыусы, педагог Мәрйәм Бураҡаеваның "Үҙем яҙған яҙмыш" романтик драмаһы. Әйҙәгеҙ, булмаһа, ошо ике ваҡиғаға айырым-айырым туҡталайыҡ.**

# МАРТТЫҢ ИГЕҘ ШАТЛЫҒЫ,

## йөрәк типте талпынып...

### "Байыҡ"ты "Әпипә"гә бейемәйҙәр...

Уның сығыштарын ҡарағанда йыш ҡына үҙемә шундай һорауҙар биргәнем бар: "Ҡурайсы Роберт Юлдашевтың күп милләтле Башҡортостан, Рәсәй халҡының диҡҡәтен бер юлы үҙенә йәлеп итерлек, ҡурайыбыҙға ҡарата һөйөү уятырлыҡ үҙенсәлеге нимәлә һуң? Нинә уның концерттары тулы аншлаг менән үтә һәм күпмегә һуҙылыуына ҡарамаҫтан, бер тынала тамаша ҡылына, тыңланыла? Был күренеш ҡурайҙың әле асылып бөтмәгән мөмкинлектәрен бойомға ашырыумы? Ҡурайҙы ошо рәүешле популярлаштырыу уның төп асылын онотоуға, юйыуға алып килмәҫме? Һ.б."

Дөрөҫөн әйткәндә, оҫталыҡта һәм виртуозлыҡта Роберттан һис тә ҡалышмаған, хатта унан да шәберәк уйнай алыусы ҡурайсылар ҙа үҫеп килә. Йыл һайын үтеп торған ҡурайсылар бәйгеләрендә беҙ әленән-әле ундай мөғжизәләргә осрап торабыҙ. Иншалла! Шулай ҙа нимәһе менән әһәмиәтле һәм ҡиммәтле беҙгә Роберт Юлдашев? Сәнғәтебеҙҙә Роберт Юлдашев феноменының асылы нимәлә?

Юғарыла ҡуйылған һорауҙарға ҡапылғарай яуап биреүемде һораһалар, түбәндәге, тел осонда ғына торған түбәндәге дәлилдәрҙе килтерергә мөмкин булыр ине:

-Роберт үҙ концертында яңғыҙы ғына уйнамай йәғни башҡа музыка ҡоралдарына ҡушылып, уларҙың көй сығарыу үҙенсәлеген ҡурайҙа ҡабатлай һәм ошо музыка ҡоралдары ансамблендә ҡурай тауышы үҙенсәлекле яңғыраш ала;

-Роберт ҡурайҙа традицион формала ғына уйнамай: ҡурайының теге яғынан да, был яғынан да өрөп, көтөлмәгән тауыштар, ауаздар сығарып, ҡурайға иғтибар иттерә;

-Роберт төрлө милләттәрҙең көйҙәрен башҡарғас, залда ултырыусы башҡорт милләтле булмаған тамашасылар уның сығышын йылы ҡабул итә...

Ҡыҫҡаһы, бында уның башҡарыу үҙенсәлеге хаҡында тағы ла бик күп һандағы, шул иҫәптән музыка фәне йәһәтенән профессиональ дәлилдәр килтерергә мөмкин булыр ине һәм улар барыбер ҙә был феномендың бер яғын ғына, айсбергтың тик йылға өҫтөнә ҡалҡып торған өлөшөн генә ҡылыҡһырлар ине. Роберт Юлдашевтың төрлө милләт вәкилдәренән торған тамаша залын арбауының серен аңларға тырышҡан саҡта башымда үҙенән-үҙе шундай һүҙбәйләнеш яралды: "Байыҡ"ты "Әпипә"гә бейемәйҙәр бит..."

Эйе, һәр бер бейеүҙең үҙ көйө була. Бейеү менән көй органик рәүештә бер үк мәлдә үк булмаһа ла, сама менән бер үк заманда ярала. Беҙ "Байыҡ" көйө ҡурайҙа яңғырай башлау менән бынабына сәхнәгә сығып һыңҡылдата баҫыр бейеүсене көтәбеҙ. Йәки булмаһа, тауышы ябылған көйө телевизор экранында "Байыҡ"ҡа баҫыусыны күргәстөк, ишетелмәгән көйөн дә ишетәбеҙ. Әгәр ҙә көй менән бейеү икеһе бер юлы яңғыраһа, ләззәтләнеүҙән



йөрәгебеҙ дөпөлдәп тибергә тотона. Сөнки йөрәгебеҙ бейеүгә һалынған ат тояғы тауышына көйләнгән. Был бейеү менән көйҙәң үҙенсәлекле "игеҙәклек" феномены.

Бәс! Ә бит Роберттың ҡурайы ла концертында кешелектең иң боронғо музыка ҡоралы дөңгөр-барабан менән бергә яңғырай. Яңғырап ҡына ҡалмай, ҡурай менән барабандың ҡушылыуы һәр әҙәм затының аҫҡы аңының иң төбөндә - ҡан хәтерендә ятҡан иң боронғо ауаздарын уята түгелме? Дөңгөрҙәң, барабандың иң боронғо музыка ҡоралы икәнен иҫбатлап тороу кәрәкмәй. Ҡурайыбыҙ ҙа шулай уҡ кешелектең иң тәүге музыка ҡоралы булараҡ, дөңгөр-барабан менән бергә яңғыраған саҡта икеһе бергә ҡушылып, һәр кешенең (милләтенә ҡарамай) ҡан хәтерен уята түгелме һуң? Әгәр ҙә шулай булмаһа, башҡа милләт вәкилдәренең ҡурайыбыҙға ҡарата тыуған шундай ҡыҙыҡһыныуын башҡаса нисек аңларға була һуң? Роберттың концерттарын ҡарағандан һуң бик күп һандағы башҡа милләт вәкилдәренең ҡурайҙа уйнарға теләге уяныуын белем. Хатта Мәскәүҙән ҡурайҙа уйнарға өйрәнеү өсөн махсус рәүештә Өфөгә килеүселәр ҙә бар.

"Байыҡ"ты "Әпипә"гә бейеп булмай шул. Ҡурайыбыҙҙың башҡа музыка ҡоралдары менән түгел (әйткәндәй, Роберт был юлы ҡурайҙың джаздағы үҙ яңғырашын да күрһәтте беҙгә) фәҡәт дөңгөр-барабан менән бергә яңғыраған саҡта ошолай, башҡа милләт вәкилдәрен дә әсир итер тылсымын башҡа төрлө аңлатып буламы икән? Юҡтыр, тием. Төрлө милләт вәкилдәре йыйылған, меңдән ашыу кеше һыйған залдың ҡурай менән дөңгөр-барабанды ҙур тулҡынланыу менән тын да алмай тыңлауын башҡаса нисек аңлатаһың инде? Бының менән Роберт донъяға ҡурайҙың дөңгөр-барабан кеүек үк кешелек яралғандағы иң боронғо музыка ҡоралы икәнлеген иҫбат итте. Халҡыбыҙ йәшенә лә ишара бар бында. Кешелектең ҡан хәтере яңылышмай.

### Милли спектакль

Мәрйәм Бураҡаеваның "Үҙем яҙған яҙмыш" романтик драмаһы буйынса ҡуйылған спектаклдә лә тамашасы бер тынала рәхәтләнеп, урыны менән йығылып ятып көлөп, урыны менән әҫәрҙә барған ваҡиғаларға бәйле борсоулы уйҙар кисереп, ҡараны. "Бәләкәй телгә саҡ булып ҡалды", тиҙәр бындай осраҡта. Шулай ҙа бер генә шаршаулыҡ сәхнә әҫәрендә барған ваҡиғала халҡыбыҙ тарихының сағыу бер мәлен уның барлыҡ биҙәктәрендә, ҡапма-ҡаршылыҡтарында һәм нескәлектәрендә балҡытыуға ирешкән автор. Дөрөҫөн әйткәндә, башҡорт театры донъяһында ысын мәғәнәһендәге милли әҫәр барлыҡҡа килде тип әйтергә булалыр. Мөхәмәтша Буранғоловтың "Башҡорт туйы", Дауыт Юлтыйҙың "Ҡарағол", Мостай Кәримдең "Ай тотолған төндә", Илшат Йомағоловтың "Нәркәс" кеүек сәхнә әҫәрҙәре янына ошо әҫәр ҙә өҫтәлде.

Спектаклдең ниндәй сифатына ҡарап, уны милли әҫәр тип атарға була һуң? Халҡыбыҙ тарихына, уның сәнғәтенә, мәҙәниәтенә, йола-традицияларына битараф булмаған, был хаҡта хәбәрҙар мәғлүмәтле тамашасы иң тәүҙә, әлбиттә, сәхнә әҫәрендәге йолалар төрлөлөгөнә, уларҙың күп башҡарылыуына, кейемдәрҙәге сағыу төҫтәргә, биҙәктәргә, нағыштарға ҡарап, романтик драманың миллилеген раҫларға ынтылыр һәм ул бер ни тиклем кимәлдә хаҡлы ла булыр.

Кейемдәр тигәндән, сәхнә әҫәрен ҡуйыусылар күптән инде беҙҙең сәнғәттә һәм сәхнәлә нығынған төлкө бүрекле, камзуллы-еләнле классик стиль ҡалыбынан ҡотола алған. Бер кемгә лә сер түгел: башҡорт милләте йөҙҙән ашыу ырыуҙан торған һәм һәр ырыуҙың үҙ кейеме булған һәм ҡайһы ырыуҙарҙың кейемдәренең ҡайһы бер элементтары беҙгә күршеләш йәшәгән халыҡтарҙыҡына оҡшап киткән. Был да тәбиғи хәл. Әйтергә кәрәк, был сәхнә әҫәрендә тәүге тапҡыр ошо бер төрлө кейем ҡалыбынан ҡотолорға тырышыу бар. Юғиһә, беҙ тик бер төрлө генә кейенгәнбеҙ, бер иш кенә бейегәнбеҙ, йырлағанбыҙ, бер диалектта ғына һөйләшкәнбеҙ, тигән ҡараш совет осоронда ниндәй юғалтыуҙарға алып килгәнен үҙебеҙ күрҙек. Тап шундай ҡараш йәшәгән өсөн республикабыҙҙың төньяҡ-көнбайышында милләтебеҙҙең ҙур өлөшөн юғалттыҡ. Беҙҙең милли кейем төлкө бүрек тә, камзул-елән тип йөрөһәк, артабан да был процесс дауам итмәҫ тип кем әйтмәҫ.

"Үҙем яҙған яҙмыш"та иһә, ялан һәм тау башҡорттарының кейемдәр айырымлығы бик ныҡ сағыла һәм был айырымлыҡ, ниндәйҙер кимәлдә, ошо ике ырыу башҡорттарының менталитетында ла һынланыш таба. Мәҫәлән, тау башҡорттарының баш кейемдәре мәртәбәле, бейек, үҙҙәре лә мөһабәт, олпат, ғорур. Ә ялан башҡорттарының алсаҡлығы, ябайлығы, киң күңеллелеге, ҡунаҡсыллығы кейемдәрендә лә ыҫпайлыҡ, етдилек булып аңлашыла. Бәҡтиһән, башҡорт театрында кейемдәрҙең төрлөлөгө менән генә лә характер тыуҙырыу мөмкин икән дә баһа. Һәр хәлдә, башҡорт милли кейеме башҡорт театрында сағылыш тапмаһа, сағылмаһа, музей кейеме генә булып ҡалмаҫ тип кем әйтер?

Үкенескә ҡаршымы, бәхеткә күрәме, беҙҙә һәр бер яңылыҡ халыҡ тарафынан бер төрлө һәм енел генә ҡабул ителмәй. Был сәхнә әҫәренең кейемдәренә ҡарата дәғүә белдереүселәр ҙә табылыр һәм мин быны тәбиғи итеп ҡабул итәм. Сөнки беҙ һаман да ҡалып менән фекерләйбеҙ шул, шундайын төрлө-төрлө биҙәкле, зауыҡлы, төҫлө байлыҡтарыбыҙ була тороп та, быҡың ҡәҙерен белеү генә түгел, аңлап та бөтөрмәйбеҙ.

Кейемдәр, уларҙағы биҙәктәр сәхнә әҫәренең миллилеген, шулай итеп, байыта, төрлө сифаттар менән ҡылыҡһырлай, характерҙарҙы асырға булышлыҡ итә. Әммә былар ғына уны башҡа сәхнә әҫәрҙәренән айырмалы рәүештә милли итмәй әле. Ысынлап та, ҡайһы яғы менән "Үҙем яҙған яҙмыш" романтик драмаһы милли әҫәр һуң? Башта уҡ әйткәнебеҙсә, ысынлап та, сәхнә әҫәре халҡыбыҙҙың милли йолалары һәм традициялары менән лыҡа тулы. Бер яҡтан ҡарағанда, әҫәрҙе йола-традицияларҙы теҙмәһенән торған спектакль-концерт тип атарға ла булыр ине. Уның сит илдәргә башҡорттоң сәнғәтен, мәҙәниәтен, йола-традицияларын күрһәтер өсөн махсус рәүештә заказ буйынса яҙылыуы ла ошоға ишара. Шулай ҙа меңдән ашыу тамашасы бер тынала кинәнеп ҡараған спектаклдең бындай типтағы театрлаштырылған тамашаларҙан айырылған төп идеяһы, беҙҙең ҡарамаҡҡа, милләтте милләт итеп меңәр йылдар һуҙымында һаҡлатып йәшәткән милли характерыбыҙға алып барып бәйләй ҙә инде.

Күп кенә сәхнә әҫәрҙәренә хас аҡырыш-баҡырыш, ҡыҙып китеп алъюҫыҡтан дошманына ғына түгел, хатта үҙ туғанына ҡаршы ҡуҫаҡ күтәреүгә, ҡылысты ҡындан һурыуға тиклем алып барып еткергән сетерекле ситуацияларҙан тулыһынса азат был спектакль. Уның барышында ҡапма-ҡаршылыҡ, көрәш бар, әммә улар бер ҡасан да агрессияға, үс алыуға, ҡон ҡайтарыуға тиклем алып барып еткерелмәй. Әҫәрҙең төп идеяһы ла ошо йүнәлештә асыла: ике ҡитға араһында һәр биш быуат һайын ҡалҡып сыҡҡан империялар һөжүмәүендә үҙен һаҡлап ҡала алған милләттең төп йәшәү көсө уның үҙ-үҙен аямайса яуға ташланыуында ғына түгел, бик һығылмалы сәйәсәт алып бара белеүендә, йола-традицияларын да ошо нигеҙҙә ҡороуында.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һис шикһеҙ милләт балҡышы булды быйылғы март айында баш ҡалабыҙҙың Нефтселәр мәҙәниәт һарайында үткән был ике сағыу байрам. Тамашасыларҙың күңел балҡыштары ла үҙ емештәрен бирмәй ҡалмаҫ. Милли рух булып...**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙОГА ЯРҘАМЫНДА...

## сәләмәт йәшәү рәүешенә

■ Йәшелсә-емеш яратыусылар араһында кишер һәм сливаға өҫтөнлөк биреүселәр башҡаларға ҡарағанда һөйкөмлөрәк була икән. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, тиреһенең төҫө алтынһыу булған ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар тирә-яҡтағы кешеләргә матурыраҡ һәм сәләмәтлеге яҡшыраҡ булып күренә. Һиндостандың Сент-Эндрюс һәм Бристоль университеттары үткәргән тикшеренеүҙәрҙән асыҡланыуынса, ҡайһы бер йәшелсә менән емеш-еләк тирегә матур төҫ бирә икән. Ғалимдар әйтеүенсә, составында каротиноидтарға бай йәшелсә һәм емеш-еләк ярҙамында тиренең торошон бер нисә ай эсендә яҡшыртырға мөмкин.

■ Чипсы, ҡыҙҙырылған картуф һәм башҡа тоҙло аҙыҡтар, мәҫәлән, тоҙло сәтләүектәр зарарлы булһа ла, организмда тоҙ күләменең артыуы стресс булдырыусы гормондарҙы кәметә һәм окситоцин күләмен күтәрә. Был гормон кеше ғашиҡ булған саҡта организмда әүҙем бүленә, ти табиптар. Шуға ла тоҙло аҙыҡтар ашау кәйефте күтәрергә ярҙам итеүе лә ихтимал.

■ Бөтөн донъя сәләмәт йәшәү рәүеше алып барырға ынтыла. Англияла быға балаларҙы бәләкәйҙән күндерергә кәрәклеген аңлап, балалар баҡсаларында йога дәрестәре асҡандар. Эксперттар әйтеүенсә, был дәрестәр артабан балаларға мәктәптә яҡшыраҡ өлгәшергә, тормошта үҙенең урынын тиҙерәк табырға мөмкинлек бирәсәк. Етмәһә, бәләкәстәрҙе медитацияға, дөрөҫ тын алырға ла өйрәтәсәктәр.

■ Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы һәм Еврокомиссия белгестәре белдереүенсә, экологик үлем һәм ауырыуҙарҙы булдырыусылар исемлегендә беренсе урында бысранған һауа, икенсеһе урында тауыш тора. Баҡтиһәң, тауыш хатта йоҡлаған саҡта ла ҡан баҫымын, стресс гормондары күләмен күтәрә икән. Йәйләп был ауырыуҙар ҡан тамырҙарының тарайыуына һәм йөрәк ауырыуҙарына килтереүе ихтимал.

■ Йәшел сәйҙәге катехин - бик ҡеүәтле антиоксидант организмды иртә ҡартайыуҙан һаҡлап ҡына ҡалмай. Белгестәр әйтеүенсә, көнөнә ике сынаяҡ йәшел сәй эсеү компьютер экранынан бүленгән радиациянан да ҡотҡарасаҡ. Асыҡланыуынса, йәшел сәйҙең япраҡтарында радиация тәьсиренә ҡаршы тороусы файҙалы элементтар күп. Бынан тыш, катехиндар С һәм Е витаминдарына ҡарағанда ДНК-ны зарарланыуҙан яҡшыраҡ һаҡлай.

■ Грек сәтләүеге - планеталағы иң файҙалы ризыҡ, тип белдерә АҠШ-тың Скрэнтона университеты докторы Джо Винсон. Уның етәкселегендәге тикшеренеүселәр төркөмө миндаль, арахис, бразиль сәтләүеге, кешью, макадамия, фундук, пекан һәм Грек сәтләүеген тикшереп, уларҙың һуңғыһында антиоксиданттарҙың ике тапҡыр күберәк булыуын асыҡлаған. Е витамины был сәтләүектә гамма-токоферол формаһында осрай. Витаминдың был төрө бигерәк тә йөрәк-ҡан тамырҙары сәләмәтлеге өсөн мөһим. Был сәтләүекте ҡыҙҙырырға кәрәкмәй, шуға ла унда бөтә файҙалы матдәләр яҡшы һаҡлана, ти белгестәр.

МАҠСАТҺЫҘ ДОНЪЯ - ҺАНҺЫҘ

**Ауылда эш юҡ тип бары тик эшләргә ялҡауы килгән, арба ватылһа - утын, үгеҙ үлһә - ит, тип йәшәп өйрәнгән кеше генә әйтеүе мөмкин. Әлбиттә, етеш, матур йәшәр өсөн ҡара тирең сыҡҡансы, көндө төнгә ялғап, тир түгергә кәрәк. Әммә коллектив хужалыҡта эшләп, дәүләттән эш хаҡы алып өйрәнгән халыҡты нисек итеп яңыса фекерләргә, үҙ йүнендә үҙең күрмәһәң, берәү ҙә килтереп бирмәйәсәк икәнлеген аңларға өйрәтергә? Юҡһа, тиҙҙән республика ғына түгел, тотош ил эшһеҙлек буйынса биржаға әйләнәсәк. Был йәһәттән башҡа төбәктәрҙә эш нисек торалыр, әммә Башҡортостан һәр районды мәшғүллек буйынса биржаларында иҫәптә тороусыларға үҙ эшен асырға ярҙам итә. Тыуған ауылыма ҡайтҡанда эшҡыуарлыҡҡа тотоноусылар хаҡында ишетеп-ишетеп ҡалһам да, үҙҙәре менән осрашып, ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуап алғаным юҡ ине әле. Был юлы иһә эшҡыуарлыҡҡа тәүге аҙымдарын яңаусы Рәфҡәт Хәсәновтан ошо өлкә буйынса әлепте таяҡтан нисек айырырға беренсе һабаҡ алдым.**

# ҺАРЫҠ ТИРЕҺЕН ДӘ...

## алтынлата алыр тырыштар

- Үҙ эшенде асыр өсөн, тәү сиратта, эшһеҙлек буйынса биржаға иҫәпкә баҫырға кәрәк. Ә беҙ, ауыл халҡы, унда барып йөрөгәнсе, тибеҙ ҙә, үҙ ихатабыҙҙа мәж килеп тик йөрөйбөҙ бит инде. Шуға, крәстиән-фермер хужалығы асырға ниәтләп, биржаға торҙом да, унда төркөмдәр ойоштороп, 13-15 кеше тупланғас, беҙҙе Өфөнән килеп 15 көн уҡыттылар, нисек итеп бизнес-план төҙөргә, нисек эш башларға һәм башҡаларға өйрәттеләр. Былтыр яҙҙан башланғайны был эш, кем ҡаҙ алырға ниәтләй, уларға алдараҡ аҡса күсерҙеләр, сөнки ҡаҙҙарҙы йәй буйы үстереп, көҙөн һуйып һатырға кәрәк. Мин иң һуңғы булып "Алтын тире" КФХ-һын ойоштурҙом.

Документтарҙы әҙерләгәндә биржанан һәр саҡ ярҙам итеп, дәртләндереп торҙолар. Әлбиттә, һәр документ өсөн аҡса түләргә кәрәк, юлға ла сығымдар китә. Мал күп ине, шуға түләү ауырлыҡ тыуҙырманы. Ләкин документтар туплағанда һәр чекты, һәр квитанцияны йыйып барырға кәрәк. Һуңынан уларҙы тапшырып, үҙ эшенде асыу өсөн бушлай бирелгән аҡсаға ҡушып, ошо сығымдарҙы ла ҡаплайҙар. Яҡынса документтар өсөн 5-6 мең аҡса китә инде. Уҡыу ҙа бушлай, өҫтәүенә стипендия кеүек түләүҙәре бар. Бушлай булып күренә генә ул, Пенсия фондына, һалымға түләй башлаһаң, шул сумма сығып та китә. Быltыр Пенсия фондына түләүҙәр айына 1000 һум ине, быйылдан башлап - 1400 һум.

Иҫәбемә аҡса күсеү менән Лағырҙан, күрше ауылдарҙан әтәмбәй һарыҡтар (бәрәнләмәгән йәш һарыҡтар) һатып алдым. Һуйып баҙарға алып барып һатыр өсөн юлға сығымдар күп китә, ә былай тере ауырлыҡ менән миңә һатыу ауыл халҡына ла отошло булды. 21 баш һарыҡ алғайным, хәҙер бәрәнләшеп, 40 башҡа тулып киләләр. Әле ихатала тотам, көндәр йылытыу менән яланға сығарырға ине иҫәп. Пай ерҙәрен алып, көтөүлек итергә ине, тип тә уйлап ҡуям, хәҙер шул ер мәсьәләһен хәл итергә кәрәк.

Һарыҡтар йылына ике тапҡыр бәрәнләй, шуға бер ике-өс йылда уларҙы 200 башҡа еткерергә, үрсетергә ине иҫәп. Үрсетмәйенсә, файҙа юҡ. Йәйгеһен ҡышҡылыҡҡа күпләп бесән, япраҡ әҙерләргә ине. Күпме ер, көтөүлектәр, урман эсендәге яландар, күрше район менән сиктәш ерҙәр буш ята. Уларҙа күрше райондарҙың көтөүҙәре йөрөй. Шул ерҙәрҙе алырға иҫәп бар. Әлегә мал аҙығы әҙерләүҙе ат, ҡул көсө менән атҡарһаҡ, һуңынан техника алып ебәрергә лә булыр тием. Үрсеп китһәләр, аҙаҡ йәйләп тәкәләрен һата башларға ла була. Киләсәктә сауҙа нөктәләре менән килешеү төҙөп, улар аша һатырға хыялланам. Мәҫәлән, "Янгантау" шифаханаһына һәр саҡ яңы һуйылған ит кәрәк. Һарыҡтарҙың йөнөн ҡырҡып, кейеҙ баҫырға тигән ниәтем дә бар. Шуға телевизорҙан кейеҙ баҫыуға ҡағылышлы тапшырыуҙарҙы ҡарап, ҡайһы райондан икәндәрен яҙып барам. Бик булмаһа, оҫталарға барып, өйрәнеп ҡайтырға ла мөмкин. Йомшаҡ, еңел итеп баҫылған кейеҙгә һорау булыр тип уйлайым. Һабантуй ваҡыттарында ла, төрлө осрашыуҙар, ҡорбан байрамы мәлдәрендә һарыҡтар үтә ул. Тәҡдим итергә продукция булһа, алыусыһы табылыр, иң мөһиме - үҙ-үҙеңә ышанысты юғалтмаҫҡа.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Грек мифында аргонавтар алтын тире табып, кире хужаһына алып ҡайтыу өсөн юлға сыҡһа, ябай ауыл уҙаманы ябай һарыҡтарҙың тиреһен алтынлатырға ниәтләй. Аллалар көршәк яндырмай, тиҙәр бит. Теләк булғанда, алдыңда маҡсат торғанда уны үтәү өсөн Аллаһы Тәғәлә үҙенең ярҙамын бирер, иншаллаһ.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**
**Салауат районы Лағыр ауылы.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ФАТИХАЛЫ ҒАИЛӘ УСАҒЫ -



## Ерҙәге ожмах сағылышы ул

### Ҡатын-ҡыҙ бурысы

Иң тәүҙә ҡатын-ҡыҙға төп тәғәйенләнешен - Аллаһы Тәғәләгә хеҙмәте һәм диндарлығы тураһында ҡайғыртырға кәрәк. Бының өсөн ғибәҙәт ҡылырға, шулай уҡ хәләл менән харамды айыра белергә тейеш.

Усаҡ һаҡлаусы ҡатын-ҡыҙҙың Аллаһы Тәғәләгә тәҡүәлеге һәм хеҙмәте изге эштәр эшләүҙән һәм иренә, балаларына, туғандарына һәм хатта күршеләренә файҙа килтереүҙән тора. Диндар ҡатын бәхет өләшеүсе ожмах сәскәһе кеүек.

Әһәмиәте буйынса ҡатын-ҡыҙҙың икенсе төп бурысы - үҙенең ирен һәм башҡа ғаилә ағзаларын бәхетле итеү. Иренә яраған һәм ғаилә именлегенә күләгә төшөрмәгән ҡатын-ҡыҙҙар Аллаһы Тәғәләнең хуплауын ала. Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Яҡшы ҡатын ире үҙенә ҡараған саҡта уны ҡыуандыра; уның Шәриғәт буйынса рөхсәт ителгән теләктәрен үтәй һәм ул булмаған саҡта уның намыҫын һәм мөлкәтен һаҡлай", - ти.

Ҡатын-ҡыҙ үҙенең бөхтәлеге һәм йорттоң таҙалығы тураһында ҡайғыртa. Хатта иң ябай ир ҙә үҙен ҡарамаған, тәрбиәһеҙ ҡатындан һыуынасаҡ. Шуға күрә ҡатын-ҡыҙ үҙенең ире алдында һәр ваҡыт һөйкөмлө булып күренергә тейеш, юғиһә, ир кәрәкле иғтибарҙы башҡа ерҙә эҙләй башлаясаҡ, ә был үҙ сиратында ғаилә гармонияһы боҙолоуға алып килеүе мөмкин.

Тәҡүәле ҡатын-ҡыҙ эштән ҡайтҡан ирен йылмайып ҡаршы ала һәм өйҙән оҙатҡанда уның өсөн доға ҡыла, уңыштар теләй. Арығанын иренә һиҙҙермәй, ирен кәмһетмәй.

Ҡатын-ҡыҙ иренең холоҡ үҙенсәлектәрен, ғәҙәттәрен, нимәләргә өҫтөнлөк биреүен яҡшылап өйрәнә һәм төрлө хәлдәрҙә уларҙы күҙ уңында тота. Ир-егеткә лә шуны уҡ эшләргә кәрәк. Кирәһенсә булғанда, ир менән ҡатын араһындағы уртаҡ ҡыҙыҡһыныуҙар һәм үҙ-ара аңлашыуҙар йәйләп юғаласаҡ һәм был уларҙың араһы һыуыныуға алып киләсәк. Бының өсөн иң ауыр ваҡыт - ҡартлыҡ. Ир менән ҡатын бергә йәшәү ваҡытында бер-береһен аңларға тырышмаһа, ғүмер юлы аҙағында уларҙы ауыр яңғыҙлыҡ, һағыш һәм юғалтҡан ваҡыт өсөн үкенеүҙәр көтә.

Ҡатын иренең изге эштәренә терәк, шулай уҡ уның туғандарын хөрмәт итә. Был инде уларҙың ғаиләһен таҡы ла ныҡытасаҡ.

**Усман Нури ТОПБАШ.**
**(Дауамы бар).**

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

# МИЛЛИ БАЙЛЫҒЫБЫҘ –



## Бөрйән бал ҡорто һәм солоҡсолоҡ

### Солоҡсоноң эш ҡорамалдары

Урман ерлегендә бар ғүмерен үткәргәндәрҙең барыһы ла солоҡсолоҡ кәсебе менән шөғөлләнә алмай. Күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ әле: 10-15 метр бейеклектә, ә ҡайһы ваҡыт унан да бейегерәктә эшләргә кемебеҙ батырсылыҡ итер ине икән. Ситтән ҡарамаҡҡа ғына солоҡсо еп-еңел генә ағас олоно буйлап менеп барған һымаҡ. Үҙең менә башлаһаң, бер ҙә улай түгел. Ағас та бейек һымаҡ, ел дә көсәйгән төҫлө, балта ла йәпһеҙ тойола. Унан бигерәк, олон буйлап үрмәләп мендең дә төштөң, шуның менән эш тә бөттө түгел бит әле. Ағас ҡыуышлығында йәшәп ятҡан күс менән "уртаҡ тел" табыу мөһим. Шуға күрә мин, солоҡсолоҡ кәсебе менән ҡыйыу, һәләтле, етеҙ, ҡыҫҡаһы, үҙ эшенең оҫталары булғандар ғына шөғөлләнә ала, тип ышаныслы рәүештә әйтә алам.

Солоҡсолоҡ кәсебенең нескәлектәрен ҡыҫҡаса ғына барлап китәйек әле. Әлбиттә, был эш иң мөһим мәлдән, солоҡ юнырлыҡ ҡарағай табыуҙан, башланып китә. Әлбиттә, урман кин, ағастар күп, ә шулай ҙа үс үҙ итерлек ҡарағай табыуы еңелдән түгел. Был эштең үҙ нескәлектәре лә етерлек. Әйтәйек, берәү солоҡ юнырлыҡ бик матур ҡарағай табып алды, тей. Үҙе бейек, үҙе йыуан, үҙе таҙа. Солоҡ юнырлыҡ бынамын тигән ҡарағай. Нишләп элек был ҡарағайға берәү ҙә һуғылманы икән, тип аптырап ҡалырға ла була. Әммә аптырарлыҡ урын юҡ, бары ҡарағайҙың үсеп ултырған урыны күс йәшәү өсөн тура килмәй. Иң яҡындағы шишмә лә килеп тороп алыҫ, ҡарағай үҙе лә ҡырын биттә үсеп ултыра. Етмәһә, төньяҡ битләүҙә булыуы ла уның файҙаһына түгел. Был мөһим эштә тәжрибәле солоҡсоноң фекере барыһын да хәл итә. Ҡарағайға күҙ һалыу менән уның йыл-майып ебәреүен күреп йәиһә көрһөнеп ҡуйыуын һиҙемләп, барыһын да аңлап була. Шулай ҙа урманда солоҡ юнырлыҡ ағастар етерлек. Эҙләгәндәр күңелгә ятышлы ҡарағайҙы барыбер таба.

Бал ҡорттары йәшәрлек ҡарағайҙы табып алыу менән иртәгеһенә үк солоҡ юна башламайҙар әле. Хатта был ҡарағай солоҡ юнылмайынса бик оҙаҡ йылдар ултырыуы бар. Ә шулай ҙа иң тәүге эш башҡарып ҡуйыла: ҡарағайҙың башы осорола. Йәғни, йығыла. Башы осоролған ҡарағай бейеклеккә түгел, ә йыуанлыҡҡа үҫә башлай. Был хәүефле эштең оҫталыҡ һәм таһыллыҡ талап иткәне көн кеүек асыҡ. Ағас башы менән үҙең дә осоп китеүең бик мөмкин. Шуға күрә был эште һәр солоҡсо башҡара алмай. Борон-борондан уның үҙ оҫталары булған. Бармаҡ менән генә һанарлыҡ ошондай оҫталар араһында үтә оҫталары ла булған. Ундайҙары, ҡарағайҙың башын осорғас, шул түбәлә бейеп тә төшкән. Ошондай башы осоролған ҡарағай үҙ эйәһен көтөп йылдар буйы ултырыуы мөмкин. Хатта бындай ҡарағайҙы олатаһы үҙененә яңы тыуған йә тыуасаҡ ейәненә алдан исемләп ҡуйыуы ла бик мөмкин. Ысынлап та, борон-борондан оло быуындың солоҡ юнырлыҡ ҡарағай ҡалдырыуы йәштәр өсөн оло бүләк булып иҫәпләнгән. Минең уйымса, ололарҙың ошондай ихтирамлы ҡарашы арҡаһында был боронғо кәсеп быуаттар төпкөлөндә юғалып ҡалмағандыр. Күреп тораһығыҙ, солоҡсолоҡ быуын-быуындан ғына түгел, хатта быуындар аша күсеп барған. Ысынлап та, олатайҙың мираҫ итеп ҡалдырған ҡарағайҙы нисек юнмайһың! Бөгөн дә ҡайһы ваҡыт 4-5 йәшлек малайҙың, бер ҡул менән ыштанын тарта-тарта, минең солоғом бар, тип әллә кем булып маһайып торғанын күрергә була.

Бына, ниһайәт, солоҡ юныр ҙа мәл етә. Бындай ҡатмарлы һәм яуаплы эш таһыллыҡ та, көс тә һәм сослоҡ та талап итә. Быны аңлау өсөн солоҡсоноң эшенә күҙ һалайыҡ. Солоҡ юнырға йыйыныусылар бар мөлкәтен эйәргә бәйләп ала. Әйтергә кәрәк, урман кәсебендә ат һаман кешенең төп таянысы булып ҡала килә. Шулай ҙа ат менән ҡарағай төбөнә тиклем барып етмәйҙәр, уны 40-50 метр самаһы ситтә бәйләп ҡалдыралар. Эш шунда: ат-тир еҫен бал ҡорттары үҙһенмәй. Бына кәрәк-яраҡтарын, эш ҡорамалдарын йөкмәгән солоҡсо, ҡарағай төбөнә баҫып, ҡараштарын өҫкә йүнәлтә. Күңеле менән генә бар эшен барлап сыға. Иң тәүҙә ул ҡулына балтаһын ала. Солоҡсо балтаһы ябай балтанан бер аҙ айырыла. Ул күпкә бәләкәйерәк, ә һабы бер аҙ оҙонораҡ. Ә шулай ҙа был төп эш ҡорамалын һәр солоҡсо үҙ самаһына ҡарап һаплап ала.

Аңлашылып тора: иң тәүҙә олон буйлап солоҡ урынына менеп етергә кәрәк. Был эш аяҡ осо менән генә баҫып торорлоҡ урын соҡоуҙан (уйыуҙан) башланып китә. Сама менән кендек тапҡырынан башланып киткән был уйымдар киртләс тип атала. Ҡайһы берәүҙәр баҫҡыс тип тә атай. Тәүге баҫҡыс уйылғас, ағас олонон уратып кирәм тип аталған ҡулайлама бәйләп ҡуйыла. Борон уны йүкәнән ишкәндәр. Хәҙер ҡайыштан ишелә. Солоҡсо кирәмде ике ҡуллап тота һәм бер аҙ өҫкә ташлай (һирпә) һәм тәүге баҫҡысҡа уң аяғы менән баҫа. Шунан кирәмде баш аша алып билгә төшөрә. Ошондай ысул менән солоҡсо кәүҙәһе менән ағасҡа этелеп-әләгеп тора. Кирәмде билгә төшөргәс, эште дауам итер өсөн ҡулдар бушай. Моғайын, күҙ алдына килтерәһегеҙҙер. Кирәм олон һәм бил аша үтеп киткән, солоҡсо бер аяғында баҫҡысҡа баҫып этелеп тора. Бына хәҙер икенсе баҫҡыс уйыла. Уны эшләп бөткәс, кирәм, билдән баш аша кире үткәрелеп, тағы ҡулға алына һәм тағы өҫкә һирпелә. Оҫта яңы уйылған баҫҡысҡа һул аяғы менән баҫа. Дөрөҫөрәге, бармаҡ остары менән әләгеп тора. Кирәм тағы билгә төшөрөлә. Хәҙер өсөнсө баҫҡыс эшләнә. Тағы кирәм өҫкә һирпелә. Тағы бер аҙ өҫкә үрмәләй солоҡсо. Бына шулайтып кәрәкле бейеклеккә менеп еткәнсе бара инде ул. Ағас ботаҡһыҙ булмай, тигәндәй, ынғайына шул ботаҡтарҙы төбөнән сабып бара әле ул. Шуға күрә солоҡҡа хәтлем олонда ботаҡтар булмай. Ошо хәлдә күптәр яңылыш аңлап ҡуя. Йәнәһе лә, ботағы булмағас, айыу менә алмай була инде. Юҡ шул, айыу бындай шыма олонға күпкә етеҙерәк менә. Ә бына ботаҡлы ағасҡа солоҡсо үҙе менә алмай: кирәмде өҫкә ҡарай һирпеп булмай бит.

Кәрәкле бейеклеккә менеп еткәс, солоҡсо ағас олонона ләнге тип аталған ҡулайлама бәйләп ҡуя. Ҡайһы берәүҙәр уны эләнге тип тә атай. Ә ҡулайлама ысынлап та бик уңайлы. Бына хәҙер ләнгегә ике аяҡ менән рәхәтләнеп баҫып иркенләп эшләргә була. Был ҡулайманы һәр кем үҙенең ауырлығына һәм ағас олонона самалап үҙенә генә уңайлы итеп эшләп ала.

Солоҡ юныуҙы бер-ике һөйләм менән генә яҙып китәйем әле. Был эштең нескәлектәре үтә күп, барыһын да яҙып-аңлатып булмаҫ төҫлө. Солоҡ бағау тип аталған ҡорамал ярҙамында юныла. Йоморо йышҡы менән ояның эсе йышыла. Үргә күк һөм аҫҡы иҙән төрпе (төрпө тип тә атайҙар) менән ҡырыла. Бөрөз исемле ҡорамал менән солоҡтоң буйы таҙартыла. Солоҡ ауыҙы (кеше эшләгән яҡ) - ҡапҡаҡ, бал ҡорттары осҡан тишек кейә тип атала. Нескәлектәре күп, тигәндәй, баяғы баҫҡыстар миҫалында быны ҡарап китергә була. Ҡайһы берәүҙәр солоҡто башҡаларҙан һаҡлау маҡсатында ошо баҫҡыстарҙы ла төрлөсә эшләй. Әйтәйек, сираттағы баҫҡыс шул уҡ аяҡҡа эшләнеүе бик мөмкин. Уң аяҡ менән әләгеп торһаң, һул аяҡҡа баҫҡыс табып булмаясаҡ. Хәҙер аяҡтарҙы алыштырып баҫыр кәрәк. Уның өсөн ҡапыл ғына этелеп, шул арала уң аяҡты алып өлгөрөп, шул уҡ баҫҡысҡа һул аяҡ менән кире баҫып өлгөрөргә кәрәк. Өлгөрмәһәң, эш харап.

Белеүебеҙсә, заманында Рәсәйҙә генә түгел, Европа илдәрендә лә солоҡсолоҡ шөғөлө менән күптәр шөғөлләнгән. Шуға күрә үҙенән-үҙе һорау тыуа: ул илдәрҙә был кәсеп менән нисегерәк шөғөлләнделәр икән, башҡорт солоҡсолоғо уларҙан айырыла микән, улар нindәй ҡорамалдар ҡулланды икән һ.б. Өйрәнеүҙәр бик ҡыҙыҡ мәғлүмәт асыҡлай. Бактиһән, башҡорт солоҡсолоғо башҡаларҙан бик ныҡ айырыла икән. Тарих шуны күрһәтә: Европа өлөшөндә йәшәгән һәм эшләгән солоҡсолар күпкә ҡатмарлы эш ҡорамалдары ҡулланған. Әйтәйек, башҡорт солоҡсолары баҫып эшләһә, улар ултырып эшләгән. Ултырып эшләү өсөн күпме өҫтәмә ҡулайламалар кәрәк булған. Ә беҙҙең ата-бабалар бик әҙ, әммә күпкә уңайлы һәм камил эш ҡорамалдары ҡулланған. Шуға күрә, дөйөм алғанда, солоҡсолоҡ кәсебе башҡорт ерлегендә айырым үҫешкән, тип иҫбатларға була.

**Әғләм ШӘРИПОВ,**
**биология фәндәре кандидаты.**
**(Дауамы. Башы алдағы һандарҙа).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Ҡаршылыҡты алып ташла

Ғайса бәйғәмбәр: "Ғибәҙәт ҡылғанда, мәсеттәрҙә һәм урам буйында туктап доға уҡып, кеше алдында үҙен күрһәтеүсе икейөҙләләр кеүек булма. Улар быны өсөн үҙ язаһын ала. Доға уҡыйһың икән, үҙеңдең бүлмәңә ин, ишегеңде яп һәм йәшеренеп кенә ғибәҙәт ҡыл. Илаһ һинең сит күҙҙәрҙән йәшенеп ҡылған доғаң өсөн ризалығын күрһәтер", - ти.

Хәҙер һеҙ башҡарасаҡ ғәмәл үҙенә күрә доға, шуға күрә йәшертен генә эшләнергә тейеш. Йәғни һеҙ эшләргә тейешле нәмә - үҙенә күрә алхимия. Һеҙ үҙегеҙҙең кемдәргәлер булған нәфрәтегеҙҙе мөхәббәткә әйләндерәсәкһегеҙ.

Нәфрәт, ышанмаусылыҡ, көнләшеү, дошманлыҡ һәм шундай башҡа кире тойғолар, стресс кеүек үк, һеҙгә юғарыраҡ, үҙегеҙ лайыҡ булған бейеклеккә, муллыҡҡа, энергияға, ҡыуанысҡа күтәрелергә ҡамасаулыҡ итеүсе балласт ул. Үткәндәрҙә йәки хәҙер һеҙгә этлек эшләгән, исемдәрен атау менән ҡаныгыҙ өшөй башлаған өс кешенең исемен иҫләгеҙ. Уның ярatҡан кешегеҙ менән айырыусы ла, тиҙлекте арттырған өсөн штраф һалған полицейский ҙа, рәнйеткән ғаилә ағзаһы ҙа булыуы мөмкин.

Бетсиҙы колледждағы бер уҡытыусы насар уҡығаны өсөн гел үҙенә саҡыра торған була. Һуңынан уның яҡшы баһа өсөн енси мөнәсәбәткә инергә теләүе асыҡлана. Ҡыҙ баш тарта, әммә уҡытыусы һаман үҙ юлын ҡуймай. Ир ныҡышмалыраҡ була башлағас, ҡыҙ департамент башлығына ялыу менән инә. Ләкин һөҙөмтә булмай. Ҡыҙ йәйләп дәрестәрен ҡалдыра башлай һәм диплом алыу өсөн балдары етмәй ҡала. Бары тик өс йыл үткәс кенә колледж етәкселеге уҡытыусының ҡылығын танып, тейешле саралар күрә. Бетси уның үҙ язаһын алыуына инана, тик ҡатынын, балаларын уйлаһа, йәлләү тойғоһо уяна. Шунан ҡыҙ уҡытыусыһын күҙ алдына баҫтыра һәм уны ғәфү итә. Бер ай үткәс, ул барыһы тураһында ла онотҡас, ҡапыл уға колледждан ҡалын конверт килеп төшә. Эсендә диплом һәм деканлыҡ ҡотлау хаты ята. Уҡытыусыға нәфрәтен һөйөүгә алмаштырып, Бетси уңыш ҡаҙана һәм уның ҡыуанысының сиге булмай. Нәфрәт үҙенән-үҙе һөйөүгә әйләнә алмай, тәү сиратта ғәфү итә белеү мөһим.

Шулай итеп, һеҙ өсөүҙе һайлап алдығыҙ. Уларҙы А, В, С тип алайыҡ. Түбәндәге инструкцияны бер нисә тапҡыр уҡығыҙ һәм хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ. **Кешеләрҙе нисек ғәфү итергә?**

- Яҡшылап ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм тыныс картинаны күҙ алдығыҙға килтерегеҙ.
- Күҙаллаған урыныгыҙҙан кире ҡайтҡанда А-ны бүлмәгеҙгә саҡырығыҙ.
- Уйығыҙҙа ғына А алдында тороп, уны ғәфү итегеҙ һәм ғәфү итеүен һорағыҙ. Ҡосаҡлашҡаныгыҙҙы һәм ҡул ҡыҫышҡаныгыҙҙы "күрегеҙ".
- А киткәс, В-ны саҡырығыҙ. А менән эшләгән ғәмәлде ҡабатлағыҙ.
- В киткәс, С-ны саҡырығыҙ һәм күнекмәне тағы бер тапҡыр ҡабатлағыҙ. С китә.
- Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм ошо өсәүгә һөйөүегеҙҙе тойоғоҙ.

Яҙыуҙы ситкә алып ҡуйып, күнекмәне ҡабатлағыҙ. Был бер нindәй ҙә фокус түгел, ә матди булмаған донъяның үҙенсәлеге. Ғәфү итеү тәүҙә һеҙҙең Юғары аңығыҙға тапшырыла, һуңынан икенсе кешенең Юғары аңына бара. Сөнки был ике Юғары аң да Ижадсының, Булдырыусының бер өлөшө булып тора. Беҙ барыбыҙ ҙа үҙебеҙ барлыҡҡа килгән киңлектән тыш, ваҡыттан тыш өлкә менән бер бөтөнбеҙ. Быны аңлау - тимәк, үҙ аңыңды яңы кимәлгә күтәреү ул. Ә быны эшләү - ҡыуанысҡа ҙур аҙым.

**Роберт СТОУН.**



## 25 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Баллада о Бомбере", 1-я серия. Военная драма
22.30 "Ядерное цунами". Док. фильм
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Следствие по телу", 9-я серия
00.45 "Джильи"
02.35, 03.05 "Грязное дело"
03.00 Новости
03.05 "Что, если бы бог был солнцем?"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Казачки не плачут. Людмила Хитяева"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 41-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 68-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 142-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Дом у большой реки", 1-я, 2-я и 3-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Свидетели". Фильм 1-й
01.00 "Профилактика"
02.15 "Мех: воображаемый портрет Дианы Арбус". Драма
04.20 "Городок"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Демоны", 1-4-я серии. Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Футбольная ночь"
01.45 "Детектив Раш"
02.40 "Суд присяжных"
04.05 "Ты не поверишь!"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Забытые войны"**
**10.30 "Специальный репортаж"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Городок АЮЯ"**
**11.30 "Приключения мастера кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30, 23.15 "Орнамент"**
**12.45, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Петербургские тайны**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Млечный путь"**
**17.15 "Тэмле"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Замандаштар"**
**19.15 "Пора разобраться"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Специальный репортаж"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.30 "Петербургские тайны"**
**00.45 Новости (на башк. яз.)**

## 26 АПРЕЛЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Баллада о Бомбере", 2-я серия
22.30 "Закрытый показ". "В субботу". Драма
01.25 "Скамейка запасных"
03.00 Новости
03.05 "Обвинение дочери"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Самоубийство после Чернобыля. Академик Легасов". Док. фильм
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50, 04.45 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 42-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 69-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 143-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Дом у большой реки", 4-я и 5-я и 6-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Свидетели"
01.00 "Профилактика"
02.10 "Горячая десятка"
03.20 "Честный детектив"
03.50 "Закон и порядок"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Очная ставка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Демоны", 5-8-я серии
23.15 "Сегодня"
23.35 "Настоящий итальянец"
00.25 "Главная дорога"
01.00 "Кулинарный поединок"
02.00 "Детектив Раш"
02.55 "Суд присяжных"
03.55 "До суда"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Пора разобраться"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Царь горы"**
**11.30 "Приключения мастера кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30, 23.15 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Искусство варган-кубыза"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Криминальный спектр"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.15 "Янсык"**
**19.45 "Полезные новости"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Криминальный спектр"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.30 "Петербургские тайны"**
**01.00 Новости (на башк. яз.)**

## 27 АПРЕЛЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Баллада о Бомбере", 3-я серия. Военная драма
22.30 "Среда обитания"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Белый воротничок", 4-я серия. Сериал
00.40 "Девушка моих кошмаров". Комедия
02.50, 03.05 "Взломщики"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Украинский самурай. Принцип Ступки"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 43-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 70-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 144-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Дом у большой реки", 7-я, 8-я и 9-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Кузькина мать". "Царь-Бомба. Апокалипсис по-светски". Док. фильм
01.00 "Профилактика"
02.15 "Тот самый Мюнхаузен", 1-я серия
03.40 "Закон и порядок"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "И снова здравствуйте!"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Внимание: розыск! с Ириной Волк"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Демоны", 9-11-я серии
22.35 "Время грехов". Детектив
00.30 Футбол. Лига чемпионов УЕФА. "Реал" (Испания) - "Барселона" (Испания). Полуфинал
02.45 "Квартирный вопрос"
01.30 "Детектив Раш"
03.50 "Суд присяжных"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Янсык"**
**10.30 "Специальный корреспондент"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Мастерская на колесах"**
**11.30 "Приключения мастера кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30 "Орнамент"**
**12.45, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Петербугские тайны"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Жду тебя". Концерт**
**17.45 "Противостояние"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Специальный корреспондент"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.15 "Историческая среда"**
**19.45 "Полезные новости"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Специальный репортаж"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Замандаштар"**
**23.15 "Орнамент"**
**23.30 "Петербургские тайны"**
**00.45 Новости (на башк. яз.)**

## 28 АПРЕЛЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Баллада о Бомбере", 4-я серия
22.30 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Судите сами" с Максимом Шевченко"
00.45 "Пик Данте"
02.45, 03.05 "Преступные мысли"
03.00 Новости
04.30 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Охота на "Осу"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 44-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 71-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 145-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Дом у большой реки", 10-я и 11-я серии
22.50 "Поединок"
23.50 "Вести+"
00.10 "Виктор Некрасов. Вся жизнь в окопах"
01.10 "Профилактика"
02.15 "Тот самый Мюнхгаузен"
03.40 "Закон и порядок"
04.30 "Городок"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Развод по-русски"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Демоны",12-14-я серии
22.40 "Тот, кто гасит свет". Триллер
00.20 "Лига Европы УЕФА. Обзор"
00.50 Футбол. Лига чемпионов УЕФА. Полуфинал. "Порту" (Португалия) - "Вильяреал" (Испания). Прямая трансляция
03.30 "Дачный ответ"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Башкорттар"**
**10.30, 20.45 "Специальный корреспондент"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Цирк в 13 метров"**
**11.30 "Приключения мастера кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30, 23.15 "Орнамент"**
**12.45, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Любовь моя - мелодия души". А. Игебаев**
**16.45 "Песни Зухры Алтынбаевой"**
**17.15 "Тэмле"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Замандаштар"**
**19.15 "Тюрки России. Республика Хакасия"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.30 "Петербургские тайны"**
**01.00 Новости (на башк. яз.)**

## 29 АПРЕЛЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.30 "Хочу знать"
16.00 "Федеральный судья"
17.00 "Принц и Золушка. Уильям и Кейт". Док. фильм
18.00 Вечерние новости
18.15 Свадебная церемония принца Уильяма и Кейт Миддлтон. Прямая трансляция
20.00 "Время"
20.15 Хоккей. Чемпионат мира. Сборная Россия - сборная Германии
23.30 "ДОстояние РЕспублики"
01.00 Свадебная церемония принца Уильяма и Кейт Миддлтон
02.00 "Молодая Виктория"
04.00 Док. фильм
04.50 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "С новым домом!"
10.10 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Мой серебряный шар"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 45-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 72-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 146-я и 147-я серии
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Фактор А". Музыкальный конкурс
22.30 "Юрмала"
00.20 "Огонь из преисподней". Боевик
02.30 "Сидячая цель". Боевик
04.25 "Городок"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Давайте мириться!"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Суд присяжных: главное дело"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Демоны", 15-я и 16-я серии. Сериал
21.30 "НТВшники"
22.35 "Музыкальный ринг НТВ"
00.15 "Женский взгляд"
01.05 "Непокоренный". Драма
03.10 "Королевская свадьба"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Тюрки России. Республика Хакасия"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Книга сказок"**
**11.30 "Приключения мастера Кун-фу"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30, 23.15 "Орнамент"**
**12.45, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**14.30 "Янгантау"**
**15.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и др.**
**16.15 "Сказ старого воина"**
**16.45 "Души взволнованный сонет". Концерт**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Криминальный спектр"**
**19.15 "Йома"**
**19.45 "Полезные новости"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Криминальный спектр"**
**21.00 "Неслучайные люди"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**23.00 "Замандаштар"**
**23.30 "Петербургские тайны"**
**00.45 Новости (на башк. яз.)**

## 30 АПРЕЛЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.15, 06.10 "Мой ласковый и нежный звер"
06.00 Новости
07.20 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Принц и Золушка. Уильям и Кейт"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Среда обитания"
13.10 "Волга-Волга". Музыкальная комедия
15.10 "К-9: собачья работа". Комедия
17.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
18.00 "Общая терапия", 11-я и 12-я серии
20.00 "Фабрика звезд. Возвращение". Музыкальное шоу
21.00 "Время"
21.15 "Фабрика звезд. Возвращение". Продолжение
22.40 "Прожекторперисхилтон"
01.10 "Бартон Финк"
03.20 "Вспомни, что будет"
05.05 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.15 "Семь стариков и одна девушка"
06.45 "Вся Россия"
06.55 "Сельское утро"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.50 "Субботник"
09.30 "Городок"
10.05 "Дела и люди"
10.30 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.50 "Честный детектив"
12.20 "Северный ветер". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
14.30 "Северный ветер". Сериал. Продолжение
16.15 "Субботний вечер"
18.10 "Шоу "10 миллионов" с Максимом Галкиным"
19.15 "Варенька. И в горе, и в радости". Мелодрама
20.00 "Вести"
20.40 "Варенька. И в горе, и в радости". Продолжение
23.20 "Девчата"
23.55 "Право на убийство". Триллер
01.55 "8 женщин". Музыкальный фильм
04.10 "Комната смеха"

### НТВ

05.05 "Холм одного дерева"
07.40 "Айболит и Бармалей"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Живут же люди!"
09.25 "Главная дорога"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Кулинарный поединок"
11.20 "Квартирный вопрос"
12.20 "Своя игра"
13.15 "Таинственная Россия"
14.10 "Медвежий угол", 1-5-я серии
19.00 "Сегодня"
19.25 "Медвежий угол", 6-9-я серии
23.25 "Шансон года-2011"
02.40 "Честная игра". Приключения
04.35 "До суда"

### БСТ

**07.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 Чайковский П. И. "Щелкунчик". Балет в 2-х действиях. БГТОиБ**
**09.00 "Третий звонок". И. Юмагулов. "Нэркэс". Спектакль БГАДТ им. М. Гафури**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Весы"**
**13.30 "Пожарные Республики Башкортостан - на страже безопасности"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Надо знать!"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Замандаштар"**
**17.30 "Весело живем"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 "Литературный альманах"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Музыкальная шкатулка"**
**19.45 "Весело живем"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Йома"**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Байык-2011"**
**23.00 "Человек с бульвара Капуцинов"**
**00.30 "Свидание с джазом"**

## 1 МАЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Любовь земная"
08.00 "Барышня-крестьянка"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Белые росы". Лирическая комедия
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Принцесса и лягушка"
14.00 "Королева бензоколонки". Комедия
15.30 "Большая разница" в Одессе. Фестиваль пародий
19.10 "Только ты..." Концерт Стаса Михайлова
21.00 "Воскресное "Время"
21.15 "Какие наши годы! 1975"
22.40 "Предложение". Комедия
00.40 "Агора". Приключенческий фильм
03.00 "Психоз"
04.55 "Вспомни, что будет"

### РОССИЯ 1

05.05 "Кубанские казаки"
07.10 "Дело было в Пенькове". Мелодрама
09.00 "Юбилейный вечер Александры Пахмутовой"
13.00 "Северный ветер". Сериал
14.00 "Вести"
14.15 "Северный ветер". Продолжение
17.00 "Парад звезд"
19.15 "Варенька. И в горе, и в радости". Мелодрама
20.00 "Вести"
20.20 "Варенька. И в горе, и в радости". Продолжение
23.20 "Добрый вечер с Максимом"
00.45 "Блюз опадающих листьев". Триллер
03.05 "Мертвый штиль". Драма
05.00 "Городок"

### НТВ

05.25 "Холм одного дерева". Сериал
08.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Едим дома!"
09.25 "Первая передача"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Пир на весь мир"
11.20 "Дачный ответ"
12.20 "Своя игра"
13.15 "Таинственная Россия"
14.10 "Медвежий угол", 10-14-я серии
19.00 "Сегодня"
19.25 "Медвежий угол", 15-19-я серии
00.10 "В зоне особого риска"
00.45 "Елена Троянская". Приключения
04.10 "Сладкий ноябрь". Драма

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Музыка на канале"**
**07.45 З. Хаким. "Вызывали?.." Спектакль ТГАДТ им. Г. Камала**
**10.00 "Тамыр" представляет..."**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Весы"**
**13.30 "Дорога к храму"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Надо знать!"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Замандаштар"**
**17.30 "Весело живем"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 "Волшебный курай"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Память сердца". Майя Курбанова**
**19.45 "Любимое дело"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Забытые войны"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.15 "Специальный репортаж"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.00 "Башкорттар"**
**22.30 "Вечер.com"**
**23.15 "Формула любви"**
**00.45 "Музыка на канале"**

Аh-Аh!

# БЫЛ ҠОШТАРҒА НИ БУЛҒАН?

(Башы 1-се биттә).

Фәҙеттә, ҡара ҡарғалар республикаға 23 мартҡа тиклем ҡайтып бөтә. Әлбиттә, ситкә тайпылыуҙар була, мәҫәлән, ошоға тиклем ҡоштарҙың иң иртә ҡайтыуы 6 мартҡа күҙәтелһә, иң һуңғыһы 3 апрелдә булған. Ә быйыл иһә апрель айы тамамланыуға бара, ә ҡоштар әле булһа юҡ. Шулай уҡ баш ҡалала ҡыҙылтүш, сыйырсыҡ һәм башҡа ҡоштар ҙа күренмәй. Ғалимдар был күренешкә аныҡ ҡына аңлатма бирә алмай. Биологтар фекеренсә, ҡоштарҙың ағыулаңыуы ихтимал. Үткән быуаттың 50-се йылдарында урмандарҙың күпләп пестицид менән эшкәртелеүе ҡоштарҙа генетик кимәлдә сағылып, ҡоштар һанының күпкә кәмеүенә килтереүе мөмкин. "Шулай уҡ ҡоштарға климат шарттарының үҙгәреүе лә йоғонто яһауы бар, ҡышлауҙан ҡайтҡанда дөрөҫ юлдан ситкә тайпылыуҙары ла мөмкин", - тип билдәләй республиканың баш экологы Александр Веселов. "Ҡоштарҙың юғалыуы ҡот осҡос һөҙөмтәләргә килтереүе мөмкин. Улар бөркөттәрҙең аҙыҡ рационында төп урынды биләй, ә бөркөттәргә ашарға аҙыҡ булмауы тәбиғәттең барлыҡ аҙыҡ-түлек сылбырының өҙөлөүенә, ә был үҙ сиратында экологик һәләкәткә килтереүе бар", - ти Виктор Валуев. Шулай уҡ орнитологтар өйрәк, аҡсарлаҡ, ҡауҙы, торна һәм көйөлдөләрҙең һаны ла йылдан-йыл кәмеүенә борсолоу белдерә. Был ҡоштар ҡышлауға күбеһенсә Ираҡ территорияһына китә. Бында булып үткән һуғыштың илдәге флора һәм фауна системаһына тәьсире көслө булды, ә был, үҙ сиратында, ҡышлауға килгән ҡоштарға ла ҙур йоғонто яһай, тип белдерә ғалимдар. Шулай уҡ бөгөн хәрби операциялар барған Ливия, тыныс булмаған башҡа ғәрәп илдәрендә ҡышлаған ҡоштарға ла "еңел" түгел. Бомба шартлауҙары, мылтыҡ тауыштары ҡоштарҙың һаңрауланыуына, ә был уларҙың һауа киңлегендә дөрөҫ йүнәлеште юғалтыуына килтереүе мөмкин.

"Рәсәйҙәге былтырғы түҙеп торғоһоҙ эҫелек һәм янғындар ҙа ҡоштар популяцияһының кәмеүенә килтерҙе. Улар һыуһыҙлыҡтан ғына түгел, ә төтөндән дә ҙур зыян күрҙе. Ә былтыр декабрь айында күп региондарҙа күҙәтелгән ҡарлы ямғырҙар ағас ботаҡтарының, олондарының боҙланыуына килтерҙе һәм олон аҫтарынан үҙенә аҙыҡ эҙләгән ҡоштарға, мәҫәлән, сипылдаҡҡа (һайрар ҡош) бик ауырға тура килде. Шулай уҡ быйыл ҡар ҡатламының үтә ҡалын булыуы ла ҡар аҫтынан аҙыҡ эҙләүсе ҡоштарҙың популяцияһының ҡыҫҡарыуына килтерҙе. Һауа торошоноң анлайышһыҙ үҙгәреп тороуы ҡоштарҙың иҫән ҡалыуына көслө тәьсир яһай һәм киләсәктә уларҙың күпләп кәмеүе ихтимал", - тип иҫәпләй Рәсәй Фәндәр академияһының Зоология институты ғилми хеҙмәткәре, профессор Леонид Соколов.

Бөгөнгө ҡоштар популяцияһында күҙәтелгән хәл һауа торошондағы үҙгәрештәр һәм кешенең тирә-яҡҡа йоғонтоһо хаҡында уйланырға мәжбүр итә. Был проблема орнитолог, зоологтарҙыҡы ғына түгел, ә бөтә кешелекте борсорға тейеш, тип иҫбатлай белгестәр.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.**

БАҠСА

# ӨЙ АЛДЫҢ...
## гөл-сәскәгә күмелһен

**Апрелдә баҡса эштәре артыҡ күп түгел. Ҡар һыуҙары ағып бөтөп, ер кипкәс кенә баҡсағыҙҙы сүп-сарҙан, ҡороған япраҡтарҙан таҙартып ҡуйығыҙ. Был төрлө ҡоротҡостарҙың үрсеп китеүенә юл ҡуймаҫҡа ярҙам итәсәк.**

Шулай ҙа был эштәргә һауа температураһы ныҡлап йылынғас ҡына тотонорға кәңәш итәбеҙ. Яҙғы көн алдаҡсы була, ер бер иреп, бер туңып, күп йыллыҡ үҫемлектәрҙең, ағастарҙың тамырҙарын өшөтөп ҡуйыуы бар. Ер ҡаҙыу, тупраҡты йомшартыуҙы ла ай аҙағына ҡалдырыу хәйерле. Тупраҡтың өлгөрөп етеүен шулай итеп тә асыҡларға була: бер ус тупраҡ алығыҙ һәм уны йомарлағыҙ. Әгәр ҙә тупраҡ таралып төшһә, эш башларға мөмкин. Әммә тупраҡ епшек ҡар кеүек йомарланһа, кипкәнсе көтөргә кәрәк. Тупраҡҡа серегән тиреҫте лә ай аҙағында өҫтәгеҙ. Баҡса участкаһы рельефы тигеҙ булмаһа, уны тигеҙләп сығырға һәм яҡшы итеп ашларға кәрәк. Органик ашламаны орлоҡ сәскән ваҡытта өҫтәргә лә була. Ағастарҙы ҡышҡылыҡҡа сепрәк-сапраҡ менән урап ҡуйған булһағыҙ, уларҙы алып ташлағыҙ, юғиһә, ҡышын ағасты кимереүселәрҙән һаҡларға ярҙам иткән был сара һауаның тигеҙ циркуляцияһын боҙоп, ағас ҡайырыһының серегенә килтерәсәк. Ҡыуаҡлыҡтарҙы икенсе урынға күсереп ултыртырға теләһәгеҙ, быны улар япраҡ яра башламаҫ элек эшләргә кәрәк. Ҡояштың тәүге нурҙары төшә башлау менән баш күтәргән сүп үләндәрен тәпкеләп сығығыҙ.

Сәскә үҫтерергә яратыусыларға хәҙерҙән үк ниндәй сәскәләр сәсеү тураһында уйлап, кәрәкле орлоҡтарҙы һатып алып ҡуйырға кәрәк. Йортоғоҙға илткән һуҡмаҡтың ике яғына сәскәләр ултыртып ҡуйһағыҙ, улар яҙҙан алып көҙгә тиклем һеҙҙе сағыу төҫтәре менән ҡыуандырасаҡ. Бының өсөн күп йыллыҡ сәскәләр, мәҫәлән, пиондар (пионы дөр-дөр тип тә атайҙар), иристар, лилиәләр, флокстар, кәкүк емеше (примула), хризантемалар (әрем гөлө йәки алтын сәскә) ҡулайлы. Бер нисә декоратив үҫемлек, әйтәйек, хоста, монгол сәйе (бадан), ҡылған ултыртһағыҙ, тағы ла матурыраҡ була. Астралар, алиссум, арыҫлан ауыҙы (львиный зев), лобелияны һайлаһағыҙ ҙа үкенмәҫһегеҙ. Үрмәле сәскәләрҙе төркөмләп, йорт буйына сәсегеҙ. Һуғанлы йәки бүлбеле үҫемлектәр, мәҫәлән, крокус, ләлә (тюльпан), сөмбөл (гиацинт), гладиолустар өсөн айырым түтәл әҙерләгеҙ, сөнки улар ҡатнаш түтәлдә насар үҫә.

Бейек булып үҫә торған сәскәләрҙе, мәҫәлән, георгиндарҙы, хризантемаларҙы арткараҡ, башҡа сәскәләргә яҡтылыҡты ышыҡламаҫлыҡ итеп ултыртығыҙ. Алғы планға кәкүк емеше, маргаритка, миләүшәләр сәсегеҙ. Үҫемлектәрҙе төҫө буйынса ла яраштырып ултыртығыҙ, ҡыҙыл, алһыу сәскәләр араһына аҡтарын сәсегеҙ, сөнки аҡ төҫ сағыу төҫтәрҙе тағы ла сағыуыраҡ итеп күрһәтә. Сәскә сәсеү өсөн тупраҡты алдан әҙерләгеҙ, серегән япраҡ йәки үлән менән ашлағыҙ. Ваҡытында һыу ҡойоп, сүп үләндәрен утап, һулыған сәскәләрҙе өҙөп торһағыҙ, уларҙың сәскә атыу осоро тағы ла оҙаясаҡ. Быйыл сәсеп ҡуйһағыҙ, күп йыллыҡ сәскәләр йыл һайын сәскә атып тик ултырасаҡ.

Баҡса ҡырмыҫҡаһына ҡаршы

"ВЕЛИКИЙ ВОИН ГЕЛЬ"

Баҡсағыҙҙағы ҡырмыҫҡаларҙан нисек ҡотолорға белмәйһегеҙме? Ысынлап та, баҡса ҡырмыҫҡалары менән көрәшеүе еңел түгел, бер нисә көндән улар янынан барлыҡҡа киләсәк. **"ВЕЛИКИЙ ВОИН - ГЕЛЬ"** һеҙҙе был бәләнән ҡотҡарасаҡ. Был гелдең составындағы матдәләр ҡырмыҫҡаларға шул тиклем оҡшай, улар уны үҙҙәре генә ашап ҡалмай, ә ояға алып ҡайтып, уның менән башҡаларҙы ла "һыйлай". Шул рәүешле баҡса ҡырмыҫҡаларының тотош колонияһы юҡҡа сыға. Файҙаһы тейһен өсөн гелде картон киҫәгенә буяп, ҡырмыҫҡаларҙың оялары эргәһенә һалырға була. Гелде ағас олондарына ла һөртөргә кәрәк. Әгәр ҙә баҡса ҡырмыҫҡалары йортоғоҙға ла инһә, гелде пунктир линиялар буйлап тыштан һәм эстән өй тирәләй һөртөгөҙ.

**"ВЕЛИКИЙ ВОИН"** геле өй ҡырмыҫҡалары менән көрәшеү өсөн дә ярап ҡала.

**Магазиндар һәм баҙарҙа һорағыҙ.**

Тауар сертификацияланған.

ИҒЛАНДАР

Продается сад-дача: двухэтажный жилой дом 6х9 из бруса, участок 10 соток, на участке баня, насаждения. Находится в Миловке, СНТ "Озерное". **Цена 1 900 000 руб.**



**8-919-15-90-171, 8-917-35-31-930.**

* * *

Предлагаем пластиковые окна, шкаф-купе, гарнитуры, жалюзи, алюминевые конструкции, ж/б кольца, тротуарные плитки, ограждения, межкомнатные двери, натяжные потолки, теплицы. Производим ремонт квартир и коттеджей. **8-905-30-85-550, 8-917-35-31-930 Рушан.**

КОТЛАЙБЫҘ!



Йәмле Ейәнсура районы Сирғол ауылында йәшәүсе кешебеҙ **Фуат Фәтхулла улы Толомбаев** ғүмер байрамы - оло юбилейын билдәләй. Алдынғы ҡарашлы, тырыш, һис ниндәй эштән ҡурҡмаған, кешелекле һәм кеселекле, яҡындары өсөн хәстәрлекле, ярҙамсыл кеше ул атайыбыҙ. Әсәйем Гөлсәсәк Махийән ҡыҙы менән тормош һынауҙарына бирешмәйенсә, рухи ныҡлыҡ һаҡлап, тырышып, башҡаларға өлгө булып йәшәй улар.

Беҙҙең өсөн һәр ерҙә үрнәк булған ҡәҙерле кешебеҙҙе юбилейы менән ҡотлап, уға ныҡлы һаулыҡ, күңел тыныслығы, бәхет-шатлыҡтарға ғына күмелгән оҙон ғүмер, эшендә тик уңыштар, бар уй-ниәттәреңең тормошҡа ашыуын теләйбеҙ. Киләсәктә лә әсәйеҙ менән бергәләп ҡыуаныстарға тулы имен тормошта, иңгә-иң терәшеп, беҙгә аҡыллы кәңәштәрегеҙҙе биреп, рухи көс өҫтәп, терәк-таяныс булып оҙон-оҙаҡ, иҫән-һау йәшәгеҙ!

*Ғүмерҙәрең булһын бәхетле,*
*Бәхеттәрең булһын ғүмерле!*
*Ерҙә булған бөтә изгелекте,*
*Бирһен һиңә Хоҙай был көндә!*

**Донъялағы бар изге теләктәр менән ҡыҙың Ләйсән, кейәүең Айҙар, ейәнең Искәндәр.**

* * *

Апрель айында тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙҙы - **Баймаҡ районы** Иҫке Сибай ауылынан Зәкиә Йосоповаһы, Ярат ауылынан Зәлифә Ҡаҫҡыновананы, Таулыҡай ауылынан Заһира Оморҙаҡованы, Йәрмөхәмәт ауылынан Тәнзилә Мөьминованы, Урғаҙа ауылынан Фәриҙә Мутаеваны, Әбделкәрим ауылынан Нурислам Әхмәтовты, **Миәкә районы** Илсеғол ауылынан Гүзәл Ниғмәтуллинаны, **Ғафури районы** Үзбәк ауылынан Биктимер Шәриповты, Йөҙимән ауылынан Ләлә Шәмсетдиноваы, **Ҡырмыҫҡалы районы** Ҡарламабаш ауылынан Рәүф Аҫылғужинды, **Нуриман районы** Яңы Субай ауылынан Зилә Яхинаны, **Салауат ҡалаһынан** Сәүиә Бикмөхәмәтованы, **Благовар районы** Һынташтамаҡ ауылынан Дилә Ғизәтуллинаны, **Ауырғазы районы** Мораҙым ауылынан Рәсимә Һатлыҡованы, Аҫаубаш ауылынан Эльвира Малакаеваны, **Ейәнсура районы** Малай Муйнаҡ ауылынан Йәмил Аҡбашевты, Фәнил Аҡбашевты, **Хәйбулла районы** Бакаловка ауылынан Раил Иҫәнъюловты, Нәғимә Мортазинаны, **Учалы районы** Һәйтәк ауылынан Фәжет Шаһиевты, **Стәрлетамаҡ районы** Ишпарс ауылынан Әлфинә Исхаҡованы, **Федоровка районы** Батыр ауылынан Р. Усманова-Багаеваны, Юрматы ауылынан Р. Тимербулатованы, **Әбйәлил районы** Амангилде ауылынан Раушания Ҡаһармановананы, Илүзә Басировананы, **Өфө ҡалаһынан** Фәтих Азаматовты, **Мәләүез районы** Аптраҡ ауылынан Тәнзилә Карапаеваны, **Дыуан районы** Мәсәғүт ауылынан Рәмилә Яновананы, Иҫке Хәлил ауылынан А. Зариповананы, **Мәсетле районы** Оло Ыҡтамаҡ ауылынан Гөлфиә Мостафинананы, Ирина Ғәләүеваны, М. Кәбировананы, **Туймазы районы** Нөркәй ауылынан Марат Рәхимовты, **Благовещен ҡалаһынан** Ләйсән Закировананы, **Баймаҡ ҡалаһынан** Бүләкбикә Хәйбуллинаны, **Бөрйән районы** Ҡолғона ауылынан Хатип Вәлиевты, **Стәрлебаш районы** Баҡый ауылынан Азат Дәминовты, **Белорет районы** Мәхмүт ауылынан Әхмәр Вәлиуллинды ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Тыныслыҡта, муллыҡта, именлектә, ҡыуанyслы миҙгелдәр генә кисереп йәшәргә яҙһын!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**23 апрель "Әй әттәгенәһе, ирем ҡайтты!"** (Н. Ғәйетбай), комедия

**26 апрель "Минең ғаиләм"** (Т. Дәүләтбирҙина), мелодрама

**29 апрель "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия

**30 апрель "Аты барҙың дәрте бар"** (Н. Ғәйетбай), комедия

Театр коллективы ошо көндәрҙә Төркиәнең Конья ҡалаһында үткән "Мең һулыш һәм бер тауыш" IV Халыҡ-ара төрки театрҙары фестивалендә ҡатнаша. Театр быйыл унда "Әхмәтзәки Вәлиди Туған" (Н. Асанбаев, А. Абушахманов) тарихи драмаһын күрһәтәсәк.

✓ *Асыу - ҡыҫҡа ваҡытлы аҡылһыҙлыҡ.*

*(Гораций).*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!



# КҮҢЕЛ ҠЫЛДАРЫН ТИБРӘТҺЕН...

## Миңлеғәфүр ҡумыҙы

**"Бик борон заманда бер бай йәшәгән. Уның ике ҡыҙы булған. Яҙ етеп, бар донъя йәшел хәтфәгә төрөнгәс, улар йәйләү ҡыҙ-ҡырҡыны менән тауға сығып, күңел асҡан. Бикбай исемле көтөүсе егет уларҙы ағас ҡумыҙҙа уйнап бейеткән..." Әкиәттең аҙағы нисек тамамланғанын белгегеҙ килһә, 28 апрель көнө "Нефтсеrange" мәҙәниәт һарайына килегеҙ. Унда ҡумыҙсыларҙың халыҡ-ара һәм республика конкурстары, Ш. Бабич исемендәге Республика дәүләт йәштәр премияһы лауреаты Миңлеғәфүр Зәйнетдинов та ошо әкиәттәге егет кеүек Өфө тамашасыһын бейетеп, күңелен асыу ниәте менән "Сыңла, ҡумыҙ!" тип аталған беренсе концертына саҡыра.**

Халҡыбыҙҙың боронғо музыка ҡоралдарының береһе булған ҡумыҙ бөгөн ҡурай кеүек үк киң билдәлелек яулай бара. Ҡумыҙсылар һәм өҙләүселәр араһында бәйгеләр уҙғарыла, әммә ундай конкурстарҙы бар халыҡҡа күрһәтеү мөмкинлеге юҡ әлегә. Шуға ла оҫта ҡумыҙсылар, ҡурайсылар, думбырасылар, музыканттар, йырсылар, өҙләүселәрҙән төҙөлгән "Ирәмәл" этник төркөмө халыҡты ҡумыҙ сәнғәте менән яҡынданыраҡ таныштырыу өсөн был музыка ҡоралына арналған матур тамаша ойоштороға ҡарар итә лә инде. "Халҡыбыҙға ҡумыҙ төрҙәрен күрһәтеү, уларҙың тауыштарын ишеттереүгә ҡоролған проект эшләргә тигән теләк күптән күңелдә йөрөй ине. Күптәр ағас һәм тимер ҡумыҙҙы ғына белә, ә минең коллекциямда улар утыҙҙан ашыу, сөнки донъя буйынса ҡумыҙҙа йөҙҙән ашыу милләт уйнай", - ти Миңлеғәфүр Зәйнетдинов.

Концерттың беренсе өлөшөндә халҡыбыҙҙың боронғораҡ тарихи дәүеренә ҡараған музыка ҡоралдары күрһәтеләсәк, боронғо йырҙар йырланасаҡ. Унда ҡумыҙ башлыса ҡурай, думбыра, ҡыл-ҡумыҙ, баянға ҡушылып сыңлаһа, икенсе өлөштә ул замансараҡ, Европа стилендәге музыкаға, саксофон, скрипка моңона ҡушылып яңғыраясаҡ. Рәйес Низаметдинов, Илһам Байбулдин, Урал Мортазин, Гүзәл Үмәрғәлина, Урал Иҙелбаев, Илсур Тайсин, Зәлиә Ғәниәтуллина, Әлфиә Кәлимуллина, Гөлназ Ҡәҙербирҙина, Илшат Яхиндың дәртле сығыштары ла тамашаға үҙенсәлекле төҫ бирмәксе. Бынан тыш, концертта Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернатының - ҡумыҙсылар, БДУ-ның - ҡурайсылар ансамблдәре, Мәсетле районының йәш ҡумыҙсылары ла ҡатнашасаҡ. Йәғни, тамашасы был көндә халыҡ араһында һаман да ҡатын-ҡыҙ, балалар музыка ҡоралы булараҡ ҡына иҫәпләнгән ҡумыҙ сыңын үҙ эшенең оҫтаһы булған ысын ир-егеттәр башҡарыуында ишетәсәк. Халыҡ моңо дәртле көйҙәр менән үрелеп барасаҡ, шуға ла бер кемгә лә бойоғоп ултырырға мөмкинлек булмаясаҡ, ти концертты ойоштороусылар.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**"Әлегерәк ҡала башҡорттары "Аҡ тирмә" мәҙәни үҙәгенә килеп, бейеп-йырлап, дәртләнеп ҡайта торғайны. Был концертта ошо күркәм йоланы тергеҙергә булдыҡ", - тигәйне Миңлеғәфүр Миңлеәхмәт улы. Шулай булғас, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, бындай мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырмағыҙ. "Ирәмәл" этник төркөмө һеҙҙең барығыҙҙы ла үҙ байрамында көтөп ҡала.**

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# ТОҘҺОҘ ӘЛБӘМЕ,

## әллә шәкәрлеме?

**"Әсәйем лөғәте" тигән рубрика ниңә кәрәк икән, тип уйлай инем тәүҙәрәк. Бер көн телевизорҙан Яңауыл районының башҡорт ауылдары тураһындағы телетапшырыуҙа "кинйә" һүҙенең башҡорт һүҙе булыуға кире ҡаҡҡыһыҙ тарихи бер дәлил булғанына шаҡ ҡаттым. "Беҙҙең ауыл башҡорт ауылы, сөнки ауылдың күпселеге Кинйәбулатовтар, Кинйәбаевтар. "Кинйә" һүҙе туғандаш милләттә юҡ. Татарса уҡыу сәбәпле, татарса һөйләшһәк тә башҡорттарбыҙ", - тип һөйләне ауыл аҡһаҡалы. Шунда "Әсәйем лөғәте" кәрәк, лөғәттәрҙе йыйыу, тергеҙеү, теркәү мөһимлеген аңланым. Онотола башлаған төбәк һүҙҙәре күп икән шул.**

• Әсәйем мәрхүмә манный бутҡаһын әлбә ти торғайны. Шуға бәйле бер мәҙәк тә һөйләп ала торғайны. Әлбәне бешереү заманында үҙенә күрә оло оҫталыҡ талап иткән. Кемдер уны тәмле, төйөрһөҙ итеп бешергән, кемдәндер бик килеп сыҡмаған. Бер хужабикә бутҡаны тәү тапҡыр бешерергә була, тик тоҙ һалып бешерәләрме, әллә шәкәрме икәнен белмәй икән. Күршеһенә инеп:

- Тоҙһоҙ әлбә, ни эш бөтөрәһең? - ти.

- Нишләп мин тоҙһоҙ әлбә булайым? Әлбәгә шәкәр һалып бешерәләр, - ти күршеһе.

- Мин бит шаярттым, эй ошо шаяртыуҙы ла аңламай, - тип ҡайтып китә килен кәрәкле мәғлүмәтте шулай алыуына ҡыуанып.

• Бәсәл - оһолһоҙ кешегә шулай тиҙәр. Әйбер тотһа, тотҡан әйбере төшөп китә, тота алмай...

• Ғәйетте айыт байрамы тиҙәр беҙҙең яҡта. Айыт көнө балалар өй берләп өйҙән-өйгә йөрөй. Өй хужалары тәмтом менән һыйлайҙар. Ошо өйҙән-өйгә йөрөүҙе - әйенселәү тиҙәр. Балалар әйенселәп йөрөй, тиҙәр.

• Баҡыяс - балаға яңы матур күлдәк тегеп кейҙергәндә әйтәләр. Яңы күлдәк кейгән бала туғандары, күршеләренә инеп, күлдәк ҡотлата. Улары күлдәктән тотоп, "баҡыяс, күлдәген туҙғаҡ, үҙең һау-сәләмәт бул", тиҙәр.

• Күлдәккә һалынған ҡат-ҡатты (рюшь, әбрәкә) беҙҙә йәрпесәк, мәскәү тиҙәр. "Өс ҡат йәрпесәк һалып тектерҙем", йә иһә "Ике ҡат мәскәү һалдырҙым" тиҙәр ине.

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯҠШЫ ЕТӘКСЕ...

## нисек эшләргә икәнен күрһәтеп бирә

Килешеп эшләгәндә әһәмиәтһеҙ генә эштәр ҙә күтәрелә, килешеү булмағанда бөйөк эштәр ҙә һәләк була.

**(Гай Крисп, б.э.т. 86-35 йй.)**

Насар етәксе нимә эшләргә кәрәк икәнен белә. Ә яҡшыһы быны нисек эшләргә икәнен күрһәтә.

**(С. Орджоникидзе).**

Һәр хәҡиҡәтте лә ҡысҡырып әйтеп булмай: берәүһен үҙең өсөн әйтмә, икенсеһен икенсе берәү хаҡына өндәшмә.

**(Бальтасар Грасиан).**

Ҡаршы тора алғанға ғына таянырға мөмкин.

**(Блез Паскаль).**

Һинең хаталарыңды эҙләгән дошманың ул хаталарҙы йәшерергә тырышҡан дуҫыңдан файҙалыраҡ.

**(Леонардо да Винчи).**

Александр Македонский кемдер икенсе берәүҙе ғәйепләп һөйләгәндә бер ҡолағын ҡаплар булған. Унан ни өсөн шулай эшләүен һорағас, ул: "Икенсе ҡолағымды ғәйепләнеүсене тыңлар өсөн һаҡлайым", - тип яуап бирер булған.

Тәнҡитләгәндә, фекерҙе тәнҡитлә, уның авторын түгел.

Асыу - ҡыҫҡа ваҡытлы аҡылһыҙлыҡ.

**(Гораций).**

Ҡулына балта йә гусли тотҡан кешене тәүҙә йә музыкант тип әйтеп буламы? Шуның кеүек, аҡыллы һүҙ һөйләгән кешене лә аҡыллы тип атарға ашыҡма.

**(Эпиктет).**

**Шулай итеп, риүәйәт...**

**Көнсығыш хакимына кемдер берәү үҙенең яҡын-тирәһендәге ҡомһоҙ һәм тоғро булмаған хеҙмәткәрҙәрен власть менән бөҙолмаған башҡа кешеләргә алыштырырға кәңәш биргән. Күпмелер уйлап торғандан һуң хаким былай тип яуаплаған:"Яңыраҡ мин баҙарға барҙым һәм себендәр һырып алған хәйерсене күрҙем. Мин, әлбиттә, уға ярҙам итергә теләнем һәм уның битендәге себендәрҙе ҡыуған булдым. Ә хәйерсе миңә былай тине: "Йә, әфәндем, был ҡылығың менән нәмәгә өлгәштең инде? Мине һырып алған себендәр минең ҡанымды һурып туйғайны һәм тынысланғайны. Хәҙер уларҙың урынын яңылары, астары биләйәсәк һәм миңә шундай ҡанығыу менән ябырыласаҡ, түҙеп кенә тор!".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 6206
Заказ 1521